*Суфиян* **ПОВАРИСОВ**



# Ватан мөхәббәте

## Повесть-эссе

*Ватан мөхәббәте — Аллаһу ғиззәте,*
*Әҙәм балаһының күркәм тәғлимәте.*
*Эй бәндәләр! Иманлы булайыҡ гелән,*
*Һаҡлайыҡ Ватанды алтын намыҫ менән!*

I

Балҡып ҡояш сыҡты. Алһыу нурҙары мина, снаряд, бомба менән яраланған ҡырҙарға ятты, Днепр ярҙарындағы ҡыуаҡтарға һарылды.

Совет ғәскәрҙәре әле йылғаның һул яғында. Уларға уң яҡ ярға сығырға, фашист йыландарының ояһын туҙҙырып, арыҫландай алға ырғырға приказ бирелгән. Днепр был хаҡта беләме? Юҡ, әлбиттә. Былай уйлау ҙа хаталыр, бәлки. Тәбиғәттең йәне бар уның. Бар. Тауҙар бер-береһе менән серләшә. Урмандар ниндәйҙер йыр яҙа, көй сығара. Һандуғастар ул моңдо маҡтап һайрай. Йондоҙҙар донъяны матурлау, уға нур һибеү өсөн яналар. Тау күкрәген бәреп сыҡҡан шишмә киң донъяға сәйәхәт итә. Днепр йөҙләгән шишмә, ваҡ йылғалар ҡушылыуынан ҙурайған. Әле ул яй ғына, үҙ ғорурлығын һаҡлап, тыныс-моңһоу, иртәнге ҡояштың йомшаҡ, алһыу нурҙары менән иркәләнеп аға.

Днепрҙың теге яҡ ярында күпме аждаһа ауыҙ асып тора. Гитлер: «Днепрҙы кире ағыҙһаҡ ағыҙырбыҙ, мәгәр рус ғәскәрҙәрен был яҡҡа сығармабыҙ», — тигән. Һуңғы нөктәһе, йәнәһе. Хәҙер көнбайышҡа бер ҡарыш та атлау булмаясаҡ, имеш. «Ил кискән күперҙән һин дә кис», — тиҙәр. Әммә бында күпер юҡ. Теге яҡта мең башлы аждаһа ажғырып торһа ла, йөҙөп сығырға тейешһең.

Ләкин әле ике яҡта ла тынлыҡ. Беҙҙең һалдаттар ял итә. Михайловкалағы ҡаты һуғыштан һуң улар фрицтарҙы бына ошонда килтереп ҡыҫырыҡланы. Мәгәр береһе лә әсирлеккә бирелмәне. Алдан әҙерләп ҡуйылған һалдарға, кәмәләргә тейәлешеп сығып киттеләр. Әлбиттә, беҙҙекеләрҙең уҡтары уларҙы сүпләп торҙо. Днепр һыуы ҡыҙыл ҡан менән аралашты. Теге яҡҡа сығып еткәнсе уларҙың сафтары ныҡ һирәгәйҙе.

Был ваҡытта яҡтырып килә ине инде. Хәҙер ҡояш шаҡтай юғары күтәрелде. Шулай ҙа Ферапонтов йоҡларға ашыҡманы. Йылға янына тағы ла килде.

Сал Днепр ҙа ана: «Ҡайҙа һеҙ, батыр ир-егеттәр, ата-әсәң торған ер — кендек ҡаның тамған ер бит ул, ниңә уны яттар ҡулына бирәһегеҙ?!» — тип әрней кеүек.

Шулай хискә бирелеп торғанда, уның янына полк командиры килеп баҫты:

— Дошман яғына ҡарап уйланыу бер ҙә юҡҡа түгелдер?..

— Так точно, иптәш гвардия майоры!..

— Ә шулай ҙа?..
— Бер идея бар.
— Тыңлап ҡарайыҡ.
— Михайловка янында юғалтыуҙар күп булды...
— Ә бында булмаясаҡмы?
— Уныһы беҙҙән тора, иптәш гвардия майоры!
— Дөрөҫ. Мәсьәләгә конкретыраҡ кил.
— Немецтар ултыра алмай ҡалған кәмәләр, һалдар бар. Улар ғына етмәй. Үҙебеҙ ҙә яһаясаҡбыҙ. Һалдат балтанан да аш бешерә белә. Рәтен табырбыҙ. Тик...
— Нимә «тик»? Йә әйт, ниндәй яңылығың бар?
— Иртәнән бирле уйланам. Иң ҡурҡынысы — теге яҡҡа беренсе аяҡ баҫҡан кешегә... Уның аяғы тайып киттеме — үлем тигән һүҙ. Мин урын һайланым, иң яҡшыһы — ана теге тал ҡыуағы. Унан һул яҡтараҡ — аҙ ғына ҡомлоҡ. Шунан күтәрелеп китеп, беренсе сыҡҡан кеше пулеметын ана теге ҡалҡыуыраҡ урынға ҡуйырға тейеш. Дошман һиҙеп ҡалһа, уға туп-тура һөжүм итергә мөмкин. Ут асып, килгән береһен ҡырып һала бирә. Был ваҡытта инде башҡалар ҙа сығып өлгөрә.
— Һин бик еңел уйлайһың кеүек...
— Башҡа варианттар кәрәкме? Ауырырағы?
— Улар миндә лә аҙ түгел. Ярай, һин төбәгән урын иң ҡулайы булһын, ти. Тәүҙә кем аяҡ баҫырға тейеш һуң унда?
— Рөхсәт итһәгеҙ — мин.
— Бер үҙең?
— Расчет менән...
— Батырлыҡ күрһәткең килә инде?
— Александр Матросов дошман амбразураһын кәүҙәһе менән герой булыр өсөн ҡапламаған бит, иптәш гвардия майоры. Өфө эшсеһе Попов та «тигр» ҡаршыһына шул ниәт менән бармағандыр...

Майор шәйләмәй ысҡындырған һүҙҙәре өсөн үкенеп ҡуйҙы. Дөрөҫөн генә әйткәндә, беренсе ут ауыҙына Ферапонтов расчетын ебәреү тураһында ул үҙе лә уйлана ине. Ләкин һаман хәл итеп бөтөрмәгәйне. Сөнки аҙ ғына ваҡыт эсендә иң ауыр операцияларға ташланған сағы күп булды инде уның. Ат сабыштырыу түгел был... Шулай ҙа майор, оҙаҡ ҡына уйланып торғас, Ферапонтовтың ҡулын ҡыҫты:
— Уңыш теләйем!
— Ышаныуығыҙ өсөн рәхмәт, иптәш гвардия майоры!

## II

Уҡсылар полкы — Днепрҙан ике йөҙ метр самаһы алыҫлыҡтағы уйһыулыҡта. Дошман уларҙы күрмәй. Сөнки йылға менән уйһыулыҡ араһында ҡалҡыулыҡ та, ҡыуаҡлыҡтар ҙа бар. Әммә фрицтар бында совет ғәскәрҙәре ятҡанлыҡты белә: йылғаны сыҡҡанда арт яҡтан «күстәнәс»те ана нисек йомарт сәсеп торҙолар. Тик улар сентябрҙең гәлсәрҙәй ошо саф һауалы көнө үтеп, ҡояш алһыу нурҙарын балҡытып байығас, зәңгәрһыу күк йөҙөнән меңләгән йондоҙҙар нур һипкәндә, сихри төн тынлығында «күстәнәс»тәрҙе үҙҙәре мулыраҡ итеп алып киләсәктәре тураһында баштарына ла килтермәйҙәр. «Днепр валы» немецтар тарафынан алты ай буйына төҙөлдө. Уны шайтан да емерерлек түгел...

«Һыу туҡтар, дошман туҡтамаҫ», — тигән бер полководец. Көрәш кемдеңдер хурлыҡлы рәүештә баш эйеүе менән тамамлана. Совет ғәскәрҙәрен туҡтатыр көс юҡ. Йылға аша «ҡаш һикертешеүҙе» оҙаҡҡа һуҙып булмай.

Аҙыраҡ ял иткәс, беҙҙекеләр дәррәү эшкә кереште: берәүҙәр, тал ҡырҡып, нимәлер этмәләй, икенселәр, ташландыҡ ҡайыҡ табып, шуны рәтләп маташа; өсөнсөләр һал яһау өсөн ҡайҙандыр бүрәнә ташый. Ферапонтов та үҙ расчетына һал эшләргә булды. Бының өсөн бүрәнә, таҡта, тегенеһен-бынычын табырға кәрәк. Яҡындағы ауылдан улар бүрәнә ташыны. Командир күберәк йыуан башын күтәрергә тырышты. Пулемет расчетының беренсе номеры Александр:

— Мин үҙем... иптәш өлкән сержант... — тип ныҡышһа ла, Ферапонтов ирек бирмәне, йыуан башты үҙ яурынына һалды.

Александр менән Ферапонтов күптән таныш. Тәүге осрашыу 1927 йылда булды. Бәләбәйҙәге беренсе һанлы туғыҙ йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Владимир Ферапонтовҡа математиканан уҡытырға хоҡуҡ бирелде. Ләкин уны тәүҙә ошо ҡалалағы балалар колонияһына тәрбиәсе-уҡытыусы итеп ебәрҙеләр. Башта эш ифрат ауыр булды. Колонияға урлашҡан, һуғышып тәртип боҙған, юлдан сыҡҡан балаларҙы килтереп ябалар. Уларҙың әле танау аҫтына мыйыҡ та сыҡмаған Владимир кеүек йәш тайға баш биргеһе килмәй. Бер һүҙеңдән мең ғәйеп табып, ихахай ҙа михахай, шырҡ та мырҡ көлөргә тотоналар. Бер ваҡиғанан һуң Владимирҙың абруйы арта төштө. Көндәрҙән бер көндө, ике аҙна эшләгәс, һуң ғына колониянан ҡайтырға сыҡты. Бер ҡараңғы мөйөштә кемдер уның башына килтереп һуҡты. Владимирҙың күҙ алдында ут шарҙары бейеште. Иҫерек кешеләй айҡалып-сайҡалып торҙо ла, ергә ауҙы. Шундуҡ ниндәйҙер яуыз ҡулдарҙың ашыға-ашыға хәрәкәт итеүен һиҙҙе: тимәк, уны сисендерәләр.

— Теймәгеҙ... үҙем... — тигән һүҙҙәрҙе көс-хәл менән әйтә алды ул. Ҡараҡтар әллә «миһырбанлы», әллә тәжрибәһеҙ булды — уға торорға ярҙам иттеләр. Алдында ун биш йәштәр самаһындағы өс үҫмерҙе күргәс, ул иркен тын алып ҡуйҙы: көрәшергә мөмкин. Ҡараңғыла уларҙың йөҙҙәрен шәйләп булмай. Шулай ҙа алама-һалама кейемле ҡыл ҡойроҡ икәнлектәрен аңланы Владимир. Мәктәптә ул йүгереү, һикереү, саңғы ярыштарында гел беренселекте алды, үҙен физик һәм рухи яҡтан сыныҡтырҙы. Инде килеп, уҡытыусы булып алғас, ошо йолҡоштар алдында түбәнһенеп торорғамы? Тороп йүгереүҙе килештермәне: егет ғорурлығын юғалтыу була. Тиҙ генә ниндәйҙер хәйлә уйлап табырға кәрәк ине. Быға саҡлы ла ауырлыҡтар менән осрашманы түгел, һәр ваҡыт унан сығыу яйын таба белде. Яҡшы һүҙ тештәрен ыржайтып торған усал этте лә йыуашландыра.

— Бына нәмә, малайҙар, бөтөнләй сисендермәгеҙ... Шәрә ҡалыу килешмәй бит инде... Пинжәгемде бирәм... Кеҫәһендә бер төргәк аҡса бар... Ул һеҙгә йыл буйы тамаҡ туйҙырырға етәсәк... Кейенеп тә алырһығыҙ... Мин иртәгә Өфөгә китергә тейеш инем... Аҡсаны таныштарым бирҙе...

Ул дөрөҫөн әйтте. Аҡса ҡулъяулыҡҡа төрөлгәйне. Пинжәген һалды ла, оҙонораҡ буйлыһына тотторҙо Владимир. Әммә психологик атака яһауҙан туҡтаманы. Ҙурлап күңелдәрен күтәреү өсөн «егеттәр» тигән һүҙҙе лә ҡыҙғанманы:

— Ярай, егеттәр, осрашырбыҙ әле, яҡшылығығыҙҙы онотмам, сисендермәнегеҙ бит, аҡса мәсьәләһендә ярҙам итермен, рәхәт йәшәрһегеҙ...

Бер төргәк аҡса ҡулына эләккәс, пинжәкте Владимирҙың битенә бәрҙе ҡараҡ. Эткә һөйәк менән ороу кеүек булды был. Ана шунда ҡыҙып китте Ферапонтов. Ҡулындағы пинжәген ергә ырғытты ла, аҡса биргәндең эсенә типте. Дуҫ ашта беленмәй, яуҙа беленә, тигәндәй, икеһе, арыҫланға ташланған ахмаҡ эт балаһы шикелле, Володяға килеп йәбеште. Ул арала тибеп осоролғаны тороп йүгерҙе. Был ҡурҡыныс ине. Сөнки аҡса уның ҡулында. Былар ҙың икеһен ике яҡҡа һуғып тәгәрәтте лә, тегенең артынан йүгерҙе Владимир. Ҡыуып еткәс, бер һуғып

ебәреү менән ҡулындағы аҡса төргәген ҡайырып алып, салбар кеҫәһенә һалып ҡуйҙы. Ул арала теге ике «әтәс» тағы ла йүгереп килеп етте. Владимир өсөн хәҙер ҡурҡыныс юҡ ине инде. Был өс «кескәй әтәскә» бирешмәйәсәген белә ул. Ләкин һуғышҡы килмәй. Был ваҡытта улар яҡтыраҡ урынға сыҡҡайнылар инде. Малайҙарҙың өсөһөн дә яҡшы күрҙе Владимир. Ҡейемдәре ҡылҡа, ябыҡтар. Йөҙҙәре бысранып бөткән. Ялан баштар. Уларҙың иҫәбе һаман әле һуңғы көстәрен һынап ҡарау ине...

— Бына нәмә, малайҙар, яҡшы саҡта һыпыртығыҙ, мин бит спорт мастеры, һуғышыу һеҙҙең файҙаға булмаясаҡ. Тыңламаһағыҙ, милиция ҡулына алып барып тапшырам, — тине ул.

Уларға былай китеү ғәрлек ине, билдәле. Ләкин «милиция» тигән һүҙ йөрәктәрен тетрәтте. Тап шул ваҡыт кемдәрҙеңдер һөйләшә-һөйләшә килеүе ишетелде. Ҡараҡтар, баштарын эйеп, алпан-толпан атлап, китеп барҙылар. Ҡурҡаҡ юрған аҫтында йоҙроҡ күрһәтеп ята, тигәндәй, ҡараңғыға күмелгәс, быларҙың ҡарлыҡҡан тауышы яңғыраны:

— Осрашырбыҙ әле, гад...

Булған хәлде Ферапонтов милиция бүлегенә барып әйтте. Ул инде хәҙер ифрат ярһыу, тулҡынлана ине. Хатта ҡабат барып, пинжәген алырға ла оноҡҡан.

Аҙна буйы эҙләп, таптылар теге өс малайҙы. Быға Ферапонтов үҙе лә ярҙам итте. Судтан һуң уларҙы балалар колонияһына килтерҙеләр.

— «Осрашырбыҙ әле» тигәйнегеҙ, бына тағы ла осраштыҡ, — тип ҡаршы алды уларҙы Ферапонтов.

## III

Владимир Петрович, йәш булһа ла, үҙен ҙурҙарса тота белә ине. Быға тормош ауырлыҡтарын бала саҡтан уҡ яурынға йөкмәү, уларҙы ыңғырашмайынса тартыу ярҙам иткәндер. Атаһы 1918 йылда тифтан үлеп киткәндә, уға ни бары туғыҙ йәш ине. Дүрт бала ҡалдылар. Иң ҙурыһы — Владимир. Тиф менән әсәһе, бер һеңлеһе лә ауырыны. Ярай әле, әсәһе иҫән ҡалды.

Бик ауыр йылдар ине. Бәләбәй әле аҡтар, әле ҡыҙылдар ҡулына күсә. Аслыҡ. Ялanғаслыҡ. Хәйерселек. Ҡан ҡойош. Һуйыш. Үлтереш. Малайҙар бер ваҡыт аҡтарҙың ҡыҙылгвардеецтарҙы стенаға терәп атҡандарын үҙ күҙҙәре менән күреп торҙо. Уларҙың йөрәгендә нәфрәт, үс тойғоһо ҡайнаны. Ләкин туғыҙ—ун йәшлек бала ни эшләй ала? Көслө атыш ваҡытында ла малайҙар, ҡурҡаҡ ҡуян шикелле, ҡайҙалыр боҫоп ятманы. Ут эсендә булырға тырыштылар. Ҡалаға Чапаев дивизияһы килгәнлекте ишеткәс, малайҙарҙың йөрәктәре урынынан ҡупты. Чапай хаҡында улар ҙурҙарҙан ишетеп белә ине. Башта уның даны, шөһрәте, ғәйрәте ел-дауыл булып иҫеп килде ҡалаға. Һәй, һөйләйҙәр ҙә инде: «Ҡылысы менән бер һелтәнһә, йөҙ аҡ ҡарға ҡырыла»; «Бер ҡысҡырһа, мең дошмандың ҡолағы тона»; «Утта янмай, һыуҙа батмай»; «Уның янында торған кеше лә батырға әйләнә»... Шундай «ҡанатлы» һүҙҙәр йөрөнө ҡолаҡтан ҡолаҡҡа. Ә инде ҡалаға үҙе килгәс: «Ну, Чапай кикертә аҡтарҙы»; «Көл итә»; «Иҙмәләрен иҙә»; «Утын ағасы урынына турай», — тип һөйләнде Бәләбәй халҡы. Был ваҡытта малайҙарҙың бөтә хыялы Чапайҙы күреү ине. Улар, ем һағалап йөрөгән бәпкәләр кеүек, Чапай урынлашҡан йорт тирәһен әйләнеп кенә торҙолар. Чапайҙы бер күреп ҡалыу бәхет ине улар өсөн. Күрә былар. Әммә күҙ туйғансы түгел. Йәшен ташы менән бер икән, ялт итеп кенә ҡала. Бер баҫаһы урынға биш баҫа. Ана кемдә дәрт. Әйтерһең, терегөмөш йоҡкан. Шул уны ярһыта, һикертә, үрле-ҡырлы килтерә. Юҡ, кәмит ҡараған кеүек ҡыҙыҡһынып тороу ғына ҡәнәғәтләндермәне

малайҙарҙы. Улар бер ваҡыт Чапай янына яҡын уҡ килергә булдылар. Тик һаҡсы ебәрмәй. Шулай ҙа морон һалындырып ҡайтып китмәнеләр, көттөләр ҙә көттөләр. Бына ул бер ваҡыт тағы ла ишектән сыҡты. Тыҡ-тыҡ баҫып китеп бара. Шуҡ малайҙар уның юлын бүлде. Бик ашыға ине шул Чапай, быларға иғтибар ҙа итмәне. Шулай ҙа ҡарлуғас ҡанатылай мыйыҡтарын бөтөрөп, осҡон сәсеп торған күҙ ҡырыйы менән генә бер ҡарап алды ул малайҙарға. Күршеләге йортҡа инеп сыҡты ла, тағы штабҡа йүнәлде. Ҡөлә-көлә килә ине ул. Бик шат. Был ваҡытта малайҙарҙың береһе — буйға иң оҙоно — уның алдына уҡ барып баҫты:

— Чапай ағай... ни... беҙ ҙә армияға барабыҙ...

— Һин нисә йәштә?

— Ун биштә...

Чапай ҡысҡырып көлөп ебәрҙе лә, теге малайҙың башынан һыйпаны. Шунан бөтәһе лә дәррәү уның янына йыйылып та алдылар.

— Йәшегеҙ етеү менән һеҙҙе Ҡыҙыл Армияға алабыҙ, — тине Чапай, — Совет илен һаҡларға бына һеҙҙең кеүек геройҙар кәрәк!..

Владимирға ул, ни эшләптер, айырыуса иғтибар итте. Башынан һыйпаны ла:

— Ҡыҙыл командир булырһың, герой! — тине.

Был ваҡытта Василий Иванович Чапаев 1941 йылдың 22 июнь көнөндә Гитлер Германияһы Советтар иленә ҡаршы һуғыш башлар, ошо малай, ысынлап та, командир булыр, Днепрҙы беренсе кисеп, Советтар Союзы Геройы тигән данлыҡлы исем алыр, тип һис кенә лә уйлай алмай ине, әлбиттә. Ундай уй Володяның үҙенең дә ике ятып бер төшөнә лә инмәне, билдәле. Әммә утта янмай, һыуҙа батмай торған командирҙың «герой» тип өндәшеүе, көслө ҡулы менән түбәһен һыйпап алыуы ғүмерлек хәтирә булып ҡалды.

Бәләбәйҙә совет власы урынлаштырылды. Әлеге Чапай торған йорттоң түбәһендә, тирә-яҡҡа йәм балҡытып, Ҡыҙыл Байраҡ елберләй. Ул кешеләрҙе яҡты, матур, бәхетле киләсәккә өндәй. Әммә быуаттар буйы капиталистик йәмғиәттең ҡара һөрөмө йоҡҡан тормош тиҙ генә хәлләнеп китә алманы. 1921 йылғы аслыҡ меңдәрсә кешеләрҙең ғүмерен киҫте. Ҡайғы күләгәһе Владимирҙар ғаиләһен дә урап үтмәне. Йомшаҡ күңелле әсәһе ары һуғыла, бире һуғыла, һуңғы ҡабымын быларға бирә, ә үҙе кибә, кибә... Һеңлеләре — ете йәшлек Зоя, туғыҙ йәшлек Нина бер ваҡыт астан шешенә башланы. Ун ике йәшлек Володя 1921 йылда өсөнсө класта уҡый ине. Иртән 8-гә мәктәпкә бара, төштән һуң курьер булып эшләргә тотондо. Һуңыраҡ конторала төрлө йомош башҡарҙы. Үҙен ғаиләнең башлығы, иң ҙур кешеһе итеп тойҙо. Эшләне лә, уҡыны ла, ике һеңлеһен дә уҡытты. Ауырлыҡҡа һыҡранманы. Спорт менән шөғөлләнде, шахмат уйнаны. Әҙәби әҫәрҙәр уҡыны. Тормошто, кешеләрҙе яратты ул. Һөлөктәй матур буй еткерҙе. Салт ҡара сәстәрен артҡа тарап ебәрә. Ҡолония мөдире Чанышев бына нисек яҙа уның хаҡында: «Мин уның хеҙмәт һөйөүсән, ябай ғаиләһен яҡшы белә инем. Эшләй башлағанда, Володя бик йәш, хатта малай кеүек кенә ине әле. Ә хеҙмәт шарттары колонияла — ифрат ҡатмарлы. Ләкин ул тәрбиәсе вазифаһын оҫта башҡарҙы. Ҡолониялағы үҫмерҙәргә ҡарата талапсан, шул уҡ ваҡытта ғәжәп яғымлы була белде. Уларҙы үҙе кеүек ысын гражданин итеп тәрбиәләргә тырышты. Эшен тамам теүәлләмәйенсә китмәй торғайны».

Аҡыллы кеше дошманын дуҫ яһар, ти. Володяға отделение бирҙеләр. Унда утыҙлап кеше. Ҡисә генә урамда боғаҙға-боғаҙ килгән Александр уның бүлексәһенә эләкте. Һуштан яҙҙырыу өсөн башына килтереп һуҡтылар, кейемдәрен алырға маташып ҡаранылар. Хәҙер инде, ҡапҡанға эләккән ас бүреләй, һинең ҡул аҫтыңа килеп ҡаптылар. Ни эшләргә?

Александр башта, һөҙөргә әҙерләнгән үгеҙҙәй аҫтан ҡарап, өндәшмәй генә йөрөнө. Уның тырпайып торған һары сәс бөртөктәре лә асыуҙан дерелдәгәндәй тойола. Бит осондағы һипкелдәренән әрнеү сатҡыһы һирпелә кеүек. Һоро күҙҙәр, мин һине көйҙөрәм, тигәндәй ҡарай.

Башта ул баш бирмәне. Әлбиттә, телләшмәй. Ләкин мыҫҡыллы көлөмһөрәп ҡуя, артыңдан бармаҡ күрһәтеп ҡалыуы ла мөмкин. Володя кешене ҡулға ала белә ине. Екеренмәй, һүгенмәй, насар һүҙ әйтмәй. Ауыр саҡта түҙемле, сабыр була ала. Үҙ алдындағы кешене теҙгендә тоторға көсө етә. Әммә кешелә аңлы тәртип булһын ине. Һин күҙ ҡарашың менән ҡатырып ҡуйғанда ғына түгел, һәр ваҡыт, теләһә ниндәй урында һаҡлаһын ул кешелеклелек сифаттарын. Александр һәм башҡаларҙы шул кимәлгә еткереп булырмы? Шундай һорауҙар борсоно йәш тәрбиәсене.

Колонияла, бигүк яҡшы булмаһа ла, кейендерәләр, ашаталар. Уҡыталар. Күңел асҡан саҡтар ҙа була. Төрлө яҡлап өлгө күрһәтә Владимир Петрович. Шахмат, шашка уйнау, физик күнегеүҙәр, йүгереү, һикереү — бөтәһе лә уға еңел бирелә. Ихлас күңелдән, яратып башҡара ул эшен. Шуны тәрбиәләнеүселәрҙән талап итә. Тиҙ арала уны ағалары кеүек яҡын күрә башланылар. Быны Владимир үҙе лә һиҙҙе. Тик... «Һары тубал»ға ғына дөрөҫ сиртә алманы ул (Александрҙы малайҙар ни өсөндөр «Һары тубал» тип атаны). Владимир Петровичтың ҡапылғара ҡыҙып китеп, кешене ҡыйырһыта, түбәнһетә, кәмһетә торған ғәҙәте юҡ ине. Был сифат ата-әсәһенән килә. Владимир өс һеңлеһенә ағай була белде. Әммә Наташа бик тыңлап бармай торғайны. Бер ваҡыт Владимир уға ниндәйҙер ҡаты һүҙ әйткәйне, Наташа, өй яңғыратып, илап ебәрҙе. Һуңынан атаһы Владимирҙы саҡырып алды ла:

— Һин улай кешене кәмһетеп һөйләшмә, улым, бәләкәй бала ла үҙенә ҡарата бик иғтибарлы булыуҙы талап итә, — тине. — Һеңлеләреңде кеше ит. Был — минең васыятым.

Был һүҙҙәрҙе үлер алдынан әйтте ул. Ә бит атаһы — Петр Алексеевич — бер ҡасан да ҡул күтәрмәне, күңелһеҙ һүҙҙәр менән тиргәмәне; асыуы килһә, күҙ ҡарашы менән генә ҡурҡытыр ине. Белеме лә әллә ни түгел ине. Бер конторала секретарь булып ултырҙы. Әммә бөтәһенә лә бәләкәйҙән үк мәғлүмәт бирә белде. Әкиәт, шиғыр һөйләй. Уларҙы ятлата, шунан һөйләп ҡарарға ҡуша. Наташаның теле ни эшләптер оҙаҡ асылманы. Бер һүҙҙе унар мәртәбә әйттерә ине Петр Алексеевич. Рәхәтләнеп бер көлөп алырға ла ярата ине ул. Әсәһенең уҡыуы бигерәк тә самалы ине. Ул моңло тауышы, йыры менән балалар күңелен сихырлай белде. Бишек йырын йырлаһа, йөрәгең һары май урынына ireп китә. Атаһы мәрхүм булғанда, Нинаға — алты, Зояға — дүрт, Наташаға ете йәш ине. Туғыҙ йәшлек Владимир уларға атай йылыһын бирергә тырышты. Наташаны тифтан алып ҡала алмау ғына үкенесле. Нина менән Зоя яҡшы уҡыйҙар. Улар ҙа уҡытыусы булырға хоҡуҡ аласаҡтар.

— Рәхмәт, балаҡайым, атайыңдың васыятын үтәнең, үҙең дә кеше булдың, һеңлеләреңде лә аяҡҡа баҫтырҙың, тик колонияға эшкә барыуың ғына әллә нисек... — тине әсәһе, уҡытыусы булырға таныҡлыҡ алып ҡайтҡас.

Колонияла юлдан яҙған балаларҙы тәрбиәләрмен тигән уй бер ҡасан да килмәне Владимирҙың башына. Ул бөтә фәндәрҙе лә яҡшы үҙләштерҙе. Көслө математик булды. Шуға күрә физика-математика уҡытыусыһы иттеләр. Эшкә тәғәйенләгәндә, мәктәп директоры:

— Ферапонтов, һине балалар колонияһына ебәрәбеҙ, унда математик та, яҡшы тәрбиәсе лә кәрәк, — тине.

Ҡарышырға, икеләнергә ярамай.

— Ҡайҙа ебәрһәгеҙ, шунда эшләрмен, — тине ул, үҙен шаҡтай ғорур тотҡан хәлдә.

Директор хатта уның арҡаһынан һөйөп ҡуйҙы:

— Молодец! Егет һүҙе бер булыр!

Әсәһенә лә шулайыраҡ яуап бирҙе:

— Ебәргән ергә бармайынса булмай бит инде, әсәй, ҡайғырма, улар ҙа әллә ҡайҙан, күктән төшмәгән, беҙҙең кеүек ерҙә йәшәгән кешеләр... Мин инде бала түгел...

Улының аҡыллы яуабына ҡарата:

— Атайың кеүек дөрөҫ, тәрән уйлайһың, улым, миһырбанлыға дуҫ күп була, кешене рәнйетмә, — тине.

Тәрбиәселәр араһында шаҡтай тәжрибәле, оло йәштәгеләр ҙә бар ине. Уларҙың төрлөһө төрлө кәңәш бирҙе мәктәп партаһы араһынан яңы сыҡҡан Владимирға: «Ҡаты ҡуллы бул»; «Ҡайһы береһен ҡараңғы мөйөштә дөмбәҫләп алһаң да ярай»; «Ул сволочтар яҡшылыҡтың ҡәҙерен белмәй»; «Юлдан яҙған инде улар»...

Быңдай мәғәнәһеҙ һүҙ һөйләүселәр күп түгел ине, билдәле. Уларҙы Владимир тыңламаны ла. Кешеләргә ниндәй хис-тойғо, аҡыл, йөрәк менән яҡын килеү хаҡында тәрән уйлана ине ул. Тәрбиәселәр араһында дүрт класс бөткәндәр ҙә бар. Ә ул урта белемле. Теләһә ниндәй мәктәптә математика уҡытырға хоҡуҡ алған кеше. Колония мөдире Чанышев бик дөрөҫ әйтте:

— Бында — урам малайҙары, тәртип боҙоусылар, ләкин уларҙың кеше икәнлеген онотмаҫҡа кәрәк, — тине.

«Белмәү ғәйеп түгел, белергә тырышмау ғәйеп», — ти торғайны атаһы. Колониялағы хәлдәрҙе белеү өсөн ул аҡыллы кешеләрҙән күп һорашты. Ҡырҡ йәштәр самаһындағы тәрбиәсе Мөхәммәт ағай:

— Бында күберәк атаһыҙ, әсәһеҙ бала, етем кешенең күңеле китек була, — тине.

* * *

...Мөхәммәт ағайҙың белеме күп түгел ине. Әммә ул үҙенә беркетелгән малайҙар араһында абруй ҡаҙанып өлгөргән. Кешелеклелек сифаттары менән алдыра, күрәһең. Владимир Петрович та шул сифаты менән уртаҡ тел таба белде. Тик «Һары тубал» ғына оҙаҡ ваҡыт энәләрен тырпайтҡан терпе урынына йөрөнө. Яҡшылыҡты ла, яманлыҡты ла аңламай. Һәйбәтләп әйтһәң, йомшаҡ йәйеп маташма, баллы телгә алданырға мин инде өс йәшлек бала түгел, тигәндәй көлөмһөрәп ҡуя. Ҡатыраҡ бәрелһәң, һоро күҙҙәрен тоҙҙай итеп ҡарап тик тора, аҙ ғына ла шөрләмәй.

Көндәрҙән бер көндө ул колониянан бөтөнләй ҡасты. Ләкин барыбер тотоп килтерҙеләр.

— Һин улай ҡыланма, Александр, — тине Ферапонтов, яҡын күреп һөйләшергә тырышты. — Атайың, әсәйең дә юҡ... Ҡайҙа бармаҡсы булаһың?..

— Минең йәшәйһем килә...

— Бының өсөн эшләргә, уҡырға кәрәк.

— Тотҡондамы?

— Һинең яҙмышың өсөн көрәш бара...

Улар оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙы. Владимир уның биографияһын белә ине инде. Өфөлә тыуған. 1921 йылғы аслыҡ ваҡытында атаһы, әсәһе үлеп киткән.

Шунан уны әсәһенең апаһы тәрбиәгә ала. Ләкин, ун дүрт йәшкә еткәс, унан ҡаса. Теләһә ҡайҙа тамаҡ туйҙырып йөрөй. Ҡеше талай. Урлаша. Хәҙер Бәләбәйгә килеп сыҡҡан, һәм... тотолған. Әммә Владимир үҙе менән булған хәлде уға бер ҡасан да әйтмәне. Уны телгә алыуҙың файҙаһы булмаясаҡты белә ине ул. Шулай ҙа бер һөйләшеү ваҡытында Александр үҙе һүҙ башланы:

— Һеҙ минән ниңә үс алмайһығыҙ?

Владимир Петрович көлөп ебәрҙе:

— Онот һин был хаҡта, Саша...

Икенсе бер һөйләшкәндә Александр балауыҙ һығырға кереште.

— Минең атайым да, әсәйем дә юҡ, — тип өҙгөләнде.

Шунан Владимирға үҙ хәле тураһында һөйләп бирергә тура килде. Үҙен, ике һеңлеһен туйҙырыу өсөн туғыҙ йәшендә эшләй башлауы хаҡында әйтте. Ә Александр бер башын да ҡарай алмай. Ана нисек икән кешеләр!..

Александр әле хәреф тә танымай ине. Шуға күрә ул беренсе класс программаһы буйынса уҡый башланы. Башта бөтәһе лә ауыр бирелде. Уҡыу теләге унда бөтөнләй юҡ ине. «Һары тубал» тигән атаманы ла шуға бирҙеләр булһа кәрәк. Ысындан да, уның ҙур башы һары тубалды хәтерләтеп тора. Тик ул тубалдың буш булыуы ғына эсте бошора.

Нисек кенә булмаһын, Владимир Петрович Александр менән нык шөғөлләнде. Уның педагогик оҫталығы ла бар ине. Аҡрынлап Александр хәрефтәрҙе ҡушып уҡый белә, яҙа башланы. Ике йыл тигәндә башланғыс класс программаһын йырып сыҡты. Ферапонтов үҙе иһә институтҡа инергә әҙерләнде. Математика буйынса һаман мәсьәләләр систе. Математиканы ул ҙурҙарға ла өйрәтте. Мөхәммәт ағайға ул айырыуса күп ярҙам итте. Ике йыл тигәндә Владимир ярҙамы менән ете класты үҙаллы уҡып тамамланы Мөхәммәт ағай.

— Һин, Владимир Петрович, беҙҙең бәхеткә килгәнһең бында, — тине уға бер ваҡыт колония мөдире Чанышев ағай.

Батыр урыны майҙан уртаһында, тигәндәй, яҡшы уҡытыусы һәр ваҡыт халыҡ араһында. Ике йылдан һуң Владимир Петровичты тағы ла мөһимерәк ергә күсерҙеләр. Был ваҡытта «Һары тубал» да, башҡалар ҙа уға нык күнеккәйне. Береһенең дә уны ебәргеһе килмәне.

— Беләһеңме нимә, Александр, был «Һары тубал»ыңа мин икенсе исем бирәм, «Алтын тубал» тип атайым, — тип йылмайҙы Владимир Петрович айырылышҡанда. — Сөнки шәп «тубал» булып сыҡты ул, ике йылда дүрт йыллыҡты һыйҙырҙы бит...

— Тағы ла бер-ике йыл эшләһәгеҙ, ете йыллыҡты ла тултырыр ине был «Һары тубал», — тип көлдө Александр.

— Башҡалар тултырыр, Сашка!

— Ә беҙ тағы ла осрашырбыҙмы?

— Тау менән тау ғына осрашмай...

Александр уны йылы ҡараш менән оҙатып ҡалды.

## IV

Эйе, улар тағы ла осрашты. Күп ваҡыт үткәс. 1941 йылдың апрель урталарында. Өфөлә. Бөтә ерҙә яҙ тантана итә. Ҡояш ҡыҙҙыра. Ҡала урамдарындағы юл урталары, тротуарҙар таҡыр инде хәҙер. Шулай ҙа өй, ҡойма буйҙарында, ағас төптәрендә аҙ-маҙ ҡар өйөмдәре бар әле. Тиҙҙән һуңғы ҡарҙар иреп ағыр, ләйсән ямғыр яуыр, бөтә ҡала бысраҡ-сасраҡтан таҙарынып ҡалыр. Ә бөгөн әле ҡыш менән яҙҙың «ҡосаҡлашып» байрам иткән сағы, һауа саф. Ҡешеләр

йөҙө шат. Ҡала урамдарынан атлап килеүе үҙе бер хозурлыҡ. Йәнә ике айҙан ошо яҡтылыҡ һуғыш һөрөмө менән ҡапланыр, шат йөҙҙәр ҡайғы күләгәһенә төрөнөр, Өфө ҡалаһы көнбайыштан килгән алйыу кешеләрҙе күпләп ҡабул итер, тип әле берәү ҙә уйламай. Ундай фекер Владимир Петрович Ферапонтовтың да башына килмәй. Днепрҙы беренсе кисеп, совет ғәскәрҙәре сығып бөткәнсе аҙна буйына дошмандың 15 контратакаһына ҡаршы тора алырмын, пулемет менән йөҙләгән фашистарҙы ҡырып һалып, Советтар Союзы Геройы булырмын, тигән уй аҙ ғына ла килмәй уның башына. Ул әле Карл Маркс урамынан атлай. Яңғыҙ ғына. Ғәмһеҙ генә. Ташбаҡа аҙымы менән. Әлбиттә, йөрәге ярһый. Күңеле елкенә. Ғаиләһе янына ҡош булып осорға әҙер. Уларҙы күрмәгәнгә мең көндән артыҡ ваҡыт үтте. Тел менән әйтеп аңлата алмаҫ дәрәжәлә һағындырған. Өс йыл таш ҡапсыҡта ултырҙы ул. Хәҙер инде иреккә сыҡты. Бөгөн Дәүләкәнгә ҡайтып етергә тейеш. Әммә поезға ултырырға әле байтаҡ ваҡыт бар. Вокзалға ашығыуҙан файҙа юҡ. Өфө лә күңелгә үҙе тыуған Бәләбәй ҡалаһы кеүек яҡын. Ошонда уҡытыусылар институтын тамамланы ул. Ситтән тороп уҡыны. Өфө урамдарындағы һәр таш яҡын күңелгә. Тротуарҙан аҡрын ғына уйланып атлауы үҙе бер хозурлыҡ. Халыҡ, билдәле, тыз да быз йөрөп ята. «Мин әсәйем, ҡатыным, ҡыҙым, һеңлеләрем янына тип ҡабаланам, ә был эшһеҙ халыҡ ҡайҙа ашыға икән», — тип эстән генә йылмайып ҡуйҙы ул. Шулай уйланып атлағанда, кемгәлер барып бәрелде.

— Һәй, күҙең сыҡҡанмы әллә, — тип һуҡранды теге кеше.

— Күҙ иҫән дә ул, туған, күңел генә әллә ҡайҙа йөрөй, — тип аҡланды Владимир Петрович. — Ғәфү ит...

Улар бер-береһенә ҡарашып, ҡатып ҡалдылар. Туҡта!.. Был бит...

— Һеҙ... Владимир Петрович... Ферапонтов... — тип ғәжәпләнде һуҡранған кеше.

— Эйе, мин әле был, Александр...

— Танынығыҙ «Һары тубал»ды!..

— Һеҙ бөтәгеҙ ҙә күҙ алдымда! Уҡытҡан балаларым да...

— Бына бит, тағы ла осраштыҡ!

— Ҡайҙа эшләйһегеҙ? Ғаилә хәле?.. Тормош?..

Бәләбәй колонияһында өс йыл булды Александр. Владимир Петрович киткәс, бер аҙ яманһыулап та йөрөнө ул. Сөнки Ферапонтовты үҙ ағаһы кеүек яҡын күрә башлағайны. Уҡырға, яҙырға, үҙеңде кешеләрсә тоторға, ауыр шарттарҙа ла көр күңелле булырға өйрәтте. Владимир Петровичтан һуң Мөхәммәт ағай ҡулына эләкте. Баштараҡ уға ҡырын күҙ менәнерәк ҡарап йөрөгәйне. Әммә яҡшылыҡты юха йылан да аңлай, тигәндәй, Мөхәммәт ағайҙың кешелеклелеген тиҙ йөрәгенә ала белде «Һары тубал». Дөрөҫ, руссаны вата-емерә һөйләй Мөхәммәт. Ләкин һәр һүҙендә кеше яҙмышы өсөн борсолоу аңлашылып тора.

— Һин ҡарышма, Александр... Мин үҙем дә етем үҫкән кеше, киләсәгең өсөн борсолам. Ферапонтов һинән өс йәшкә генә ҙур бит... Ә аҡылы?.. — тип кәйефһеҙләнде бер көн.

Яҡшынан яман тыуған кеүек, яҡшылыҡтың ҡәҙерен белмәгән ябалаҡтар ҙа килеп эләгә колонияға. Тәрбиәсе-уҡытыусы ныҡ ыҙа сигә ундайҙар менән. Бәғзе берәүгә ҡатылыҡ, ваҡыты менән йоҙроҡ та кәрәктер. Ләкин «Һары тубал» йылы һүҙгә ирей торған зат. Әллә шуны аңланымы Владимир Петрович менән Мөхәммәт ағай? Нисек кенә булмаһын, ваҡытында үҙен яҡшы яҡҡа һындыра алды ул. Уҡыны. Эшләне. Шуға күрә ун һигеҙ йәшендә уға: «Үҙ көнөңдө үҙең күр, туғанҡай, дүрт яғың ҡибла», — тинеләр.

Унан һуң Өфөләге паровоздар ремонтлау заводына эшкә керҙе. Бында инде ҡайышты тағы ла ныҕыраҡ быуып ебәрергә тура килде. Эшсе синыфы ҡаты ҡуллы. Тимер сылбыр урап ала һине, ситкә ысҡына алмайһың. Етмәһә, был — Октябрь революцияһы, граждандар һуғышы ваҡытында боевой дружиналар тупланған урын. Эшсе халҡы һаман да әле революцион рух менән йәшәй. Ун йылға яҡын эшләй инде унда Александр. Ҡатыны ла эшсе. Өс бала тәрбиәләйҙәр.

Шул хаҡта һөйләп бирҙе лә:

— Рәхмәт, Владимир Петрович, һеҙ кеше иттегеҙ мине, — тине.

Ял көнө ине, бәлки, шуғалыр Александр бик матур кейенгән. Өҫтөндә һәйбәт костюм. Аҡ күлдәктә, галстук тағып ебәргән. Ялан баш. Һары сәстәре алтын бөртөктәре кеүек емелдәп тора. Һоро күҙҙәре элеккесә асыу, нәфрәт менән түгел, яғымлылыҡ сатҡылары һибеп ҡарайҙар. Бит остарындағы һипкелдәре лә ниндәйҙер миһырбанлылыҡ һиҙҙереп йылтырайҙар һымаҡ. Аҙ ғына ҡалынайып, ир ҡорона ингән Александр.

— Тимәк, бәхетеңде хеҙмәттә таптың?— тип ҡыуанды Ферапонтов. — Һинең өсөн бик шатмын, Александр! Ысын кеше булғанһың. Тыштан да балҡып тораһың, эске яҡтан да ныҡ үҙгәргәнһең, һәйбәт яҡҡа...

— Рәхмәт яҡшы һүҙегеҙ өсөн! — тине лә, Владимир Петровичҡа ғәжәпләнеберәк ҡарап торҙо Александр.

Ҡолонияла уҡытыусы-тәрбиәсе булғанда артыҡ затлы кейем кейеп йөрөмәһә лә, Ферапонтовтың өҫ-башы һәр ваҡыт бөхтә була торғайны. Ҡостюм үтекләнгән. Аҡ күлдәк, галстук. Ҡара сәсен артҡа матур итеп тарап ҡуя. Ғөмүмән, ипле, мәҙәниәтле кеше икәнлеге әллә ҡайҙан беленә ине. Бөгөн ул иҫке ҡара салбар, ямау һалған күкһел пинжәк кейгән. Ҡепкаһын ҡырыныраҡ һалған. Сәсе тәртипһеҙ рәүештә, бүлтәйеп сығып тора. Иҙеүе асыҡ. Йөҙө моңһоу. Элекке кеүек күҙҙәре балҡып тормай. Ябыҡҡас, тағы ла оҙонайыбыраҡ киткән кеүек тойола. Биштәрләгән бәләкәй генә иҫке тоҡто һул яҡ ҡулбашына аҫҡан. Һис тә элекке Владимир Петрович түгел ине был. Һиҙгер күңелле Ферапонтов «Һары тубал»дың ғәжәпһенеп ҡарағанын аңланы.

— Үҙгәргәнменме? — тине ул.

— Үҙгәргәнһегеҙ.

— Ныҡмы?

— Әллә ни түгел, ә шулай ҙа...

— Ултырып сыҡтым мин, туған, өс йыл...

— Ни өсөн?..

— Үҙем дә белмәйем.

— Нахаҡ бәлә таҡтылармы?

— Булды инде...

Ҡолониянан киткәс, Владимир Петрович төрлө урында эшләне. Ҡайҙа ауыр, уны шунда ебәрәләр. Һәр ерҙә йондоҙ булып балҡый ул. 1935 йылда Дәүләкәндәге мәктәпкә директор булып килде. Уның педагогик эшмәкәрлеге тураһында тормош иптәше Мария Николаевна Ферапонтова һуңынан бына нисек яҙҙы: «1927 йылда Владимир Петрович урта мәктәпте тамамлай һәм физика-математика уҡытыусыһы тигән һөнәргә эйә була. Уны Бәләбәйҙәге балалар колонияһына уҡытыусы-тәрбиәсе итеп ебәрәләр. Яҡшы педагог икәнлеген иҫәпкә алып, 1929 йылда Дәүләкән РОНО-һына инспектор итеп күсерәләр. Һуңыраҡ Дәүләкәндәге 2-се һанлы мәктәпкә директор һәм математика уҡытыусыһы итеп ҡуялар. Был эштә уның педагог-новатор булыуы, ойоштороу оҫталығы, кешелеклелек сифаттары, ысын характеры ныҡлап асыҡлана. Ул хеҙмәт һөйөүсәнлеге, һоҡланғыс

тырышлығы, үҙенә һәм башҡаларға иҫ киткес талапсанлығы менән айырылып тора ине. Тиҙ арала ул мәктәпте тирә-яҡта өлгө итеп ҡуйыу кимәленә еткерә алды. Тәрбиә мәсьәләһенә айырыуса нығ иғтибар итте. Педагогика өлкәһендәге уның методтары хәҙерге көн өсөн дә актуаль. Уҡытыусы кадрын һайлауға ул бик етди ҡараны. Тормош шарттарын яҡшыртыуға нығ иғтибар итте. Педагогтарҙан ижади эш, инициатива талап итте ул. Насар уҡыусылар юҡ, педагогик һәм методик яҡтан өлгөрмәгән уҡытыусылар бар, ти торғайны».

Ана шулай янып эшләп йөрөгәндә ҡулға алына Ферапонтов. Бының ниндәйҙер аңлашылмаусылыҡ, тар ҡарашлы, боҙоҡ күңелле кешеләр эше икәнлеген яҡшы аңлай Владимир Петрович. Төрмәнән ул әсәһенә былай тип яҙа: «Әсәй! Мин үҙем өсөн аҙ ғына ла ҡайғырмайым. Сөнки илем, халҡым алдында туҙан бөртөгө ҙурлығы ла ғәйебем юҡ. Ә ғәйепһеҙ кешеләрҙең ғәйеплеләр алдында баш эйергә хаҡы юҡ. Шуны уйлап, мин үҙемде һаман элеккесә ғорур тотам. Төшөнкөлөккә бирелмәйем. Хаҡлыҡтың өҫкә ҡалҡасағына ышанам. Ышаныс миңә көс бирә. Һин минең өсөн борсолма, әсәй! Үҙеңде һаҡла. Кешенең бөтә матур сифаты ауырлыҡтарҙы еңеп йәшәүҙә бит. Ә еңеү өсөн миндә ихтыяр көсө етерлек. Быға атайым һәм һин өйрәттегеҙ».

Ҡатынына ла шулайыраҡ яҙҙы ул: «Мария! Ҡәҙерлем! Минең нығ кеше икәнлегемде беләһең. Был хаҡта яҙып тороу ҙа кәрәкмәйҙер. Тик шуны ғына әйтәм: минең өсөн борсола күрмә. Үҙеңде һаҡла. Ҡыҙыбыҙ Светлана бәхете өсөн. Һиңә бер ҙур үтенесем бар: мине ғәйепле тип уйлай күрмә. Ышанысыңды юғалтма. Һинең ышанысың мөхәббәтең кеүек үк ҡәҙерле. Мин кешеләргә артыҡ ышандым. Был бер ҡатлы, ябай булыуымдан да киләләр. Ләкин кешеләргә ышанысымды бер ваҡытта ла юғалтмаясаҡмын. Ышанысты юғалтыу — йәшәүҙән туҡтау тигән һүҙ. Миңә нахаҡ бәлә яҡҡан түбән йәнлеләр арҡаһында ғына кешеләргә ҡарата булған ихлас мөнәсәбәтем бер ҡасан да һүрелмәйәсәк. Хаҡлыҡ барыбер еңәсәк!»

Был ваҡытта Нина менән Зоя ла, күптән институт тамамлап, химия һәм биология фәндәре буйынса уҡыталар ине инде. Нинаның бер аҙ төшөнкөлөккә бирелә торған ғәҙәте бар. Ағаһына хатты шул рухтараҡ яҙған ул: «Беҙҙе кеше иттең, уҡыттың, күпме ауырлыҡтар күрҙең, инде тормош һәйбәтләнеп килгәндә, ни эшләп былай килеп сыҡты һуң әле?» — тип өҙгөләнгән. «Ауырлыҡтар мине кеше итте, Нина, донъяны иртә таныраға ярҙам итте, — тип яуап бирҙе ул, — шуға күрә һин һис тә мине ҡыҙғанма. Илама. Ҡуҙ йәштәре бер ҡасан да ысын мәғәнәһендә йәшәүгә ярҙам итмәй. Минең ғәйепһеҙ булыуыма ышанығыҙ. Рухи яҡтан ҙур ярҙамығыҙ шул булыр».

Зоя ҡатыраҡ, әммә яҡшы күңелле. Уға шаярыбыраҡ та яҙҙы: «Мин институтты ситтән уҡып тамамланым. Ә хәҙер ултырып уҡыйым. Төрмә генә түгел был, «институт» та. Сөнки бында иҫ киткес мәғлүмәтле, белемле кешеләр ҙә бар. Улар бәхәсләшә, һүҙ көрәштерә, дөрөҫлөк эҙләй. Минең һәр кеше һүҙен етди тыңлағанды беләһең. Тыңлай-тыңлай бәхәсләшеп тә китәм. Аң-аҡыл ана нисек үҫә. Кеше, ҡайҙа ғына булмаһын, фекерен үҫтереүҙән туҡталмай икән. Мин күберәк яҡшы кешеләр янында булырға тырышам. Улар рухи яҡтан үҫергә ярҙам итә».

«Яҡшы кеше яман ҡулға юлыҡмай, юлыҡһа, оҙаҡ тормай», — тиҙәр. Ферапонтовтың ултырыуы уны белгән бөтә Бәләбәй, Дәүләкән халҡын тетрәтте. Ғәйепле булыуына бер кем ышанманы. Уның үҙен аҡларлыҡ көсө бар ине. Төрмәлә лә тик ятманы. Ундағы аҡыл эйәләре ярҙам итте. Бында ҡалған яҡындары ла хәстәрләне. Бигерәк тә Мөхәммәт ағай нығ борсолоп йөрөнө. Эш

СССР прокурорына барып етте. Ғәҙеллек ана шунда табылды. Ләкин өс йыл үтеп китте...

Шул хаҡта һөйләп бирҙе Ферапонтов «Һары тубал»ға. Александр башта ышанмайынсараҡ торҙо. Владимир Петровичтың шаярта торған ғәҙәте лә барлығын белә ул. Ҡайһы саҡта кеше ышанмаҫтайҙы һөйләп ышандыра. Тыңлаусының зирәклеге ана шунда һынала. Еңел аҡыллы кеше тиҙ ышана. Ә төптән уйлаусыны төп башына тиҙ генә ултыртып булмай. Был — педагогтың кеше тәрбиәләүҙә үҙенсә бер ысулы. Ышанмаҫтайҙы ышандырһа, рәхәтләнеп бер көлә торғайны Ферапонтов. Ләкин Владимир Петровичтың бөгөнгө һөйләүе һис тә шаярыуға оҡшамаған. Шуны аңланы Александр.

— Бына шулай, туған, ел һинең өсөн генә түгел, минең өсөн дә кире яҡтан иҫеп ҡуйҙы, унда кеше һайын бер кирбес тиҙәр, әллә шул дөрөҫмө? — тип көлдө Ферапонтов.

Александр бөтөнләй телһеҙ ҡалды. Ни тип әйтергә лә белмәне. Унан һорап ҡуйҙы:

— Ваҡытығыҙ бармы?

— Бар. Ҡиске поезға...

— Әйҙәгеҙ, универмагҡа инеп сығайыҡ әле. Яҡында ғына бит.

— Ниңә?

— Ҡостюм алайым, тигәйнем, һайлай белмәйем.

— Өҫтөңдәге костюм бик яҡшы күренә...

— Ялҡытты быныһы...

## V

Йәйен ҡала халҡы ял көнө тәбиғәт ҡосағына сығырға ярата. Ҡышҡы, яҙғы, көҙгө көндәрҙә ул магазиндарҙа йөрөүсән. Яҙ көнө бигерәк тә. Был ваҡытта ҡуяндар ҙа «кейемен» алыштыра башлай. Ҡышҡы аҡ «тундарын» һалып, йәйге төҫкә яраҡлашыу өсөн, һороһон кейәләр. Халыҡ та кейемен алыштырырға ашыға. Шуғалыр, бәлки, универмаг эсе халыҡ менән шығырым тулы ине. Берәүҙәр кейеп ҡарай. Икенселәр алған тауарын төрөп маташа. Өсөнсөләр нимәлер хаҡында гәп һата.

Александр, халыҡты йыра-йыра, костюмдар эленеп торған ергә үтте. Ферапонтов унан ҡалмаҫҡа тырышты. Ҡолонияла саҡта Александр Владимир Петровичтан күпкә ҡыҫҡа ине. Хәҙер улар икеһе лә бер сама. Шуға күрә костюмды үҙ үлсәменә яйлап һайланы Александр. Уның күҙе йәй кейә торған матур ғына күкһел костюмға төштө. Эленеп торған еренән ялт итеп эләктереп алды ла, кейеп ҡарау урынына китте. Ферапонтов унан ҡалмаҫҡа тырышты. Барып еткәс, шаршауҙы тартып ҡуйҙы ла:

— Йә, Владимир Петрович, һалып ташлағыҙ әле өҫтөгөҙҙәге кейемде, һеҙгә төҫ түгел ул, бәҫегеҙҙе ебәреп тора, — тине «Һары тубал».

Ферапонтов оҙаҡ ҡына ризалашмайынса торҙо:

— Юҡ, Александр, кәрәкмәй, быға тиклем кеше өлөшөнә ҡыҙыҡһынғаным булманы...

«Һары тубал» шаяртып та алды:

— Ә бит минең һеҙгә бирәсәгем дә бар. Хәтерегеҙҙәме? — тип кеткелдәне ул.

— Бөтәһе лә хәтерҙә, Александр, тик ул ваҡыттарҙы иҫкә алмайыҡ инде.

— Яманлыҡ йөрәккә, самауыр юшҡыны кеүек, һыланып ҡала икән, Владимир Петрович...

— Һин уны ҡырып ташлағанһың инде, Александр.

— Һүҙҙе икенсе яҡҡа бормайыҡ әле, Владимир Петрович! Һалығыҙ иҫкемоҫҡоғоҙҙо.

— Ярай, күрәм: һиңә ҡарышыуҙың файҙаһы юҡ. Аҡсаһын беренсе хеҙмәт хаҡы алыу менән...

«Һары тубал» костюмды Ферапонтовтың ҡулынан тартып алды:

— Улайһа бирмәйем, Владимир Петрович! Ваҡлана башланығыҙ. Мин ундайҙарҙы яратмайым.

Ферапонтов көлөп ҡуйҙы:

— Уҫалһың, әй!

— Ғәҙеллеккә үҙегеҙ өйрәттегеҙ.

— Ярай, ризалашырға тура килә.

— Мин хәҙер... — тине лә, шаршау эсенән сығып та шылды Александр. Бер аҙҙан ул аҡ күлдәк менән галстук тотоп килде.

— Бына хәҙер мин яратып ҡарай торған Владимир Петровичҡа әүерелдегеҙ, — тип көлдө Александр, Ферапонтов тамам кейенеп бөткәс, уның алам-һаламын иҫке тоғона тултыра-тултыра.

Ҡейемдәр өсөн түләгәс, улар универмагтан сыҡты. Һулға боролоп, тротуарҙан киттеләр.

— Мин хәҙер һеҙҙе беренсе класлы парикмахерскийға алып барам, — тип һөйләнде Александр юлда. Урам сатында хәйер һорап торған ҡылҡа кейемле бер ҡарттың ҡулына әлеге тоҡто тотторҙо:

— Бында ла аҫыл әйберҙәр юҡ, бабай, әммә һинекенән шәберәк...

Парикмахерскийҙан улар тағы ла матурайып, йәшәреп сыҡты. Әммә Ферапонтов быға бик ҡыйынһынып йөрөнө. Александр уны ла һиҙҙе.

— Бер ҙә уңайһыҙланмағыҙ, Владимир Петрович, һәр кемгә былай ҡыланмайым мин. Дөрөҫөн генә әйткәндә, яҡын дуҫым да, туғаным да юҡ, мин һеҙгә ғүмерем буйы бурыслы, яҡшы кеше өсөн йәнемде фиҙа ҡылырға әҙермен... — тип һөйләнде ул. — Ҡалығыҙ бөгөнгә беҙҙә, ҡунаҡ итермен, бүлмәбеҙ тар булһа ла, күңелебеҙ киң, Владимир Петрович!

Ферапонтов уны ҡосаҡлап уҡ алды:

— Их, Александр, бына һинең кеүек яҡшы кешеләр өсөн генә булһа ла йәшәйһе килә бит был донъяла... Бөгөнгә ҡала алмайым. Һағындырған. Осрашырбыҙ әле...

Йөрөй торғас, улар йәнә бер магазинға инделәр. Бәләкәй генә бер сумаҙан һатып алды Александр. Аҙыҡ-түлек магазинына барып, уның да эсен тултыра яҙҙылар. «Һары тубал» ни ҡылһа, шуға риза булып тик йөрөнө Ферапонтов. Сөнки уға ҡарышыуҙың файҙаһы юҡлығын тамам аңланы.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, ҡылҡа кейем менән үҙенең дә ҡайтып күренгеһе килмәй ине Ферапонтовтың. Төрмәнән сыҡҡас, бер аҙ эшләп алырға ла уйлағайны. Ләкин ул фекеренән дә кире ҡайтты — ике-өс ай эсендә генә барыбер әллә ни ҡыйратып булмаҫ. Сентябрҙә — яңы уҡыу йылы. Әҙерлек август урталарында уҡ башлана. Тиҙерәк ҡайтып күренергә кәрәк.

Ҡискә табан Александр уны оҙатып ҡалды — поезға ултыртып ебәрҙе.

## VI

Тышта март бураны ҡотора. Әрһеҙ ел шаҡ-шоҡ тәҙрә ҡаға. Ҡластар һыуыҡ. Яғырға утын юҡ. Хатта яҙыу ҡаралары туңа. Ә балалар түҙә. Ҡулдарына әленән-әле өрөп, аяҡтарын бер-береһенә бәреп йылыта. Быға уҡытыусы һүҙ әйтмәй, сөнки үҙе лә шул хәлдә. Шулай ҙа уға яҡшыраҡ: баҫып һөйләй, йөрөп ала, хәрәкәт

итә. Ун-ун биш минут һайын уҡыусыларҙы ла баҫтырып, аҙ ғына физзарядка яһатып ала. Артыҡ мауығыу ҙа файҙаһыҙ: программа бар — темалар яҡшы үтелергә тейеш.

...Владимир Петрович, ҡотолоп ҡайтыу менән, Дәүләкән район мәғариф бүлегенә барҙы. Уның эшенән нахаҡҡа айырылып тороуын берәү ҙә телгә алманы. Ферапонтов үҙе лә был күңелһеҙ хәлде иҫкә төшөрөүҙе кәрәкле тапманы. Әйтерһең, ул булмаған. Ҡайҙалыр ҡунаҡта ғына йөрөп ҡайтҡан элекке мәктәп директоры. Юҡ, күңел асып йәшәү уға төҫ түгел. 1930-сы йылдарҙа мәктәптәрҙә күберәк уҡырға-яҙырға өйрәтеү өсөн көрәш бара ине. 1935 йылда Дәүләкәндәге 1-се һанлы мәктәп директоры итеп ҡуйғас, уҡыу-уҡытыу эшен ул бөтөнләй тамырынан үҙгәртеп ҡорорға уйланы. Ҡиләсәктә урта, юғары белемле кешеләрҙең күп буласағын аңлай ине ул. Ҡитап туҙанына күмелеп, ҡоро белем алып, бөйөк төҙөлөштәр хаҡында нотоҡ уҡып йөрөүсе генә булырға тейеш түгел хәҙерге заман кешеһе. Уҡыһын, һөнәр алһын. Мәғәнәле йәшәһен. Ҡулынан эш килһен. Бының өсөн колонияла, РОНО-ла инспектор, мәктәптә завуч булып эшләгәндә тырышты. Мәктәптәрҙә белемле, мәғлүмәтле, аң-даирәһе киң уҡытыусылар аҙ. Үҙ башында булмағас, кешегә тел менән аңлатыу бик ҡыйын. Уҡыуҙы тормош менән бәйләү өсөн көрәште ул. Директор итеп ҡуйғас, быны матур өлгө-үрнәктәрен үҙе күрһәтергә тырышты. Юғарылағы етәкселәр менән һөйләшеп, фабрика-завод мәктәбе тип атау маҡсатына иреште. Шул йүнәлештә эш башланы. Был өлкәлә Ҡуйбышев ҡалаһындағы мәктәптәр ҙур өлгө күрһәтә ине. Владимир Петрович унда барып ҡайтты. Мәктәптә методик кабинет булдырҙы. Физкультура-спорт, техник түңәрәктәр эшләп китте, айырым кабинетҡа станоктар ҡуйылды. Уҡыусылар фән нигеҙҙәрен дә үҙләштерергә, фабрика, заводтарҙа эшләү өсөн ниндәйҙер һөнәр ҙә алырға тейеш. Бер ваҡыт ул тимер юлсылар менән Мәскәүгә делегат булып барҙы. Баш ҡалала күп мәктәптәрҙе ҡарап йөрөнө. Ҡайтҡас, эште улар үрнәгендә ойоштороп ебәрҙе. Мәктәп районда иң алдынғыларҙан һанала башланы, уға өйрәнергә килделәр. Ләкин был ҡайһы берәүҙәрҙең асыуын ғына ҡабартты. Сөнки улар Ферапонтов кимәленә бер ҡасан да күтәрелә алмаясаҡтарын аңланы. Урынһыҙ көнләшеү китте. «Ҡөнсөллөктөң еле хәтәр, бәндә башына етер», — тиҙәр бит. Әллә шул харап иттеме уны? Бөтә йөрәген биреп эшләгән хеҙмәтенән көнсөлдәр айырҙымы? Был хаҡта борсолоу һуң инде. Уйламаҫҡа тырышты ул. Үс алыу кеүек түбәнлектәрҙе белмәне. Ҡөнсөллөк ғәләмәте уның үҙендә лә көслө. Әммә унда: «Ҡөнсөл кеше көн күрә», — тигән принцип бар. Мәскәүгә барҙы, Ҡуйбышевҡа. Ихлас күңелдән эшләгәндәрҙең ҙур, ижади хеҙмәтен күреп, «Беҙ кемдән кәм, башҡалар эшләгән ниңә беҙҙең ҡулдан килмәй?» — тип борсолдо. Тиҙ арала мәктәпте тирә-яҡта өлгө итеп күрһәтер кимәлгә күтәрҙе.

Ул юҡта эше дауам итте. Ләкин Ферапонтов ялҡыны аҡрынлап һүрелде. Шуға күрә ҡайтыу менән уны тағы ла директор итеп ҡуйҙылар — эште йәнә дөрләтеп ебәрергә кәрәк ине. Әммә илде икенсе бер ялҡын солғап алды. Һуғыш ялҡыны. Икенсе көндө үк хәрби комиссариатҡа барҙы Ферапонтов. Һуғышҡа ебәреүҙәрен һораны. Ләкин уға ашыҡмаҫҡа ҡуштылар. Уҡытыу-тәрбиә эшендә ҡаты ҡуллылар кәрәк ине.

— РОНО менән килешенде, мәктәпте юлға һалығыҙ, элеккегә ҡарағанда унлата артыҡ көс менән эшләргә тейешһегеҙ, — тине хәрби комиссар.

Ауыр ваҡыттар ине. Уҡыу йылы башланыу менән мәктәп балалары эшкә кереште. Борсаҡ алыу, бойҙай, арыш башаҡтары йыйыу, картуф ҡаҙыу — бер генә эш тә уларҙан ҡалманы. 1941—1942 йылдың ҡышы ифрат һалҡын булды. Ҡырҡ градусҡа етә. Ә балаларҙы уҡытырға кәрәк. Бөгөн атаһының фронтта

ҡаһармандарса көрәшеүе тураһында шатлыҡлы хәбәр килһә, бер нисә көндән батырҙарса һәләк булыуы хаҡында «ҡара ҡағыҙ» алына. Бала етем ҡала. Ә ул ас, яланғас. Етмәһә, һалҡын класта туңып ултырырға кәрәк.

Әле бына тышта март бураны шаша. Ыжғыр ел, ниндәйҙер күңелһеҙ хәбәр килтергәндәй, шаҡ-шоҡ тәҙрә ҡаға. Директорҙың дәресе юҡ ине. Ул үҙ бүлмәһенә инеп ултырҙы ла, ҡағыҙҙарға күмелде. Бер көн эсендә генә күпме эш — йыллыҡ, сиреклек, айлыҡ, аҙналыҡ план төҙөргә кәрәк. Директор эше тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел. Шуға күрә уның көндәлек планы ла бар. Бына ниҙәр яҙып ҡуйған ул 12 март көнөнә:

1. Мәктәпкә сәғәт алтыла килергә. Мейескә нисек яғыуҙы күҙәтергә. Ҡайһы береһе күберәк яға, утын көн йылытҡансы етергә тейеш.

2. Ҡисә береһе мөрйәне иртәрәк томалаған. Класҡа еҫ сыҡҡан. Балаларҙың ағыуланыуы мөмкин. Күҙәтергә кәрәк.

3. Уҡыусылар комитеты рәйесе Сорокин һуңғы ваҡытта эште һүлпәнәйтте. Махсус һөйләшергә.

4. В.И.Ленин исемендәге дружина сборында ҡатнашырға.

5. Рус теле уҡытыусыһының дәресенә инергә. Ул дәфтәрҙәрҙе һирәк тикшерә. Иғтибар итергә.

6. Тарих уҡытыусыһы күргәҙмә материалды һанға һуҡмай. Әңгәмә үткәрергә.

7. Ата-әсәләр йыйылышына әҙерлек мәсьәләһе.

8. Журналдарҙы тикшерергә, һуңғы ваҡытта уҡыусыларға баһаларҙы һирәк ҡуя башланылар.

9. Концертҡа әҙерлек барышы.

10. Балаларға бер мәртәбә йылы аш биреү мәсьәләһе ауырлашты. Был хаҡта РОНО-ға шылтыратырға.

11. Уҡытыусыларға яғыулыҡты һаман биреп еткермәйҙәр.

12. Фронт хәлдәре тураһындағы докладты теүәлләргә.

Йәнә... тағы ла бик күп ине. Уның уйҙарын ишек артында ғына яңғыраған ҡыңғырау тауышы бүлде. Бер аҙҙан математика уҡытыусыһы Александра Ивановна төрткөләй-төрткөләй бер баланы алып керҙе. Был алтынсы класс уҡыусыһы Мәхмүт Шәғәлиев ине.

Александра Ивановна — йәш уҡытыусы. Педагогик училище тамамлап килде. Директор үҙе лә математик. Ләкин сәғәттәрҙе күп алманы, хужалыҡ, ойоштороу эштәре лә етерлек. Уҡытыусыларҙың дәресенә лә инергә кәрәк. Ғөмүмән, уҡытыусы кадрҙарҙы һайлап алырға ярата ул. Көн уҙһынға йөрөп, бала күңелен аңламаусы, белеме һай уҡытыусыны коллективҡа алыуға бик һаҡ ҡарай. Билен яҡшылап быумаған иптәш уның талабына түҙә алмай. Был юғары талапсанлыҡ баланың киләсәк яҙмышына бәйләнгән. Ил өсөн ысын гражданин булып үҫһен. Мәктәптә характерын нығытмаһа, ғүмер буйы аҡһаҡ сәүкә урынына һикергеләп йөрөйәсәк ул. Һуғыш ваҡытында кадрҙар һайлау өсөн ҡаты талап ҡуйыу ҙа ҡыйын. Ләкин донъяны солғаған был ҡара һөрөм мәңгелек түгел, бер ваҡыт ялтырап ҡояш сығыр. Еңеү ҡояшы. Ҡара һөрөм таралыр. Кешеләр иркен тын алыр. Бөгөн һалҡын кластарҙа туңып ултырған балалар бөйөк төҙөлөштәргә китер. Һуғыш ауырлығы уларҙың рухи көсөн аҙ ғына ла баҫырға тейеш түгел, һәр дәресте уҡыусының белемен генә түгел, ихтыяр көсөн дә арттырырлыҡ итеп ҡорорға кәрәк. Ләкин быға һәр кемдең көсө етмәй. Александра Ивановна математиканы белмәй түгел, әммә педагогик һәм методик оҫталығы етешмәй. Белгәнен уҡыусыларға еткерә алмай ыҙа сигә. Башта уның дәресенә йыш керҙе директор.

Быға Александра Ивановнаның асыуы килә башланы хатта. Бер дәрестән сыҡҡас, журналын ырғытты ла, иларға кереште.

— Күрәм: һеҙ минең уҡытыуым менән ҡәнәғәт түгел, — тип әрнене. — Ни эшләргә миңә? Китергәме? Минән уҡытыусы сыҡмаясаҡмы?

Ферапонтовтың кешене йыуата, ҡәҙерләй, ҙурлай торған ғәҙәте лә бар. Әммә ҡыҙғанып, түбәнһетеү яғында түгел.

— Эйе, Александра Ивановна, әгәр минең талап өсөн журналдан үс алыу юлына баҫһағыҙ, һеҙ бер ҡасан да яҡшы уҡытыусы булмаясаҡһығыҙ, — тине директор. — Һеҙ уңайһыҙланаһығыҙ. Әгәр коллектив алдында ауыр хәлдә ҡалыуҙан ҡурҡһағыҙ, мин педагогик советта быларҙың береһе хаҡында ла әйтмәм. Ләкин дәресегеҙгә инәсәкмен. Хатағыҙҙы тамам бөтөргәнсе. Яҡшы уҡытыусы булып киткәс, үҙегеҙ үк рәхмәт әйтерһегеҙ.

Быны аңланы Александра Ивановна. Директор инһә, балалар шауламай, ул рәхәтләнеп дәрес бирә. Ҡайһы бер саҡта директорҙы үҙе үк саҡыра башланы. Сөнки уның маҡсаты — өйрәтеү. Һәр кәмселегенде ваҡытында әйтеп бара, педсоветҡа ҡалдырмай. Кәрәк саҡта ярҙам ҡулы һуҙа. Кешеләрсә эш итә, ваҡланмай. Үҙен ғорур тота. Башҡаларҙы ла шул юғарылыҡҡа күтәрә. Шулай ҙа Александра Ивановна талапсанлыҡтың бөтә аҫыл сифатын аңлап бөтмәне. Директор ярҙамына артыҡ мохтаж булып, үҙаллы эш итмәне. Балала бер-бер ғәйеп күренһә, тота ла директорға йүгерә. Был инде уҡытыусының абруйын төшөрә. Бала уҡытыусының көсө юҡлығын һиҙә. Директор ҙа әүлиә түгел, һәр бала күңеленә асҡысты тиҙ генә табып булмай. Мәхмүт Шәғәлиевтың һуңғы ваҡытта дәрескә күңеле һыуынғанлығын директор белә. Александра Ивановнаның елтерәтә-елтерәтә шуның өсөн алып ингәнлеген тиҙ самаланы Ферапонтов.

— Нимә, Мәхмүт тағы ла дәресен әҙерләмәй килгәнме? — тип һораны директор.

— Өс көн инде... ни яҙмай... ни уҡымай... — тип ярһыны уҡытыусы.

Александра Ивановна, һыуыҡ булыуға ҡарамаҫтан, пальтоһын һалған. Ҡара костюм кейгән, аҡ шәлен яурынына япҡан. Бит остары бешкән алмалай ҡыҙарып тора. Хатта тир бөртөктәре тәртөп сыҡҡан. Уҡытыусының ныҡ ярһығанын аңланы директор. Бындай саҡта уны бала алдында тотоуҙың файҙаһы юҡ. Әллә ни әйтеп ташлауы бар. Шуға күрә:

— Һеҙгә сығырға мөмкин, Александра Ивановна, — тине ул.

Икәүһе генә ҡалғас та әле директор һүҙ башларға ашыҡманы. Малайҙың уйсан йөҙөнә, моңһоу ҡарашына текләп ҡалды. Ҡаты ҡарай торған ғәҙәте бар директорҙың. Был «тәрбиә», уныңса, бөтә «мәғәнәле» һүҙҙәрҙән өҫтөн. Шул ҡарашты уҡыусы күтәрә аламы? Әллә биҙгәк тотҡан кеүек ҡалтыранырға керешәме? Ҡойолоп төшәме? Йә булмаһа, күҙеңә инер сиккә етеп секерәйеп ҡарап торамы? Уҡыусының характеры шул ваҡытта ла һынала. Оҫта уҡытыусы, бала күңеленә үтеп инеү өсөн, төрлө юлдар ҡуллана. Алтынсы класс уҡыусылары бик шөрләп бармай. Уларҙа артыҡ бер ҡатлылыҡ ғәләмәте аҙ ғына кәмей, хатта бер ни тиклем патриотик хис-тойғолары арта башлай. Бала күңелендә ҙурҙар башҡарған ҡаһарманлыҡты ҡабатлау теләге уяна. Бер көн, ана, алтынсы класта уҡыған өс уҡыусыны вокзалдан тотоп алып килделәр. Имеш, фронтҡа киткеләре килгән. Фашистар береһенең атаһын, икенсеһенең ағайҙарын үлтергәндәр. Былар үс алырға бара, йәнәһе. Бала күңелендә ниндәй аҫыл таш ятҡанын белеү бик ҡыйын. Улар йөрәк серен бик һирәк кешегә аса. Оҫталығың булмаһа, ул йөрәк ҡапҡасын асырға маташыуҙың бер фәтүәһе лә юҡ. Мәхмүткә директор төрлө һорау биреп ҡараны. Ул, билдәле, йомшаҡ һүҙле булырға тырышты:

— Мәхмүт, ниңә һуңғы ваҡытта уҡымай башланың һуң әле?

Бала, атаһы тиргәүҙән ҡыйырһытылған шикелле, өндәшмәйенсә, турһайып баҫып тик тора.

Баланың уҡытыусыны яратмай башлауынан да яман хәл юҡ мәктәптә. Ҡырыҫ холоҡло Александра Ивановна үҙенән ҡайһы бер уҡыусыларҙы биҙҙереп тә өлгөрҙө шикелле. Шуны уйлап, директор уҡытыусының абруйын күтәрергә тырышты.

— Александра Ивановна яҡшы уҡытыусы, уны тыңларға кәрәк.

Әммә малай өндәшмәй. Ләм-мим. Уның яңаҡтары эскә батҡан. Битен йыумаған да кеүек. Әллә асҡа алйығанмы?

— Һинең атайың кем һуң әле, Мәхмүт?

— Сабирйән.

— Ҡайҙа эш...

Директор үҙенең яңылыш һүҙ ысҡындыра яҙыуын аңланы. «Ҡайҙа эшләй?» тип һорамаҡсы булғайны, ул фекеренән кире ҡайтты. Һуғыш ваҡытында шундай һорау бирәләр тиме ни? Әммә малай директорҙың тел төбөн аңлап та алды:

— Ошо мәктәптә эшләй ине...

— Кем булып?

— Завхоз...

Ферапонтов һиҫкәнеп китте. Директор уны Сабир тип кенә йөрөттө. Бик уңған, тырыш, намыҫлы кеше, русса белеүе генә самалы ине. Шуға күрә малайын ошо үҙе эшләгән мәктәптә русса уҡытырға булды. Быға дүрт йыл үтеп китте инде. Ул ваҡытта Мәхмүт икенсе класта ғына уҡыған булып сыға. Тимәк, атаһын һуғыш башланыу менән алғандар.

— Атайың фронттамы?

— Фронтта ине...

— Ә хәҙер?

Малай башын аҫҡа эйҙе. Оҙаҡ ҡына көттө яуапты директор. Ләкин... Бындай саҡта төпсөнөүҙең файҙаһы юҡлығын да белә ул. Шулай ҙа һорауҙы ҡабатларға булды:

— Ә хәҙер?..

— Фашистар үлтерҙе...

— Ҡасан килде ундай хәбәр?

— Бер аҙна элек...

Малай тораташтай ҡатып ҡалды. Бер аҙҙан ҡулындағы ҙур бүреген (атаһыныҡы булһа кәрәк) ике ҡулы менән ҡат-ҡат йомарларға кереште. Ҡапыл ул башын артҡа ташлап, түбә һайғаҡтарына ҡарап ҡатты. Күҙ йәштәрен түгеп ебәреүҙән ҡурҡа булһа кәрәк. Ул, бәлки, оҙаҡ илағандыр инде. Хәҙер йәштәре лә кибеп бөткәндер. Бәлки, аҙ ғына ла балауыҙ һыҡмағандыр. «Ир балаға илау килешмәй, ауырлыҡта түҙемле була бел, улым!» — тип тәрбиәләгәндер атаһы. Владимирҙың үҙен атаһы шулай ныҡ булырға өйрәтмәнеме ни? Малайға ҡарап, директор ҙа башын күтәрҙе. Уның да күҙенә йәш тығылғайны. Кеше ҡайғыһы үҙеңдекенә ҡарағанда ла нығыраҡ тәьҫир итә. Ләкин директорға йомшарырға ярамай.

— Ярай, Мәхмүт, артыҡ борсолма, ил менән килгән уртаҡ ҡайғы бит, — тине лә, малайҙы оҙатып, ишекте кире ябып ҡуйҙы.

Кеҫәһендәге ҡулъяулығын алып, күҙ төптәрен һөрткәнлеген ул үҙе лә һиҙмәйенсә ҡалды. Александра Ивановна тап шул ваҡытта килеп инде.

— Күҙемә ниндәйҙер сүп керҙе бит әле, — тип алдашҡан булды директор.

Александра Ивановнаның үҙ туҡһаны туҡһан ине:

— Уҡырға һүҙ бирҙеме Шәғәлиев?

Директорҙың уҡытыусыға бик ауыр һүҙ әйткеһе килде. Ләкин тыйылды.

— Шәғәлиевтың атаһы үлгән, — тип әйтеү менән генә сикләнде.

— Ундай хәбәр көн дә килеп тора инде, — тине уҡытыусы ғәмһеҙ генә.

Владимир Петрович Александра Ивановнаның тел төбөн тиҙ аңланы: ундай хәбәрҙәргә ҡарап ҡына етәксе кеше арыш боламығы урынына йомшап ҡалырға тейеш түгел, ти инде, йәнәһе. Урынлымы-түгелме, Ферапонтов бер ни тиклем тәнҡит һүҙе әйтмәйенсә ҡалманы:

— Ә мин һеҙгә кешеләр яҙмышына етдиерәк ҡарарға кәңәш итер инем, Александра Ивановна.

Уҡытыусы ла сигенергә теләмәне:

— Төп маҡсатыбыҙ уҡытыу бит, Владимир Петрович!

— Төп маҡсатыбыҙ уҡытыу ғына түгел, кеше тәрбиәләү, Александра Ивановна. Кеше бөтәһенән дә бөйөк!

— Уныһын да аңлайым...

— Юҡ, аңлап бөтөрмәйһегеҙ. Баланың атаһы үлеү тураһындағы хәбәр килгәнгә бер аҙна булған. Ә һеҙ шуны ла белмәйһегеҙ...

Мәхмүттең атаһы Сабирйән Владимир Петровичтан бер йәшкә генә ҙур ине. Адрестарын алып, кисен өйҙәренә китте директор. Юлда ул үҙен дә әрләй-әрләй барҙы. Шундай хәбәрҙе аҙна буйы уҡытыусы белмәй торған. Ә директор?.. Әллә ул элеккесә ҙур энергия менән эшләмәйме? Ата-әсәләр менән элемтә лә йомшарҙымы? Фронтта кешеләр ҡан ҡоя. Бында ла эште фронттағыса ойоштороорғалыр, бәлки? Бил ҡайышын йомшарта торған ваҡыт түгел.

Шундай уйҙар менән барып инде директор Мәхмүт Шәғәлиев йәшәгән йортҡа. Улар үҙҙәре һалған өйҙә торалар ине. Уртала мөрйә. Ике яҡта бәләкәй генә ике бүлмә. Өй эсендә йәнә өс сабый. Мәхмүттән кесеһе — өсөнсө, унан бәләкәйерәге беренсе класта уҡый икән. Ҡинйә балаға әле дүрт йәш кенә. Утыҙ дүрт йәшлек алмалай ҡатын дүрт бала менән тол ҡалған. Тик сәстәренә ҡырау төшә башлаған шул инде. Йөҙөндәге ҡайғы күләгәһе әллә ҡайҙан һиҙелеп тора.

— Ҡайғығыҙҙы уртаҡлашырға килдем, — тип, директор элек Сабирйән менән бик татыу эшләүҙәрен һөйләп бирҙе.

Оҙаҡ торманы ул. Сөнки кеше ҡайғыһына артыҡ һүҙ ҙә килешмәй. Ҡатын иһә:

— Шундай оло башығыҙ менән беҙҙең ише ябай кешене һанға һуғып килеүегеҙ өсөн бик ҙур рәхмәт инде! — тип, рәхмәт әйтеп ҡалды.

Ниндәй ҙә булһа ярҙам итергә вәғәҙә биреп сығып китте директор.

Ҡара ҡағыҙҙар фронт яғынан һаман килә торҙо. Кеше ҡайғыһын уртаҡлашып йәшәү ҡыйын директорға. Уны үрләтергә, РОНО мөдире итеп ҡуйырға ла теләнеләр. «Уҡыу — энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыу», — тиҙәр. Яҡшы уҡытыусылар фронтҡа китеп бөттө. Энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙытыу ҙа һаман ауырая барҙы. Ә бына фронтовиктар еңеү яулап ҡайтҡанда, уларға ни күҙең менән ҡарап торорһоң?

— Их, һин, кеше ҡан ҡойғанда, үҙ тиреңде һаҡлап яттыңмы? — тиһә береһе...

Мәсьәлә унда ғына ла түгел. Ир кешенең урыны ил яҙмышының иң ауыр урынында булырға тейеш. Уның күңеле фронтҡа елкенде. «Һеҙ бында ла бик кәрәк», — тигән һүҙҙәргә башҡаса ризалашмаҫҡа булды ул, фронтҡа ебәреүҙәрен талап итте. Уның үтенесен ҡәнәғәтләндермәү мөмкин түгел ине.

## VII

1942 йылдың апрель аҙаҡтарында Владимир Петрович Ферапонтов Дәүләкән менән хушлашты.

— Үҙеңде һаҡла, балаҡайым, бик ярһыуһың, теләһә ниндәй ут эсенә ташланырға ашыҡма, — тине әсәһе оҙатҡанда.

— Ҡайғырма, әсәй, еңеп ҡайтырбыҙ, — тине Владимир, үҙен ғәскәри ҡиәфәттә тотоп.

Әсәһенә, ҡатыны Мария Николаевнаға, һеңлеләре Зоя менән Нинаға, ҡыҙына бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатланы ул:

— Минең өсөн тыныс булығыҙ, йөҙөгөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәм.

Ауыр минуттарҙа уның, күңел төшөрмәҫ өсөн, көлә торған ғәҙәте лә бар ине. Был юлы ла шулай итте:

— Гитлерҙың һыртын ҡайыҙлап ҡайтам, Бәләбәй егетенең йоҙроҡ көсөн татып ҡараһын әле ул, — тип көлдө. Бына нимә тип яҙа йылдар үткәс Мария Николаевна: «Владимир Петрович уҡырға ярата ине. Ҡлассик әҙәбиәтте ул яҡшы белде. Әҙәбиәт һәм төрлө мәсьәләләр буйынса бәхәс ваҡытында үҙен бик принципиаль тотто. Ғөмүмән, ул аҡыл эйәһе лә, талапсан да кеше булды. Әммә дуҫтар мәжлесендә ғәжәп күңелле итеп көлә лә, көлдөрә лә белә торғайны. Уның янына йыш ҡына кәңәшкә, ярҙам һорап киләләр ине».

Ферапонтовты башта Стәрлетамаҡтағы хәрби училищеға ебәрҙеләр. Унда имтихандарҙы ваҡытынан алда тапшырып, фронтҡа пулемет расчеты командиры сифатында китте. 68-се уҡсылар дивизияһында хеҙмәт итте. Башта улар Михайловка ауылы янына килеп туҡтанылар. Әммә был дивизия үткән юл шаҡтай оҙон, ҡатмарлы. Ул Алыҫ Ҡөнсығышта уҡ формалаша. Башта 96-сы уҡсылар дивизияһы тип атала, һуңынан 68-се уҡсылар дивизияһына әүерелә. Башҡортостандан өҫтәмә көс килеп төшкәс, дивизия командиры подполковник Жеребин уларға дивизияның данлыҡлы тарихы тураһында үҙе һөйләп бирҙе. Башҡортостанда уның булғаны бар икән. Йәмле Өфө ҡалаһын, Ағиҙел, Дим йылғаларын телгә алды. Быларҙы «Башҡортостан бөркөттәре» тип атаны. Башҡортостандан килгән ҡыҙҙарҙың Сталинградта батырлыҡтар күрһәтеүе хаҡында әйтте. Башҡорт ерендә формалашҡан 469-сы миномет полкының Курск дуғаһында аяуһыҙ көрәшеүен дә телгә алды. Был һүҙҙәр һуғышҡа яңы килгәндәргә рухи көс өҫтәне. Дивизия командирын улар бер күреүҙә яратты, сөнки батыр йөрәкле, кешелекле, матур күңелле командир янында һалдат үҙендә икеләтә артыҡ көс барлыҡты һиҙә. Бер аҙ һөйләгәс, подполковник һалдаттарға айырым-айырым мөрәжәғәт итә башланы. Бер нисәһе менән гәпләшеп алғас, уның күҙе Ферапонтовҡа төштө:

— Ну, өлкән сержант, һеҙ ҙә Башҡортостанданмы?

— Так точно, иптәш гвардия подполковнигы!

— Ауылдан? Ҡаланан?

— Бәләбәй ҡалаһынан.

— Хеҙмәтегеҙ?

— Уҡыттым... Мәктәп директоры... Дәүләкәндә...

— Белемегеҙ?

— Уҡытыусылар институтын тамамланым.

— Яҡшы! Ниндәй предмет?

— Математик.

— Математик, директор! Шәп!

Подполковник Ферапонтовҡа һоҡланып ҡарап ҡуйҙы. Ул үҙе урта белемле генә ине. Ә өлкән сержант институт тамамлаған. Ләкин был шатлыҡтың борсоулы яғы ла бар. Ә бит һуғышҡа саҡлы юғары белемлеләр бармаҡ менән генә һанарлыҡ ине! Бына был директор. Математик. Күпме балаларға белем бирер ине! Ә ул ут эсенә инергә тора. Ярай ҙа исән ҡалһа... Һуғыштың утлы ауыҙы кемдәрҙе генә йотманы...

...Һуғыш бөткәнгә ҡырҡ йылдан артыҡ ваҡыт үтте. Әммә Михайловкала, Днепр кискәндә, унан һуң да ҙур батырлыҡтар күрһәткән 68-се дивизия әле һаман йәшәй. Уның ветерандар советы эшләй. Владимир Петрович Ферапонтов менән ут эсендә бергә көрәшкән яугирҙар 1985 йылдың февраль айында Дәүләкән ҡалаһында булдылар. Владимир Петрович уҡытҡан мәктәп хәҙер уның исемен йөрөтә. Әгәр 1943 йылдың йәйендә подполковник Жеребин дивизияның данлыҡлы тарихи юлы тураһында Михайловкала буласаҡ ҡаты алыш алдынан һөйләһә, ҡырҡ ике йылдан һуң Ферапонтов хеҙмәт иткән полк командиры, хәҙер был полктың ветерандар советы рәйесе И.Ткачев «Знамя» газетаһында (Дәүләкән районы) «Иҙел далаларынан Днепрға саҡлы» тигән мәҡәләһендә былай тип яҙып сыҡты:

«Германия фашизмын еңеүгә оҙаҡламай 40 йыл тула. Ә беҙ, һуғыш ветерандары, уны тән һәм йөрәк яралары менән иҫкә алабыҙ. Ватаныбыҙҙың һәм Европа халыҡтарының азатлығы, бойондороҡһоҙлоғо, бәхете өсөн баштарын һалған дуҫтарыбыҙ хәтеребеҙҙә мәңге һаҡланыр. Улар алдында беҙ ғүмер буйы бурыслы булып, баш эйеп йәшәйәсәкбеҙ.

Һуғышты онотоу мөмкин түгел. Сөнки ул һәр совет ғаиләһенә уңалмаҫ яралар килтерҙе. Ә хәҙер, ҡырҡ йылдан һуң, Башҡортостанда йәшәгән яуҙаштарыбыҙ И.М.Лысенко, М.Б.Аносов, А.А.Мурманский, Ҡ.П.Шихов һәм башҡалар менән бөтөнләй туғанлашып китеүҙе ихлас күңелдән һәм ҙур ғорурлыҡ хисе менән әйтә алабыҙ.

1941 йылдың декабрендә Алыҫ Көнсығыш фронтының Ҡыҙыл Байраҡлы 2-се Армия командующийы приказы буйынса яңы хеҙмәт урынына килеүем бөгөнгөләй хәтеремдә. Яңы полк һалдаттарын буш казармаларҙан эҙләп йөрөнөм. Ҡискә табан бер капитанды осратҡас:

— Полк штабы ҡайҙа? — тип һораным.

— Полк штабы мин ул, — тине капитан.

Был 1389-сы уҡсылар полкының штаб начальнигы Анатолий Михайлович Ҡарюгин булып сыҡты. Ул беҙгә 96-сы уҡсылар дивизияһы формалашыуы тураһында әйтте.

Ҡомандирҙар составында кадровый офицерҙар ине. Уларҙың күбеһе Хасан күле янында, Халхин-Голда, аҡ финдар менән булған һуғышта ҡатнашҡандар. Ә инде полк комиссары майор Тюрин, Бөйөк Ватан һуғышының беренсе көнөндә үк батырлыҡ күрһәтеп, күкрәгенә орден таҡҡан кеше.

Тиҙҙән ҙур хәрби әҙерлектәр башланды. Бер ваҡыт беҙҙе, эшелонға тейәп, Көнбайышҡа оҙаттылар. Һалдаттарҙың рухы һәр саҡ күтәренке булды, әле унда, әле бында: «Фашист ҡәбәхәттәренең кәрәген бирәсәкбеҙ!»; «Алға, Көнбайышҡа!» тигән ғорур һүҙҙәр яңғырай.

Беҙ әле совет ғәскәрҙәренең 14-се август төнөндә Серафимович ҡалаһын ҡалдырыуҙарын белмәй инек. Таң алдынан беҙҙең дивизия Дон йылғаһының уң яҡ ярындағы урман эсендә тупланды. Дивизия командиры подполковник Жеребин таң атҡансы уҡ Донды кисергә һәм Серафимович ҡалаһын дошмандан кире азат итергә, Белонемухи хуторына табан һөжүм яһарға приказ бирҙе.

Алда ауыр көрәш көткәнлекте яҡшы аңланыҡ. Дондың һул яғы урманлы булһа ла, Серафимовичтың көнбайышындағы бейеклектән дошман беҙҙе күрерлек ине. Беҙ кисәһе урында ла дошмандан һис тә йәшеренеү мөмкин түгел. Иң ҡурҡынысы: беҙ әле ут эсенә тәүге мәртәбә инәбеҙ. Ул да ҡоро ер өҫтөндә түгел — йылға кисеп. Дөрөҫ, тылда бөтәһе лә өйрәнелгән. Ләкин унда һинең өҫтөңә пуля, снаряд, мина яуып тормай. Бындай йылғаны бөтә хәрби әйберҙәр менән тыныс ваҡытта ла кискән булманы. Әммә һуғыш һуғыш инде, унда устав буйынса эш итеп булмай. Тиҙ арала һал яһарға керештек. Ҡемдер плащ-палатканан кәмә этмәләй. 1379-сы полк — Затон утарының көнбайыш яғынан, 1384-се, 1389-сы полктар һул яҡтаныраҡ кисеп, Серафимович ҡалаһын көньяҡтан урап алырға һәм азат итергә планлаштырылды.

Дошман нисек кенә ныҡ ҡаршылыҡ күрһәтмәһен, дивизия полктары Дон йылғаһының һул яғына сығып, тар ғына ерҙе яулап алдылар һәм һөжүмгә күстеләр. 14 август көндө үк кискә табан 1389-сы уҡсылар полкы, иҫ киткес ҡыйыулыҡтар күрһәтеп, Затон утары янына уҡ килеп еттеләр. Батырыраҡ һалдаттарҙың ҡайһы берәһе ауылға уҡ үтеп инде.

15 август көндө иртән дошман артиллерия һәм минометтарҙан көслө ут асты. Алдынғы позицияла урын алғандарға Затондан пулемет уҡтары яуырға тотондо. Хәҙер инде бер генә минутҡа ла сабыр итеү мөмкин түгел ине. Беҙҙекеләр «ура!» ҡысҡыра-ҡысҡыра дошманға ташландылар һәм тиҙ арала бер нисә өйҙө яулап та алдылар. Ләкин мин барып етә алманым — яраландым. Был яра һаман әле үҙен һиҙҙереп тора. Снаряд ярсығы ҡалаҡ һөйәгенә эләккән. Был һуғыш «емеше» бөгөн дә шунда һаҡлана. Ул ваҡытта мине медсанбатҡа оҙатҡандар. Затон һәм Болявский утарын беҙҙекеләр 16 августа ғына азат итә алғандар. Серафимович ҡалаһы өсөн барған көрәш тағы ла ҡатыраҡ булды. Беҙҙекеләр уны 26 августа ғына азат итә алды. Унан һуң оҙаҡ ваҡыт тиҙ генә алға китеп булманы. 18 ноябрь көндө кис полк элемтәһе офицеры ҙур һөжүм хаҡында хәбәр итте. Ул 1942 йылдың 19 ноябрендә иртәнге 7 сәғәт 30 минутта башланырға тейеш ине.

Был һөжүмде һәр һалдат түҙемһеҙләнеп көттө. Сәғәт уҡтары бик аҡрын хәрәкәт итә кеүек тойолдо. Бына — ете. Ҡапыл артиллеристар, минометсылар ата башланы. Донъяны ут солғаған кеүек. Бөтә ер тетрәп тора. Ап-аҡ ҡырҙар ҡара һөрөм менән ҡапланды. Күктә лә һуғыш бара. Снаряд, мина, бомбалар шартлап ярылыуҙан ҡолаҡтар тона. Әммә һалдаттарҙың күңеле шат. «Беҙҙең урамда ла байрам булыр әле!» — тип ҡысҡыра улар.

23 ноябрь иртәһендә беҙҙең дивизия полктары танк частары менән берлектә Калач ҡалаһын азат иттеләр. Унда Көньяҡ-Көнбайыш фронты частары Сталинградтағы фашистар группировкаһын тамам еңгән Сталинград частары менән ҡушылдылар. Ә инде ноябрь аҙаҡтарында беҙҙең армия К.К.Рокоссовский командалыҡ иткән Дон фронты составына инде. Сталинград далаларында ҡаты көрәш башланды. Ҡыш бик хәтәр килде. Һалҡынлыҡ 30—35 градусҡа етә. Генерал Паулюс армияһы солғанышта ҡалған. Платоновка, Карповка, Мариновка райондарында алыш айырыуса көслө булды. Фашистарҙың атакаһын кире ҡағыу өсөн бөтә саралар ҡулланылды. Беҙҙең яҡтан һалдаттарҙы контратакаға полк комиссары майор Н.Тюрин үҙе алып барҙы. Был алышта ул геройҙарса һәләк булды. Дошман атакаһы кире ҡағылды.

Беҙ Паулюсҡа ярҙамға Котельников районынан Манштейндың ашығыуы тураһында хәбәр алдыҡ. Уларҙың берләшеүенә юл ҡуйырға ярамай ине. Мариновка, Карповканы алғандан һуң беҙ Сталинградҡа һөжүм итә башланыҡ. Шунан немецтар ике төркөмгә бүленде. Әммә Паулюс армияһы һаман ҡыҫыла

барҙы. Немец самолеттары ташлаған әйберҙәр беҙҙең яҡҡа төшә башланы. Беҙҙең авиация иһә немец самолеттарын үҙ һалдаттары янына уткәрмәҫкә тырышты.

Мамай Курганын штурмлау тураһында махсус әйткем килә. Мин был ваҡытта алдынғы сафта инем. Бейеклекте ике мәртәбә алып, ике мәртәбә ҡалдырырға тура килде. Өсөнсө һөжүмдә генә уны тамам яулап алыу бәхетенә ирештек.

1943 йылдың 1 февралендә беҙҙең дивизия Сталинградтан ваҡытлыса ялға сығарылды. 6 февралдә Оборона халыҡ комиссары приказы менән 96-сы уҡсылар дивизияһы 68-се уҡсылар дивизияһы тип атала башланы. Сталинград көрәштәрендәге батырлыҡтары өсөн 1167 кеше орден һәм миҙалдар менән наградланды. Башҡортостан бөркөтө М.П.Аносовтың күкрәгенә Ленин ордены таҡтылар.

Был көрәштән һуң дивизияға Башҡортостандан тағы ла өҫтәмә көстәр килде. Белемле, тәүәккәл, ҡыйыу яугирҙар ине улар. Алдағы көрәштәрҙә ҙур ҡаһарманлыҡ күрһәттеләр.

25 августа 68-се дивизия полктары буласаҡ һөжүм өсөн алдынғы позицияға урынлаштылар. Орел-Курск дуғаһында булған ҡаты һуғыш ялҡыны беҙҙе ошо урында ялманы. Михайловканың һул яғындағы ҡалҡыулыҡтарҙа көрәш айырыуса ҡаты барҙы. Бында, әйткәндәй, ер янды. Ҡыҙыл Байраҡлы 68-се Проскуров дивизияһы гвардеецтары үлемгә күкрәктәрен ҡуйҙылар. Улар бер метр ҙа артҡа сигенмәне. Был көрәштә Өфө егете Николай Ильич Поповҡа, Михаил Тихонович Гарнизовҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелде. Хәҙер улар алған 130,6-сы бейеклектә гранит монумент тора. Уға алтын хәрефтәр менән былай тип яҙылған: «Советтар Союзы Геройҙары Н.И.Попов һәм М.Т.Гарнизов. Улар Ватаныбыҙ өсөн, беҙҙең бәхетебеҙ өсөн үҙ ғүмерҙәрен бирҙеләр».

## VIII

Башҡортостан еренән килгәндәр араһында төрлө милләт кешеләре бар ине: башҡорт, татар, рус, сыуаш, мари... «Сит ерҙә, бигерәк тә һуғыш яланында, яҡташтар күп булыу ҙур бәхет ул. Үҙеңде нисектер ғаиләң, ата-әсәң, туғандарың араһында йөрөгән кеүек хис итәһең. Был — бер. Икенсенән, яҡташтар араһында һынатҡы килмәй. Һуғыш бөтөр, йылдар үтер, осрашыуҙар булыр. Иң ауыр ваҡытта ҡурҡаҡлыҡ күрһәтһәң, окопташ дуҫыңдың йөҙөнә ни күҙең менән ҡарарһың? Кеше булған кеше башҡалар алдында һәр ваҡыт имтихан тотоп йәшәй. Тыныс тормошта кешелеклелек сифаттарыңды күрһәтеү өсөн бар ғүмер кәрәкһә, фронтта иһә бер мәл дә етә. Өфө эшсеһе коммунист Попов ысын кеше икәнлеген бер нисә минут эсендә иҫбат итте — граната бәйләме менән «тигр» аҫтына ташланды. Үҙен һәләк итеп, йәшәү өсөн башҡаларға юл асты. Иленә, халҡына, бөйөк идеалдарға ихлас күңелдән, бөтә йөрәге менән бирелгән кеше генә эшләй ала бындай ҡаһарманлыҡты!»

Өлкән сержант Ферапонтов шулай уйланы. Башҡортостандан килгән яугирҙарҙың батырлығы менән ныҡ ғорурланды ул. Аҙ ғына ваҡыт эсендә Попов менән дә дуҫлашып киткәйне. Дөрөҫ, белем дәрәжәһе менән улар икеһе ике кеше. Владимир уҡытыусылар институтын тамамлаған, математик, мәктәп директоры, Попов — ябай эшсе. Белеме — ике класс ҡына. Беренсе һөйләшкәндә үк был эшсенең йөрәгендә дошманға ҡарата нәфрәттең иҫ киткес ҙур булыуын аңланы Владимир. Дошманына ҡарата нәфрәт Тыуған илгә булған сикһеҙ мөхәббәт аша барлыҡҡа килә.

— Һин белемле кеше, яҡташ, әйт әле дөрөҫөн генә: ниңә шул ҡәҙәре күп ер кәрәк был оңҡот Гитлерға? — тип һораны ул бер осрашҡанда.

Бер яҡтан, был һорау бик ябай тойола; икенсе ҡарағанда, ул ғәйәт ҡатмарлы. Үҙе математик булһа ла, тарихты ла ныҡ ярата торғайны Владимир, һуғыш, полководецтар тураһында күп китап уҡыны. Ҡөслө көсһөҙҙө һәр ваҡыт кәмһетеп йәшәй. Ҡөслө ил көсһөҙ илде буйһондора. Ҡешеләр бер-береһенә баш эйеп йәшәргә мәжбүр була. Гитлерҙың сәйәсәте тормошҡа ашмаҫлыҡ ине, сөнки бөтә донъяны үҙ ҡулында тоторға маҡсат ҡуйған бер генә полководецтың да планы барып сыҡмаған. Рәсәйгә ғүмер баҡый теш ҡайрағандарҙың үҙ тештәре ҡойолған. «Ҡылыс менән килгән ҡылыстан үлер», — тип бик дөрөҫ әйткән Александр Невский. Рәсәй менән шаярыу ут менән шаярыу кеүек. Тәкәббер Гитлер быны аңламай. Баҫып алыу ғына түгел, Рәсәй халҡын аҡрынлап юҡ итеп, уның ерендә немец халҡын үрсетеү ине Гитлер планы. Быларҙы һөйләгәс, Поповтың йөҙрөгө төйнәлде, тештәре шығырланы, яңаҡ мускулдары бейеште.

— Их, мин ул хәшәрәттәрҙе!.. — тип ярһыны Попов. Шул ярһыу менән ташланды ул дошман танкыһы аҫтына.

Ферапонтов өсөн иң шатлыҡлы хәл Александрҙы осратыу булды. Улар кистән яңы урынға килеп туҡтанылар. Август аҙаҡтары булһа ла, көнө буйы эҫе ҡояш ҡыҙҙырғайны. Төндә ай ҡалҡты. Күк йөҙө йондоҙҙар менән сигелде. Әйткәндәй, егет менән ҡыҙҙың ҡайнар мөхәббәтен мең тапҡыр арттыра торған шиғри төн был. Теге яҡтан да атмайҙар, был яҡтан да. Әллә фашистар ҙа матур төндөң сихри йәмен ебәрергә теләмәйҙәрме? Тәбиғәт хозурлығы менән ләззәтләнәләрме? Бындай төн һалдат файҙаһына түгел, әлбиттә. Бигерәк тә бөгөн. Улар дошмандың морон төбөндә генә. Ҡаса-боҫа килеп туҡтанылар. Тиҙ генә окоптар ҡаҙып алырға кәрәк. Баш ҡалҡытырға ла ярамай. Дошман һиҙмәһен. Ҡайһы саҡта окопты ятып ҡаҙырға тура килә. Ҡаҙып та бөтөрә һалдат, кереп тә сума. Һәр кем үҙ уйҙарына күмелә. Тыуған ерен, ғаиләһен, ҡатынын, балаларын, һөйгән йәрен һағынып иҫкә ала. Бындай саҡта һалдатҡа бик ҡыйын, һағыш, моңһоулыҡ, нескәреү уның ҡанына ярамай. Шунан бөтә яныу-көйөүҙәрен тәмәке төтөнө менән баҫмаҡсы була ул. Уны ла рәхәтләнеп тартыу мөмкин түгел — дошман күрә. Әммә балтанан аш бешерә белгән һалдат бер яй тапмайынса ҡаламы һуң? Шинеле менән төрөнөп ята ла тарта ул.

Күңел асыу өсөн икенсе бер юл — «һалдат әңгәмәһе». Дошман морон төбөндә торһа ла, йыландай етеҙлек менән бер-береһенә шыуышып килеп, гәпләшергә керешәләр. Бында инде һәр кемдең эске донъяһы, күңел сере, һүҙ һәләте — бөтәһе лә асыла.

Бөгөн, ай нурҙарын ҡойоп торған яҡты төн булһа ла, дошман яғынан ҡурҡыныс әллә ни юҡ. Алда оҙон булып үҫкән кукуруз һабаҡтары йәш урман үҫентеләрен хәтерләтеп тора. Окоптар ҡаҙылып, пулеметтар урынлаштырылып бөткәс, һалдаттар, ҡаса-боҫа килеп, Ферапонтов расчеты янына йыйыла башланы. Өлкән сержант үҙе күп һөйләмәй, сөнки ҡайһы саҡта һүҙгә ҡатнашырлыҡ та түгел. Береһе — ауыл картуфы, икенсеһе — ҡатыны, өсөнсөһө беренсе мөхәббәте тураһында һөйләй. Унан бәхәс, һүҙ көрәштереү китә. Шуның осона сыға алмайынса ыҙа сиккәндә, Ферапонтов ярҙамға килә. Шуға күрә уны «философ» тип атанылар ҙа.

Бөгөнгө ут позициялары яҡшы урында ине. Өҫтәренә килеп сыҡмайынса, дошман уларҙы күрмәйәсәк, һөжүм итһәләр, биш-алты метр ҡалғас, ҡырып һаласаҡтар. Ә беҙҙекеләргә хәҙергә алға ырғырға приказ юҡ. Сөнки бында бөтәһе

лә буталып бөттө. Бер урында беҙҙекеләр немецтарҙы ҡамап алһа, икенсе ерҙә улар үҙҙәре дошман тарафынан ҡыҫырыҡлана. Шуға күрә хәҙергә бер яҡты ла ҡибла итеп ала алмайҙар. Окоптар ҡаҙылып бөттө. Ер йомшаҡ ине, тәрән итеп ҡаҙынылар. Улар бер-береһенә тоташтырылып та ҡуйылды. Хәҙер зәңгәр күк йөҙөндә мәрйендәй емелдәгән йондоҙҙарға ҡарап, хисләнеп ятырға ла була. Теләһәң, кукуруз «туҡмағын» алып аша. Һөтлө, ауыҙҙа иреп тора.

Әммә дошмандың бер күҙе йоҡлаһа, икенсе күҙе һәр саҡ асыҡ була. Сысҡан һағалаған бесәй менән бер ул. Аңдып ҡына ята. Хаталандылар былар кукуруз эсендә сумып ҡына ятабыҙ тип. Һыҙылып таң атып килгәндә тотонмаһынмы дошман «күстәнәс» яуҙырырға! Башта ярты сәғәт самаһы снаряд, миналар ярылды. Туп-тура окопҡа килеп төшкәндәре лә булды. Әленән-әле шартлауға һалдаттарҙың ҡолаҡтары тоноп бөттө. Окоп яндарында бихисап снаряд соҡорҙары барлыҡҡа килде. Унан һуң пулеметтан ут астылар. Бер һалдат кисен япраҡтарын йәйеп торған кукуруздарҙы «кейәү шаршауы» тип атағайны. «Ҡарасы, ҡыҙ менән кейәү инеп йоҡлар өсөн ҡороп ҡуйған шаршау кеүек бит был, бына рәхәт донъя ҡайҙа икән», — тип шатланғайны. Атыштан һуң баш күтәреп ҡараһалар, «кейәү шаршауы» йыртып ырғытылғайны инде. Ул арала немецтар һөжүмгә күсте. Башта бер нисә танк күренде. Уның артынан йәйәүле һалдаттар килә.

Ферапонтов өсмөйөш булып теҙелеп килгән өс танкыға иғтибар итте. Алдағыһы командир экипажылыр инде. Ҡалған икеһе арттаныраҡ хәрәкәт итә. «Пифагорҙың был өсмөйөшө беҙҙең бәхеткәлер инде, туп-тура киләләр бит», — тип уйланы Ферапонтов. Уңға-һулға ҡараһа, унда ла танкылар өсмөйөш яһап килә. Ферапонтов расчетындағы һалдаттар ҙа Башҡортостандан ине. Баймаҡ егете, ун туғыҙ йәшлек Ямалетдин Яҡшыкилдиев, Бәләбәйҙән егерме йәшлек сыуаш Мәүли Егоров уның күңеленә айырыуса яҡын ине. Улар Стәрлетамаҡтағы хәрби училищела (ул Риганан эвакуацияланып килгәйне) бергә булдылар. Һәр нәмәгә зирәк Ферапонтов хәрби техника сәнғәтен дә тиҙ үҙләштерҙе. Ямалетдинға бөтәһе лә ауырыраҡ бирелде. Ләкин Ферапонтов уны ҙур түҙемлек менән өйрәтте. Яҡшы килеп сыҡһа:

— Йә, Ямалетдин, хәҙер «Я — молодец» тип әйт, — тип шаярта торғайны.

Ямалетдиндың күңелен күтәреп ебәрә был.

— Я молодец Ямалетдин, — ти ҙә, ҡап-ҡара ҡаштарын һикертеп, ынйылай ап-аҡ тештәрен емелдәтеп бер йылмайып ҡуя.

Бәләбәйҙә бәләкәй саҡта уҡ башҡорт, татар, сыуаш малайҙары менән аралашып үҫте Владимир. Аралашыу колонияла, Дәүләкәндә эшләгәндә лә дауам итте. Башҡа милләттәрҙең теленә һис тә иғтибарһыҙ түгел ине ул. Һәр һөйләгәндәрен аңлап торҙо. Вата-емерә булһа ла, уларса ла аҙыраҡ «һуҡалап» ала торғайны. Егоровҡа ла:

— Лайах... эпе... анлав... ку... чан... анла!..[1] — ти сыуашса.

Был ике егеттең дә һөйгән йәрҙәре ҡалған. Ямалетдин Таңсулпанын төштәрендә күреп хыяллана. Мәүли Егоров татар ҡыҙы Сәғиҙә өсөн өҙгөләнә. Егоровтың атаһы татар ҡыҙына өйләнә. Ир бала тыуғас, атаһы Николай тип исем ҡушмаҡсы була. Ә әсәһе Мәүләүи тигән исемде ярата. Башта аҙ-маҙ тартҡылаш була, ләкин уртаҡ фекергә киләләр. «Мәүләүи»ҙең — беренсе, «Николай»ҙың

[1] Яҡшы... Һин аңланың, был, ысынлап та, шулай...

икенсе ижеген алып, икеһен ҡушып, бер исем яһайҙар — «Мәүлай». Башҡорт, татарҙар уны «Мәүли» тип кенә йөрөтә башлай. Һәр һалдаттың исеме, ауылы — үҙе бер ҙур тарих. Өс кеше лә ваҡыты менән фронтта — ҙур көс. Туп-тура үҙҙәренә килгән өс танкыға ҡарап:

— Өсөбөҙгә — өсәү, — тине Владимир. — Ҡарасы: Пифагор теоремаһындағы кеүек... Тура мөйөшлө өсмөйөш гипотенуза квадраты катеттар квадраты суммаһына тигеҙ... Хәҙер тигеҙләйбеҙ... Гипотенуза... Гипотенуза... Гестапо... Гестапо... Ҡатет... Ҡатет... Ҡәтлит... Ҡәтлит... Хәҙер кәтлит яһайбыҙ...

Был һүҙҙәрҙе Ямалетдин Яҡшыкилдиев менән Мәүли Егоровҡа, башҡалар ишетерлек итеп, әйтте ул. Ауыр саҡта һалдат ғөмүмән шаярырға ярата. Күңеле төшөнкө булһа, унан өмөт көтмә инде. Һул яҡтаныраҡ йәнә өс танк килә. Былары — Ҡомаров расчеты «бәхете». «Ғалим һалдат» унда — беренсе номер. Быларға ҡул болғаны ла:

— Иптәш өлкән сержант... Владимир Петрович... катет... катет... Ҡәтлит... Ҡәтлит... Ҡәтлит сделаем... — тип ҡысҡырҙы.

Бессмертный Иван әйткәнсә, совет ғәскәрҙәре Мәскәү янында дошмандың маңлайына бәрҙе, Сталинградта һыртын ҡайыҙланы, Курск дуғаһында ҡорһағын ярҙы... Совет яугирҙары ҡорал менән генә түгел, рухи көс, ихтыяр ныҡлығы, эске батырлығы менән дә еңә... Ферапонтов һуғыштың беренсе көндәренән үк булманы фронтта. Ләкин радио аша ишетеп, газеталар уҡып, совет һалдаттарының ут эсендәге рухи ныҡлығын белә ине ул. Хәҙер инде шуның ысынлығын үҙ күҙҙәре менән күреп, үҙ ҡолаҡтары менән ишетеп тора. Ул ғына ла түгел, берсә приказ, берсә шаян тел, берсә аҡыл менән үҙе лә һалдаттарҙың күңелен күтәрә. Ни тиһәң дә, ул утыҙҙың өҫкө яғында, педагог, математик, директор кеше. Бына был Ямалетдин, Мәүли кеүек егерме йәш тирәһендәге йәш-елкенсәктәр араһында ул үҙенең «Алтын бағана» икәнлеген күрһәтергә тейеш, билдәле.

Бер арала взвод командиры лейтенант Петров килеп сыҡты. Ул ашыға ине.

— Ҡоманда булмайынса атмаҫҡа, — тине лә, башҡа расчеттарға табан йүгерҙе. Уларға шул уҡ һүҙҙәрҙе әйткәндер.

Уң яҡтан йәнә өс танк өсмөйөш яһап килә ине. Тимәк, күренгәндәре хәҙергә — туғыҙ. Ә күренмәгәндәре?..

Уларҙың, пулеметтан тыш, автомат, граната, ПТР кеүек ҡоралдары ла бар ине. Ҡорал эшләй, ир маҡтана. Ҡулында ҡоралы булғанда, ул дошманды шөрләп ҡаршы алмай. Бер иҙмәһен иҙһә, йөрәгендәге вулкандан урғылған үс аҙыраҡ баҫылып ҡала. Шуға күрә улар әле һис тә ҡалтырап төшмәне.

— Әйҙә, килә бирһендәр, «һыйыбыҙ» күп, ҡоҫҡансы ашатырбыҙ, — тип тынысланды Ферапонтов.

Ямалетдин рус телен яҡшы белмәй ине әле.

— Вот... направо... Моя танк... ПТР мой... Я будешь стрелять... Ух... Сволочь... — тип һүгенде ул.

Мәүли ҙә һүҙһеҙ ҡалманы:

— Тимәк, һул яҡтағыһы — минең «бәхет», — тип, устарына бер төкөрөп ҡуйҙы.

Ферапонтов уларҙың икеһенә лә ҡарап алды. Ямалетдиндың муйылдай ҡапҡара күҙҙәре бөгөн башҡа көндәргә ҡарағанда нығыраҡ йылтырай ине. Мәүлиҙең дә һоро күҙҙәре уттай яна. Икеһененең дә маңлайҙарына тир бәреп сыҡҡан. Көн эҫелектәнме? Әллә ҡурҡыуҙанмы? Икеһе лә барҙыр. Берәүҙең дә ваҡытһыҙ үлгеһе килмәй. Ләкин шуныһы шатлыҡлы: улар үҙҙәрен батырҙарса тота. Тик... Ниңә әле каскаларын һалып ырғытҡандар?..

— Надеть каски... — тине Ферапонтов етди тауыш менән. Ямалетдиндың үҙ туҡһаны туҡһан ине:

— Она мешает... давит... Голова тяжелый становится... как тубал... Ҡак большой котел...

— Выполняйте приказ! — тигәс кенә улар каскаларын алып кейҙеләр.

Танкылар ниңәлер бик аҡрын килә ине. Һалдат өсөн быныһы ла ҡыйын. Бындай саҡта дошман, әйтерһең, кешене психологик яҡтан аҡрынлап сығырынан сығара. Ямалетдин һүгенә башланы:

— Ашҡа ялындырып ҡына килгән наҙлы ҡунаҡ кеүек бит был эттәр...

Ферапонтов уның күңелен күтәрергә тырышты:

— Ашыҡма, Ямалетдин, күпме генә наҙланмаһындар, бына былар менән һыйлай белербеҙ... — Ул дошман яғына төбәлгән «Максим»ды һыйпап ҡуйҙы, әрйә эсендә ятҡан гранаталарға, уң яҡ брустверға ҡуйылған ПТР-ға ҡарап алды.

Ләкин улар был юлы «ҡунаҡтарҙы» һыйлай алманылар. Сөнки артыҡ «наҙланыу» улар файҙаһына булманы. Беҙҙең штурмовиктар килеп сыҡтылар ҙа, өҫтәренә бомба ҡойорға тотондолар. Улар осоп китеүгә, артиллерия, минометтар «телгә килде». Снарядтар, миналар дошман өҫтөнә борсаҡ урынына яуырға кереште. Ярты сәғәттәй барҙы был хәл. Күп кенә снаряд, мина үҙебеҙҙекеләрҙең окоптары янында ла ярылды хатта. Бындай хәлдәр фронтта йыш була. Ике яҡтағы пехота бер-береһенә яҡын торғанда, снарядтың бер аҙ «яңылыша» торған ғәҙәте бар. Пехотала хеҙмәт итеүселәр минометчиктарҙы, артиллеристарҙы күрһә: «Прицел пять, по своим опять», — тип һүгеп тә китәләр.

Нисек кенә булмаһын, был юлы үҙебеҙҙең снарядтан берәү ҙә зыян күрмәне.

Дошмандың бер нисә танкыһы янды, күп кенә һалдаттары ҡырылды. Ҡалғандары кире сигенде.

* * *

Унан һуң һалдаттар ашап алдылар ҙа, аҡрынлап Ферапонтов расчеты янына йыйыла башланылар.

— Һеҙҙе «Философ Ферапонт» тип атаныҡ, иптәш өлкән сержант, — тип һүҙ башланы «ғалим һалдат», — әйтегеҙ әле: ниңә немец халҡы һәр ваҡыт ас бүреләй ҡанға һыуһап йәшәй? Алыҫ тарихҡа күҙ ташлаһаҡ, кем күп һуғышҡан? Немец халҡы! Беренсе империалистик һуғышты кем башланы? Немец халҡы! Рәсәй ул һуғышта ла немецтарҙың танауын ҡанатты бит инде. Шул етмәгәнме ни уларға?

«Ғалим һалдат» та шаҡтай донъя күргән кеше. Утыҙ йәштәрҙә. Ул һорауҙы үҙе өсөн генә түгел, башҡа һалдаттарға аҙ-маҙ тарихи мәғлүмәт биреү теләге менән дә ҡуҙғата, шикелле. Сөнки коммунист «ғалим һалдат»ты ротала агитатор итеп ҡуйҙылар.

Ферапонтов менән улар күп ваҡыт бәхәсләшеп тә ала. Быны һалдаттар тыңлап тора. Шунан үҙ-ара дискуссия китә. «Ғалим һалдат»тың өҫтөнлөк алырға тырышыу ғәләмәтен дә һиҙә «Философ Ферапонт». Әммә ул бирешмәй. «Ғалим» һүҙҙәренә төҙәтмәләр ҙә индерә. Был юлы ла шулай итте:

— «Немец халҡы» тип һөйләмә, халыҡ бер ҡасан да һуғыш теләмәй. 1914 йылда башланған империалистик һуғышта рус һалдаттары менән немец һалдаттары дуҫлашып китте, бер-береһенә атмаҫҡа һүҙ ҡуйыша башланылар...

Һүҙгә Иван Бессмертный ҡушылды:

— Ә ниңә хәҙер ҙә шуны эшләмәйбеҙ?

— Фашизмды еңеп, Германияны немец халҡының үҙ ҡулына бирергә кәрәк, — тине Ферапонтов.

Ямалетдин ҡыҙып китте:

— Сәпсим не правилна... Наша будет Германия... Отдай Германия немецкому народу... Әпәт найдется какой-нибудь собака Гитлер... Мужыт он сто раз хуже будет — чем это Гитлер... Надоела кровь проливать... Ай-яй-яй...

Һалдаттар рәхәтләнеп бер көлөп алдылар. Ферапонтов Ямалетдин һүҙҙәренә лә төҙәтмә индерҙе:

— Беҙ азат итеү армияһы, Ямалетдин, Германия беҙҙеке булмаясаҡ, баҫып алыусылар түгел беҙ, ә бына Рәсәй халҡы менән немец халҡы араһында дуҫлыҡ урынлаштырыласаҡ...

Ҡемдер әйтеп ҡуйҙы:

— Телеграмм бағанаһы сәскә атҡасмы?

Ферапонтов быны ла яуапһыҙ ҡалдырманы:

— Телеграмм бағанаһы түгел, илдәребеҙ сәскә атасаҡ.

Ятып ҡалғансы атып ҡалайым тигәндәй, Мәүли ҙә һорау бирергә ашыҡты:

— Гитлер рустарҙы күрә алмай, еврейҙарҙы үлтерә, ә бына сыуаштарға нисек ҡарай икән?

Ферапонтов был һорауға яуап бирә алманы. Уларҙың бәхәсен дошман яғынан бер-бер артлы осҡан снаряд һәм мина тауыштары бүлде. Улар тиҙҙән окоп тирәләрендә тағы ла ярыла башланылар. Был ваҡытта рота командиры Колокольников уң флангыла ине. Ул күберәк батальон командиры приказы буйынса эш итә. Билдәле, ваҡыты менән үҙаллылыҡ күрһәтә. Уның приказы взводтарға, расчет-отделениеларға күсә. Әле лә бына уң яҡтан «По местам!» тигән команда килде. Уны Ферапонтов һул яҡҡа оҙатты, һалдаттар, биҙрәнән түгелгән картуф шикелле, тиҙ генә урындарына таралдылар. Пифагор теоремаһындағы өсмөйөш формаһын яһаған танкылар тағы ла килә ине. Артта — йәйәүле һалдаттар.

Бер үк ваҡытта танкыға ла, һалдаттарға ла атырға кәрәк ине. Ямалетдин пулеметтан пехотаға һиптерергә тейеш. Владимир Петрович ПТР-ҙы алды. «Гвардеецтар артҡа сигенмәй!» — тигән закон бар бында. Сталинградта сынығыу алған дивизия был. Ғөмүмән, дошманды йә күкрәгең менән ҡаршыла, йә алға ырғы.

Был юлы беҙҙең самолеттар ярҙамға килмәне. Артиллериянан, минометтан да атмайҙар. Ҡиреһенсә, снарядтарҙы дошман яғынан яуҙырырға тотондолар. Ә танкылар иртәнге кеүек аҡрын түгел, бик тиҙ килә башланылар. Бер ваҡыт әлеге өсмөйөш туп-тура Ферапонтов расчетына юл тотто. Ул арала взвод командирының «Огонь!» тигән ҡалын тауышы яңғыраны. Танкыларға, немец һалдаттарына беҙҙекеләрҙән ут яуҙы. «Огонь!» тигән команданы Ферапонтов үҙ расчетына ла бирҙе. Ләкин тап шул минутта брустверҙан ике-өс метр алыҫлыҡта бер снаряд төшөп ярылды. Ямалетдин ут аса алмайынса ла ҡалды. Бик ныҡ яраланғайны, уны тиҙ генә окоптарҙы тоташтырған урынға һалдылар. Әлеге өс танкының һул яҡтағыһы — «ғалим һалдат»ҡа, уң яҡтағыһы Иванға табан китте. Урталағыһы туп-тура былар окобына килә ине. «Окоптар буйынса беҙҙе һытып йөрөмәкселәр», — тигән уй йәшен тиҙлегендә телеп үтте Ферапонтовтың мейеһен. Ямалетдин яраланғас, Мәүлигә бик ышанып бөтмәне ул. Шуға күрә пулеметты үҙ ҡулына алды. Был ваҡытта башҡа расчеттар дошман менән ныҡ боғаҙлаша ине инде. Взвод командиры Петров бер арала:

— Ниңә атмайһың? Ниңә йоҡлайһың? — тип һүгенеп китте.

Быларға килгән танк ниңәлер аҡрынланы. Уға атыуҙан файҙа юҡ ине әле. ПТР пуляһы броняны тишеп сыға алмай. Бензин багына ебәрергә кәрәк. Юҡҡа

пуля әрәм итергә ярамай, быны лейтенант яҡшы белә. Ләкин ул ҡыҙыу ҡанлыраҡ. Аҡыл менән эш итергә кәрәк. Дошман һалдаттары ла алыҫыраҡ әле. Рота командиры иртән:

— Теләһә нисек атып, патрондарығыҙҙы, гранаталарығыҙҙы әрәм-шәрәм итмәгеҙ, тылдан ярҙам көтөлмәй, өҫтәмә көс килеп еткәнсе көрәшегеҙ, мәгәр бер метр артҡа сигеү юҡ, — тине.

Шуны уйлап атмай тора Ферапонтов. Немец һалдаттары инде өҫкә килеп менде, тигәндә ут асты ла, күбеһен ҡырып һалды. Улар пулемет ауыҙына килгәндәрен белмәгәндәр шикелле. Көслө уттан иҫән ҡалғандары әле уңға, әле һулға һибелде. Шул саҡ Мәүли ПТР-ҙан танкыға атырға кереште. Ләкин тейешле урынға тейҙерә алманы. Танк быларҙың өҫтөнә үк килеп менә яҙҙы ла һулға боролдо. Ферапонтов менән Егоров уңға саҡ һикереп ҡалдылар ҙа, тәрән окопҡа йәшеренделәр. Был йәшеренеү, билдәле, ваҡытлыса ине. Ферапонтов, яйлап ҡына, бер-бер артлы ике граната тондорҙо. Ләкин танк һаман окоп буйынса хәрәкәт итте. Шуныһы яҡшы: пулемет та, Ямалетдин дә иҫән ҡалды. Ләкин был һуҡыр бер тинлек кенә йыуаныс ине. Ике граната ебәреп, танкыны яндыра алмауына ҡыйынһынды ул. «Пифагор теоремаһы», имеш. Өсөнсө граната тап кәрәк урынға барып сәпәлгәс кенә иркен тын алып ҡуйҙы. Танкыға ут ҡапты. Эсенән һикергән һалдаттарҙы пулеметтан сүпләп торҙолар.

Бындай алыш дивизия һуҙылған киң урында барҙы. Шаҡтай оҙаҡ көрәштән һуң немецтарҙың ете танкыһы яндырылды. Ҡалғандары кире сигенде. Дошмандың пехотаһы ла табанын ялтыратырға мәжбүр булды.

Әммә беҙҙекеләр зыянды күп күрҙе. Пуля «ғалим һалдат»тың маңлайына тейгән. Ул үлем менән артыҡ яғалаша ла алмаған, шикелле. Пуля Иван Бессмертныйҙың йөрәге аша үткән. Бына һиңә «Үлмәҫ һалдат»... Ә шулай ҙа яугирҙар күңелендә «Үлмәҫ кеше» булып ҡалды ул. Бындай һалдаттар бөгөн дә ил, халыҡ күңелендә йәшәй. Ҡешелек бәхете өсөн баш һалғандар мәңге тере!

Ярсыҡ Ямалетдиндың бер нисә урынына тейгәйне. Береһе эсен айҡаған, икенсеһе һул күҙен умырған. Шулай ҙа үлемгә тиҙ генә бирелмәне ул. Әленән-әле һыу һораны. «Таңсулпаным», «Әсәйем», «Атайым» тигән һүҙҙәрҙе әйтте. Ләкин һыу береһендә лә булманы. Старшина көндөҙгө ашты килтерергә тейеш ине. Ул да һыу төбөнә сумған балыҡтай юҡ булды. Бер-бер хәлгә осрағандыр, билдәле. Һуғыш бит... Тик бында бөтәһе лә буталып бөткән. Ҡайҙа немецтарҙың алғы һыҙығы? Беҙҙекеләрҙеке ҡайҙа? Бер арала рота командиры ғына мәсьәләне бер ни тиклем аңлатып китте. Быларға һөжүм иткән немецтар үҙҙәре солғанышта ҡалған, имеш. Уларҙың артында йәнә беҙҙекеләр, ти. Шуға күрә, миңгерәгән тауыҡтарҙай, ҡайҙа барып бәрелергә белмәйҙәр. Немецтарҙың әле беҙҙекеләрҙең артынан да килеп сығыуҙары мөмкин икән. Михайловка ауылы янында ла төркөм-төркөм булып һуғышалар, ти. Рота командиры сигенергә лә, алға барырға ла ҡушмай. Ул взводтан взводҡа йөрөй, батальон командиры менән элемтә тота. Тәғәйен генә конкрет бер приказ бирергә үҙе лә икеләнә, шикелле. Ә дошман һаман килә торҙо. Ҡискә саҡлы беҙҙекеләр уларҙың ете атакаһын кире ҡаҡты. Ҡояш нурҙары ла ҡыҙҙырҙы. Ашарға ла, эсергә лә килтермәнеләр. Сөнки беҙҙең кухня дошман яғында тороп ҡалған. Улар унда нисек көрәшәләрҙер, быларға мәғлүм түгел. Ямалетдин төш ваҡыттарында йән бирҙе. Форсат табып, уны ла, башҡаларҙы ла ерләп ҡуйҙылар.

Ҡискә табан беҙҙекеләрҙең сафтары шаҡтай һирәгәйҙе. Ашау тураһында уйларға тырышманылар, сөнки ерҙә тәгәрәп ятҡан, дары еҫе һеңгән кукуруз сәкәндәре яҡшы ғына аҙыҡ булды. Ләкин бер йотом һыу өсөн улар ныҡ тилмерҙе. Физик

көс бөтөнләй бөтөп, рухи көс кенә ҡалды, шикелле, һалам өҙөрлөк тә хәл юҡ. Дошман килһә, барыбер арыҫлан урынына ташландылар. Ҡискә табан взвод командиры ла, рота командиры ла яраландылар. Ферапонтовҡа икеһенең дә урынына ҡалырға тура килде. Эңер ваҡытында иҫән-имен ҡалған һалдаттарҙы йыйҙы ла:

— Беҙ солғанышта ҡалдыҡ, шикелле, әммә төндә һөжүм-фәлән булмаҫ, ә бына үҙебеҙгә хәрәкәт итергә кәрәк, тик ҡайһы яҡҡа икәнлек хәҙергә билдәһеҙ, — тине.

Тап шул ваҡыт артҡы яҡта атыш тауыштары ишетелде.

— Тимәк, солғанышта ҡалыуыбыҙ асыҡланды, — тине Ферапонтов, үҙен тыныс тоторға тырышып, — окоптарға!.. Ҡомандаһыҙ атмаҫҡа...

Дошмандың бөтөнләй көтмәгән яҡтан һөжүм итеүе һалдаттарҙы ныҡ шомландырҙы. Уларҙың атырға патрондары ла бик аҙ ҡалғайны инде. Нисек кенә булмаһын, пулеметтарҙы бөтөнләй кире яҡҡа бороп, «ҡунаҡтарҙы» «яҡшы» ғына ҡаршыларға уйланылар. Улар бында кеше барлыҡты бөтөнләй белмәйҙәрҙер, бәлки. Өҫкә килеп сыҡҡансы көтөргә лә, йоҙроҡ менән дөмбәҫләргә. Немецтарҙың ҡул һуғышына ул тиклем сыҙам түгеллеген беҙҙекеләр белә. Әлбиттә, был әле фараз итеү генә. Һуғышта хәлдәр минут-секунд эсендә үҙгәрә. Өсмөйөш, гипотенуза, катеттар хаҡында һөйләне... Өсөһөнә өс танк ине... Ана нисек килеп сыҡты...

Төрлөсә фекер йөрөттө «Философ Ферапонт». Унан һуң: «Ҡул һуғышына күтәрелергә!» — тине.

Үҙенең ысын философ була алыуына шатланып та ҡуйҙы ул. Паника тыуҙырыу менән уларҙың тороп йүгереүҙәре лә бар. Арт яҡтан ут асасаҡтар. Дошмандың ҡоралдары ла быларға ҡала.

Ғөмүмән, төнгә ҡаршы һөжүм һирәк була. Ә инде солғанышта ҡалһаң, уныбыны уйламайһың. Тимәк, ысындан да, былар ҡайҙа барып бәрелергә белмәгән ахмаҡ баштар. Ана киләләр. Ҡараңғыла кәүҙәләре бик яҡшы күренмәй, билдәле. Таралышып киләләр, шикелле... Йөҙ метр... Илле метр... Ун метр... Инде өҫкә килеп баҫтылар тигәндә, ҡар аҫтынан дәррәү күтәрелгән ҡорҙар кеүек, былар ҡапыл аяҡ өҫтө баҫтылар ҙа, һә тигәнсе тегеләргә ташландылар. Уҫмаҡлашып көрәшеү китте. Ләкин, уйланылғанса, тегеләр тороп ҡасманы, киреһенсә, йоҙроҡтары менән быларҙы түпәләргә кереште. Ферапонтов «бәхетенә» бик көслөһө тура килде, һала ла ебәрә, һала ла ебәрә тегене. «Сволочь», «шакал», «козел» тигән һүҙҙәр менән һүгенгәнен ишеткәс, бының рус һалдаты икәнлеген һиҙеп алды Ферапонтов.

Тиҙ арала шул аңлашылды: былар үҙебеҙҙең һалдаттар булып сыҡты. Хәҙер инде йоҙроҡлашыу түгел, ҡосаҡлашыу, ҡул ҡыҫышыу, үбешеү китте. Әммә көнө буйы атакаға килгән немецтарҙың да сафтары бар икән әле. Уң яҡтан атҡан пулемет уҡтары окоптарға таралырға мәжбүр итте.

Былар өҫтәмә көс ине. Уларҙың ҡоралдары ла, ашамлыҡ-эсемлектәре лә, флягаларында һыуҙары ла бар ине.

Ашаған ваҡытта уҡ Ферапонтов бөгөнгө көрәш хәлдәре тураһында һөйләне. Унан һуң окоптарҙы тағы ла тәрәнәйтергә, иртәгә буласаҡ һөжүмдә көтөргә һүҙ ҡуйыштылар.

Бер аҙҙан ай ҡалҡты. Окоптар «яңыртылып», ҡаҙылып бөткәс, Ферапонтов янына таҙа ғына кәүҙәле берәү килеп ултырҙы.

— Ҡем менән алышҡаныңды белдеңме, яҡташ? — тип һораны ул.

Ферапонтов уға иғтибар итте. Ай яҡтыһында, ныҡлап булмаһа ла, кешене бер аҙ төҫмөрләргә мөмкин. Тауышы бөтөнләй таныш. Ҡатыраҡ, тупаҫыраҡ тауыш.

— Туҡта!.. Туҡта!.. Һуң... һин бит был!..

— Мин был... «Һары тубал»... Үҙеңде быуып үлтерә яҙҙым бит...

— Ну, көс, әй, һиндә...

— Бәй, эшсе ҡулы инде...

Улар ҡысҡырып көлөп ебәрҙеләр ҙә, ҡосаҡлашып, балаларса шаярышып алдылар.

* * *

Икенсе көндө беҙҙекеләр үҙҙәре һөжүмгә күсте. 130,6 бейеклеген алыу өсөн айырыуса ҡаты көрәш барҙы. Унда күрһәткән батырлыҡтары өсөн Н.И.Поповҡа һәм М.Т.Гарнизовҡа Советтар Союзы Геройы тигән исем бирелде. Хәҙер алда Днепр ине. Полк командиры Ткаченко «Иҙел далаларынан Днепрға саҡлы» тигән мәҡәләһен былай дауам итә: «Героик көрәштәрҙе һанап сығыу ҙа ҡыйын. Башҡортостандан килгән полкташтарым тураһында бер нисә һүҙ әйткем килә. Хәҙерге ваҡытта Башҡортостанда йөҙгә яҡын полкташым бар. Улар йәштәргә патриотик тәрбиә биреү менән шөғөлләнә. Атлы разведчиктар А.А.Мурманский, Ҡ.П.Шихов фронтта әйтеп бөтөргөһөҙ батырлыҡтар күрһәтте. Ҡатмарлы, ауыр һуғыштар ваҡытында улар батальондар араһындағы элемтәне бер ҡасан да өҙмәнеләр, полк командирының, артиллеристарҙың приказын тейешле урынға теүәл еткерҙеләр. Хәрби приказды үтәгәндә Мурманский бик ҡаты яраланды, ә Шихов һуңынан полк командирының адъютанты булып китте. Башҡортостандан килгән И.М.Лысенко, Т.С.Байза, Ф.С.Хәсәнов, З.Х.Мөхәммәтйәнов, Н.Л.Усманов һәм башҡа бик күптәр гвардеец данын юғары тоттолар.

Орел-Курск дуғаһындағы ҡанлы һуғыш 2 сентябргә тиклем дауам итте әле. Михайловка янында немецтарҙы тар-мар иткәс, беҙҙең дивизияны 40-сы армияның 52-се корпусы ҡарамағына тапшырҙылар. Унан һуң полктар ун дүртенән алып егерме өсөнсө сентябргә саҡлы Лубна, Пирятин, Яготин, Переяслав-Хмельницкийҙар аша Днепр йылғаһына тиклем ҙур һикереш яһаны. 23—24 сентябрь төнөндә беҙ Днепр янындағы Яшник ауылы тирәһендә инек инде... Йылғаны бик ауыр шарттарҙа кисергә тура килде. Өҫкә снаряд, мина, пуля яуып тороу ғына етмәгән, йөҙләгән дошман самолеттары бомба ҡойорға тотондо. Днепр снаряд, бомбалар ярылыуынан ҡайнап торҙо. Батыр гвардеецтарға ҡаршы дошман атакаһы бер генә минутҡа ла туҡтаманы. Ҙур юғалтыуҙар аша булһа ла, дошмандың һәр атакаһы кире ҡағылды.

Немецтар был урында беҙҙең тиҙ арала йылға кисеп сығыуыбыҙ хаҡында баштарына ла килтермәгәндәр. Ә инде сыға башлағас, беҙҙе Днепрға батырыу өсөн, улар бында ҙур көстәрен тупларға керештеләр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, гвардеецтар артҡа сигенмәне, ҙур героизм күрһәтте, фашистарҙы ярһый-ярһый тар-мар итте.

Днепрҙы кискәндә һәм уң яҡтағы плацдармды киңәйткәндә күрһәткән батырлыҡтары өсөн дивизияның 35 яугирына Советтар Союзы Геройы исеме бирелде. Улар араһында Башҡортостандан килгән В.П.Ферапонтов, Н.И.Попов һәм Н.А.Черныхтарҙың да фамилиялары бар ине».

* * *

Соколов Александр менән осрашыуға Ферапонтов ныҡ шатланды. Уны үҙ расчетына алды. «Аҫыл кеше алтын тип үлмәҫ, халҡым тип үлер», — ти. Халҡына тоғро кешелә ҙур көс бар.

Яңы ғына килгән взвод командиры — егерме йәшлек лейтенант Ҡлиновой — улар һалында бергәләп сығасағын әйтте. Батырлыҡ һүҙҙә түгел, яуҙа беленә, тигәндәй, лейтенанттың нindәйерәк яугир буласағын хәҙергә берәү ҙә белмәй. Үҙен былай бик етди, ҡаһармандарса тота. Был һалдаттарҙың рухын күтәрә. Сыуаш егете Мәүли Егоровтың да биле ныҡ быуылған. Быларға йәнә бер яҡташ — һалдат Сабирйән Ғәйнетдинов килеп ҡушылды...

Ферапонтовты тиҙ таныны Сабирйән Ғәйнетдинов. Тик өлкән сержант ҡына үҙ күҙҙәренә ышанмайынса торҙо. Улмы? Директор булып эшләгән сағындағы завхоз Сабирйән Ғәйнетдиновмы? Әллә туғаны-фәләнеме? Оҡшашлыҡ ҡына бармы? Үле хәбәре килгәйне бит. Шуның арҡаһында малайы Мәхмүт, бөтәһенә ҡул һелтәп, уҡымай башланы; дүрт бала менән ҡалған ҡатыны Мәрйәмдең сәстәре күҙгә күренеп ағарҙы. Дөрөҫ, Ферапонтов ярҙамында Мәхмүт яңынан уҡып китте. Ҡулынан килгәнсә, Владимир Петрович уларҙың ғаиләһенә ярҙам ойоштorҙо. Быларҙың береһе лә атай кешене алыштыра алмай, билдәле.

Ферапонтов ҡат-ҡат һорашҡас, «үлеү» хәбәрен бына нисек аңлатты Ғәйнетдинов.

...Ул бер ваҡыт Дәүләкәндән күңелһеҙ хат ала. Имеш, сибәр ҡатыны Мәрйәм яттар менән күңел асып, типтереп йәшәй, һуғыш яланындағы ире өҫтөнән көлә. Шул көндө көслө атака була. Дошманға ярһып ташлана Сабирйән һәм... бейеклекте алғанда бик ҡаты яралана. Икенсе көндө уның «үле кәүҙәһен» табалар. Шунан ғаиләһенә «батырҙарса көрәшеп һәләк булыуы» тураһында хат яҙыла.

Был хаҡта белмәй Сабирйән Ғәйнетдинов. Аңына килһә, үҙенең зәңгәр күккә ҡарап ятҡанлығын аңлай. Шунан Ғәйнетдинов госпиталгә оҙатыла, һауығып сыҡҡас та «башынан көлгән» ҡатынына хат яҙмай. Унан һуң Днепр янында 68-се дивизияның Ферапонтов хеҙмәт иткән полкына килеп эләгә. Осрашып танышҡас, аңлашҡас, Ферапонтов уны ла үҙ расчетына алды. Уларҙы хәҙер «Интернациональ расчет», «Яҡташтар расчеты» тип тә йөрөтәләр. Ләкин Сабирйән Ғәйнетдиновтың ауыр яҙмыш яраһын уңалтыу шаҡтай ауырға тура килде.

Ферапонтовтың кеше һүҙен яҡшылап тыңлағас ҡына үҙ фекерен әйтә торған ғәҙәте бар. Башта ул Ғәйнетдинов һөйләгәндә ҡолағын да, йөрәген дә ҡуйып тыңланы. Ел иҫмәй япраҡ һелкенмәй тигәндәй, ут эсендәге кешегә бер ҙә юҡҡа шундай алама хат яҙмағандарҙыр! Был — боҙоҡ кеше эше. Бысраҡ атыусыларҙы фаш итергә кәрәк. Ғәйнетдинов та алтын ялатҡан кеше түгел. Ниндәйҙер гонаһы булырға мөмкин. Ә теге үс ала. Шуға күрә Ферапонтов күп кенә хәлдәрҙе һорашты. Маңлайына бәреп һорау бирһәң, Сабирйән башын ситкә бора. Педагог кешене алдауы ҡыйын. Ғәйнетдиновтың ниндәйҙер үҙ этлеге булыуҙы һиҙҙе Ферапонтов. Шуны уйлап, ялғанламаҫҡа, бөтәһен дә асыҡтанасыҡ һөйләргә ҡушты.

— Ну, Владимир Петрович, прәме йөрәккә инеп бараһығыҙ, һеҙгә дөрөҫөн әйтмәйенсә булмай... — тине Ғәйнетдинов, оҙаҡ ҡына уйланып торғас.

— Дөрөҫөн һөйлә. Алдашыуҙы яратмайым.

— Беҙҙән ун өй аша Зина исемле бер кәнтәй бар ине... — тип һөйләп китте Ғәйнетдинов... — Тол ҡатын. Шуның менән бәйләндем, иҫәр. Мәрйәм һиҙгән бит быны. Бик ҡаты әйткән тегеңә: «Дүрт балалы ир менән йөрөргә нисек ғәрләнмәйһең, һепертке!» — тигән. Ҡатын-ҡыҙҙың теле табанға етә бит уның. Зина минең Мәрйәмгә: «Бер иреңде ауыҙлыҡларлыҡ рәтең дә булмағас, ни бысағыма дүрт бала таптың?» — тигән. Ҡиткән һүҙ, киткән талаш, сәс йолҡошор хәлгә еткәндәр. Ярай, күрше ҡатыны быларҙы аралап ҡалған. Шунан Зина:

«Ыштанһыҙ ҡалһам ҡалырмын, мәгәр һине Сабирйән менән йәшәтмәм», — тигән. Бына шундай саҡта сығып киттем бит мин, Владимир Петрович, фронтҡа. Ғәйеп үҙемдә инде. Хәҙер терһәкте тешләп булмай. Шул Зина этлеге микән ни һуң был? Шул яҙҙы микән ни? Вәт йылан.

Мәсьәлә кем яҙыуҙа түгел. Мәсьәлә ул хатҡа ышаныу-ышанмауҙа. Кем яҙһа ла, ышанмаҫҡа кәрәк. Ферапонтов ҡайғыларын уртаҡлашырға барғас, Зина менән булған күңелһеҙ хәлде Сабирйәндең сибәр ҡатыны Мәрйәм бөтөнләй телгә алманы. Ул Сабирйән өсөн өҙгөләнә. Ирен ҙурлай. Үндай ҡатын түбәнлеккә бармай. Дүрт баланы ҡарарға кәрәк. Шул ҡатында сит ир ҡайғыһы булһынмы ни? Мәрйәмдең сибәр йөҙөндә, эскә батҡан күҙҙәрендә, яңаҡ соҡорҙарында күпме ҡайғы күләгәһе. Күҙгә күренеп ағарған сәстәре ире ҡайғыһынан бит. Малайы Мәхмүттең һиҙҙермәйенсә генә эстән әрнеүе, уҡымай башлауы атай хәсрәтенән түгелме ни?

Шул хаҡта һөйләне Ферапонтов Ғәйнетдиновҡа. Өлкән сержант ихлас йөрәк менән аңлатты. Уны һүҙһеҙ генә тыңланы Сабирйән. Тыңлаған һайын оҙон кәүҙәһе лә, юғары тотоп йөрөй торған башы ла бөгөлә барҙы. Шулай ҙа уға рәхәт ине. Эсендә йыландай сағып тороусы ҡара төйөр юҡ булды. Иркен тын алып ебәрҙе лә:

— Рәхмәт, Владимир Петрович, ышандырҙығыҙ, йөрәгем бушап ҡалды; ахмаҡтан маҡталғансы, аҡыллынан туҡмал, ти, һүгегеҙ мин иблесте, — тине.

Йөрәге менән йомшап һөйләһә лә, Ферапонтов талапсанлыҡты, ҡатылыҡты бер ҡасан да юғалтмай.

— Хәҙер үк ҡатыныңа ғәфү үтенеп хат яҙ, быны элекке директорың ҡушыуы тип уйлама, командир приказы булараҡ ҡабул ит!

Ғәйнетдинов честь бирҙе:

— Есть ҡатынға хат яҙырға!

## IX

...«Яҡты киләсәк өсөн» тигән мәҡәләһендә (Дәүләкән, «Байраҡ», 1985, № 22) хәҙер Ленинградта йәшәгән, ул ваҡытта старшина булған Василий Николаевич Макаров былай тип яҙа: «Ҡанлы һуғышта һәр метр ерҙе фашизм ҡоллоғонан азат итә-итә сентябрь айына Днепрҙың һул яғына килеп еттек. Был Киевтан 80—90 километр самаһы ине. Йылғаны аша сығыу өсөн бик аҙ ваҡыт бирелде. Днепр ярына кисен килеп тупландыҡ. Ҡараңғы ине. Бомбаға тотоу, атыу аҙ ғына ла туҡталып торманы. Мин үҙебеҙҙең рота өсөн һуғыш ҡоралдары килтергәйнем, шунда пулеметсыларға тап булдым. Владимир Петрович Ферапонтов взвод командиры менән бер һалда сығырға тейеш инеләр һәм улар беҙҙең участкала Днепрҙы тәүгеләрҙән булып кисәсәктәре, уң яҡ ярға беренсе аяҡ баҫасаҡтары тураһында әйтте. Һәм бына пулеметсылар, автоматсылар, шул иҫәптән Владимир Петрович, уң яҡ ярҙағы ергә беренсе булып аяҡ баҫтылар. Төнгө ҡаты һуғышта, хәрби дуҫтарын юғалта-юғалта, башта ҙур булмаған урынды азат иттеләр. Һуңыраҡ, плацдарм бер ни тиклем киңәйтелгәс, ошо уҡ төндө беҙҙең рота ла Днепрҙың уң яғына сығып өлгөрҙө. Был ваҡытта инде көрәш йылға ярынан алыҫтараҡ бара ине.

Днепрҙың уң яғындағы плацдарм киңәйә барҙы. Беҙ алға ынтылдыҡ. Ҡанлы һуғыш дауам итте.

Владимир Петровичтың бер ҡаты көрәштә ныҡ яраланыуын мин һуңынан ғына ишеттем».

...Беҙҙекеләр сыға башлау менән фрицтар һауаға ракеталар сөйөргә тотондо. Ул арала пулеметтары, пушкалары, минометтары «телгә килде». Снарядтар, миналар яҡында ғына ярыла. Дошман самолеттары бомба ҡойорға кереште. Ҡайнаған тулҡын хәҙер диңгеҙҙәге көслө штормды хәтерләтә. Бер бомба шартлауынан Ферапонтов расчеты урынлашҡан һал бөтөнләй ҡаплана яҙҙы. Шулай ҙа улар иҫән ҡалды. Ишкәктәр көслө кешеләр ҡулында, әлбиттә, һул яҡтан — Владимир Ферапонтов менән Мәүли Егоров, уң яҡтан Александр Соколов менән Сабирйән Ғәйнетдинов ишә. Һалға ҡоралдар, аҙыҡ-түлек тейәлгән. Тауыш, команда биреү юҡ бында. Шулай ҙа взвод командиры лейтенант Ҡлиновойҙың:

— Братцы!.. Хлопцы!.. Держитесь!.. Быстрее!.. — тигән тауышы ғына урыҡ-һурыҡ ишетелеп ҡала.

Ярылыуҙар күбәйеп киткәс, кемдер:

— Бөттөк, — тип ҡысҡырҙы.

Ферапонтовтың:

— Паникаға бирелмәҫкә! — тигән ҡалын тауышы яңғыраны.

Уң яҡ ярға яҡынлашып килгәндә, былар өҫтөнә дошман пулеметтан һиптерергә кереште. Бер пуля хатта Ферапонтовтың ҡолаҡ япрағын «тешләп» китте. Ракета менән яҡтырта-яҡтырта ата немецтар. Шуға күрә һалды ныҡ тиҙләтергә кәрәк ине. Ферапонтовтың ҡулдары ниндәйҙер бер көслө механизм кеүек эшләп торҙо. Александр Соколовтыҡы ла шунан кәм булмағандыр. Башҡалар ҙа тырышты. Бер ваҡыт дошман ракетаһы ни эшләптер былар һалын яҡтыртмай башланы. Улар хәҙер ҡараңғылыҡ эсендә. Инде аҙыраҡ иркен тын алайым тигәндә, аждаһалай ажғырып килгән бер снаряд тап былар ултырған һалдың уртаһын тишеп төшөп китте. «Прямое попадание» тиҙәр быны. Унан берәү ҙә — хатта шайтан үҙе лә — ҡотолоп ҡала алмай.

Ләкин снаряд ярылманы. Былар бәхетенә булғандыр инде. Ә бына икенсе снаряд уларҙан ике-өс метрҙа шартланы. Көслө тулҡын һалды сайҡалдырып ебәрҙе. Кемдер һыуға ҡоланы.

— Братцы!.. Ҡотҡарығыҙ!.. Йөҙә белмәйем... — тигән тауышҡа Ферапонтов һыуға һикерергә мәжбүр булды.

Бындай ҡиәфәттә уның үҙенең дә йөҙгәне юҡ ине. Сыланған кейем, ауыр итек шундуҡ аҫҡа тарта башланы. Етмәһә, тағы ла бер снаряд төшөп ярылды. Уның тулҡыны әлеге йөҙә белмәгән һалдатты Ферапонтов янына алып ырғытты. Владимир тегенең яғаһынан эләктереп алды ла, йөҙөүен дауам итте. Йәнә бер снаряд һалдың һул яғына төшөп ярылды, һал тағы ла сайҡалып китте. Был ваҡытта улар ярға яҡынлашҡайны инде. Хәҙер дошман пулеметы утынан иҫән ҡалыу өсөн тиҙ генә таралышырға кәрәк ине.

— Һалдан төшөргә! Бер нәмәне лә ҡалдырмаҫҡа! — тип команда бирҙе лә лейтенант, үҙе лә һыуға һикерҙе. Ләкин һаман тәрән ине әле. Һыу оҙон һалдаттарҙың да муйынына етте. Бөтөнләй күмелгәндәре лә булды. Был ваҡытта, әлеге һалдатты һөйрәп, Ферапонтов та килеп етте. Йөҙә белмәгән кеше Сабирйән Ғәйнетдинов булып сыҡты. Уны ярға этеп ебәргәс, Владимир һалға ташланды.

— Живо!.. Тиҙ!.. Ҡаушамағыҙ!.. — тип һөйләнде ул. Һалды яр буйына яҡыныраҡ елтерәтеп килтерҙе. Йөҙә белмәүселәр тағы ла бар икән. Бығыр-бығыр килеп маташҡандарын төртөп ебәрә торҙо. Александр Соколов та ярҙам итте. Уң яҡ ярға беренсе булып Ферапонтов аяҡ баҫты. Ләкин был ерҙең үҙе һайлаған урын түгел икәнлеген аңланы ул — уң яҡҡараҡ киткәндәр. Хәҙер һул яҡҡа юл торорға кәрәк, «һә» тигәнсе ҡоралдарҙы, башҡа кәрәк-яраҡтарҙы алғас:

— За мной! — тине лә, Ферапонтов һул яҡҡа йүгерҙе. Башҡалар ҙа уға эйәрҙе. Ләкин дошман пулеметтан ут асты. Тимәк, һайлаған урынға фриц оялап та алған. Ферапонтов уйлауынса, был — Днепрҙы кискәндә артыҡ оҙаҡ мыштырлау һөҙөмтәһе. Нисек кенә булмаһын, бәлтерәп торорға ярамай ине. Хәҙер һеләүһен хәрәкәте кәрәк. Уларға аяҡ баҫҡан урынды тиҙ арала киңәйтеү өсөн приказ бирелгән. Полк командирының әйтеүенсә, ярҙан күтәрелеп бер аҙ барғас, Гученко тигән ауыл булырға тейеш. Уларға таң алдынан шуны яулап алыу бурысы йөкмәтелгән. Хәҙер иң башта совет һалдаттарын ут менән ҡаршы алған пулеметты юҡ итергә кәрәк ине.

— Иптәш лейтенант!.. Рөхсәт итегеҙ... Мин үҙем... — тине лә, Ферапонтов ике граната алды. — Ә һеҙ «Батальон, за мной!» тип ҡысҡырғанда, «Ура!» күтәрелерһегеҙ... Соколов!.. Мин килгәнсе... пулеметтан һин атырһың...

Лейтенант ни тип әйтергә лә белмәне. Ферапонтов ҡараңғылыҡ эсенә инеп юғалды. Ҡлиновой иһә ауыр хәлдә ҡалды: кем һуң әле бында дәрәжәһе яғынан ҙурыраҡ кеше — офицермы, әллә өлкән сержантмы? Ҡем командовать итергә тейеш? Расчетын ташлап, рөхсәтһеҙ-ниһеҙ ҡайҙа китеп олаҡты ул?

Ферапонтов йылға буйлап йүгерҙе. Үҙҙәре аяҡ баҫҡан ерҙән һул яҡҡа. Унан һуң, тал ҡыуаҡтарын йыра-йыра, өҫкә күтәрелде. Дошман пулеметы алыҫ түгел ине. Шыуышып, һул яҡтан яҡынайырға булды. Ләкин ҡапыл пулемет тынып ҡалды. Атмай. Шуға күрә ҡараңғыла гранатаны ҡайҙа томорорға белмәй аптыраны. Хаталанырға ярамай, артта — бөтә полк. Ҡулда — ике граната. Шуның береһе дошман пулеметы өҫтөнә төшөп ярылырға тейеш. Бына пулемет тағы ла ут сәсергә тотондо. Бер гранатаны Владимир тондороп өлгөрҙө, ләкин ул пулемет өҫтөнә төшмәне. Арыраҡ китеп ярылды. Шулай ҙа пулемет атыуынан туҡтаны. Шунан файҙаланып, лейтенант: «За мной! В атаку!» тип команда бирҙе. Ул: «Ферапонтов дошман пулеметын сәнселдерҙе», — тип уйланы булһа кәрәк. Ләкин пулемет тағы ла атырға кереште. Был ҡурҡыныс ине. Беҙҙекеләрҙе ҡырып һаласаҡ. Ниңә лейтенант пулеметты юҡ иткәнде, ҡысҡырғанды көтмәне?

Ферапонтов икенсе гранатаны ырғытты. Быныһы тап төбәгән урынға барып төштө. «Батальон, за мной!», «Ура!» тип, ҡалын тауыш менән ҡысҡырып, үҙе, һеләүһен кеүек, фашистар окобына ырғыны. Дошман пулеметының беренсе, икенсе номеры бөгөлөп төшкәйне. Ләкин Ферапонтов өсөн был тулы еңеү түгел ине әле. Һул яҡтан береһе автоматтан атып ебәрҙе. Бер пуля Владимирҙың уң яҡ беләген ҡыйып үтте. Ул арала уға ҡараңғыла өс немец ташланды. Уҫмаҡлашып һуғышыу китте. Владимир яраһы тураһында аҙ ғына ла уйламаны. Уны хатта һиҙмәне лә. Ике немецтың яғаһынан алып баштарын бер-береһенә бәрҙе, өсөнсөһөнөң эсенә тибеп ебәрҙе. Немецтар атманы. Уны тереләй алырға теләнеләр булһа кәрәк. Хәйер, ҡараңғы, тар окопта атыу мөмкинлеге юҡ ине: бер-береһенә тейҙереү ҡурҡынысы бар. Ул арала «Ура!» тауыштары яҡында ғына яңғыраны. Беҙҙекеләр окопҡа бәреп керҙеләр. Тегендә-бында граната ырғытыу, атышыу китте... Немецтар окоптарын ташлап ҡасырға мәжбүр булды.

* * *

Украина ерендә сентябрь аҙаҡтарында йылы була. Ләкин төндә, таң алдынан бер аҙ һыуытып ебәрҙе. Һалдаттарҙың бөтәһе лә Днепрҙа сумып сыҡҡайны. Тик еүеште, һалҡынды берәү ҙә тойманы. Дошман окобы хәҙер улар ҡулында. Беренсе хәрби задание үтәлде. Ферапонтовтың ҡолаҡ япрағындағы яра себен тешләгән кеүек кенә ине. Беләген дә пуля аҙ ғына семетеп киткән. Бер арала уны бәйләп, яраһын кешегә һиҙҙермәҫкә тырышты. Хәҙер инде Гученко ауылына

һөжүм итергә кәрәк, «Һин ҡурҡмаһаң, дошман ҡурҡыр, һин ҡурҡһаң, дошман ҡурҡмаҫ», — ти. Бында икеләнеп тороу урынһыҙ. Яҡтырғансы ауылды алмаһаң, ауыҙыңды асып ҡалыуың бар.

Дошманға паника тыуҙырыу өсөн, пулеметты тиҙ генә урынлаштырып, бик ҡаты ут астылар. Фрицтар яғына гранаталар ҙа осто. Автоматтарҙан да пуля һибелде. «Бына беҙ ниндәй көслө, табанығҙы ялтыратмаһағыҙ, әжәлегеҙ ошо Украина ерендә, хәшәрәттәр», — тигәнде аңлата ине был. Ул арала, хор менән «Ура!» ҡысҡырып, беҙҙекеләр алға ырғылды. Ләкин ауылға яҡынлашып килгәндә, уларҙы тағы ла дошман пулеметының көслө уты ҡаршы алды. Хәҙер туранан-тура һөжүм итеү мөмкин түгел ине — уттың ауыҙына барып кереү була. Ергә тәлмәрйен кеүек һеңеп ятыуҙың да файҙаһы юҡ. Дөрөҫ, һалдаттар бер-береһенән шаҡтай алыҫ ара ҡалдырып һибелгән. Ҡараңғыла фриц уларҙы күрмәйенсә ата. Беҙҙекеләр дошман окобының ауыл янында ғына булыуҙарын аңлап алды. Сигенеүселәрҙең шул арала ҡаҙып өлгөрөүҙәре мөмкин түгел. Тимәк, ауыл янында уларҙың запас ут позициялары булған.

Уң яҡтан лейтенанттың:

— Окоптар ҡаҙырға! — тигән командаһы булды. Һалдаттар уны бер-береһенә тапшырҙы. Шундуҡ бәләкәй көрәктәр хәрәкәткә килде.

Взвод командирының был командаһын Ферапонтов оҡшатманы. Ҡаҙынып маташмаҫҡа, ауылға бәреп инергә кәрәк ине. Ярай, әлегә ҡараңғы. Яҡтырғас, дошмандың морон төбөндә ни эшләп ятмаҡ кәрәк?

Украинаның мамыҡтай йомшаҡ ерендә окоп ҡаҙыу ауыр булманы. Тик был урында үлгән кешеләй тынып ятыуҙы Ферапонтов ахмаҡлыҡҡа һананы. Ни эшләргә? Дошман пулеметына ут асһаң, бынан алыҫыраҡ кеүек. Граната ла барып етмәй. Ә инде пулеметты селпәрәмә килтермәйенсә, һалдаттарҙы атакаға күтәреү бик ҡыйын. Юғалтыу күп була.

Окоптағы пулемет янында Александр Соколов менән улар икеһе бергә ине. Мәүли Егоров менән Сабирйән Ғәйнетдинов — һул яҡталар.

— Беҙгә бында оҙаҡ ятырға ярамай, Сашка, — тине Ферапонтов.

— Мин дә шулай уйлайым, Владимир Петрович, — тип килеште Александр.

Улар, йыландай шыуышып, ҡараңғылыҡ эсенә инеп юғалды. Һул яҡлабыраҡ алға барҙылар ҙа, бәләкәй генә окоп ҡаҙып алдылар. Унан һуң пулеметты килтереп урынлаштырҙылар. Хәҙер дошман пулеметына туп-тура ут асырға була.

Немецтар ни эшләптер атмай башланы. Тимәк, улар таң ваҡытында һөжүмгә әҙерләнә. Йә булмаһа, беҙҙекеләр күтәрелеүҙе көтә — урып һалырға торалар.

— Владимир Петрович!.. Рөхсәт итегеҙ!.. Мин уң яҡҡа китәм... Автоматтан ут асҡас... Үҙегеҙ күрерһегеҙ...

— Һин ярһыма әле, Соколов!..

— Рөхсәт итегеҙ!..

— Планыңды әйт...

— Һуңынан аңларһығыҙ...

— Ярай...

Өлкән сержант «ярай» тип әйтеү менән, йылан тиҙлеге менән шыуышып та китте Соколов. Унан һуң янына Мәүлиҙе саҡырҙы Ферапонтов. Пулеметтан өлкән сержант үҙе атасаҡ. Мәүли ярҙам итеп торорға тейеш.

Ҡлиновой, түш менән шыуышып, бер арала Ферапонтов янына килде.

— Был ниндәй баш-баштаҡлыҡ? Ниңә минең рөхсәтһеҙ былай алға киттегеҙ? — тип һүгенде ул.

Ферапонтов һүҙ ҡуйыртыуҙы кәрәк тапманы.

— Һуңынан аңлатырмын, иптәш лейтенант!

— Һеҙ кемгә буйһонаһығыҙ?

— Миңә плацдармды киңәйтергә, Гученко ауылын яулап алырға приказ бирелгән, иптәш лейтенант! Полк командиры ҡушты... Ул ваҡытта һеҙ беҙҙең янда түгел инегеҙ...

— Кәңәшләшеп эшләргә кәрәк...

Тап шул ваҡыт уң яҡтан, һис көтмәгән урындан, берәү дошманға ут асты. Бының Соколов икәнлеген аңланы Ферапонтов. Немец пулеметы уның үҙенә пуля яуҙырырға кереште. Өлкән сержант өсөн бик уңайлы ваҡыт ине был. Ул «максим»ына тулы ирек бирҙе. Беҙҙекеләр уртанан да ата башланы. Ә инде Ферапонтовтың көслө уты дошман пулеметы расчетын он-талҡан килтерҙе. Өс яҡтан атҡас, фашистарҙың солғанышта ҡалдыҡ, тип уйлауҙары тәбиғи ине. Ул арала Ферапонтовтың: «Батальон, за мной!», «Ура!» тигән ҡалын тауышы яңғыраны.

Бында батальон юҡ ине, билдәле. Ул, дошман быларҙың сафы ишле, тип уйлаһын өсөн шулай ҡысҡыра. Рота командиры менән батальон командиры ла бында түгел. Улар һаман әле йылға кисеүселәр янында, башҡа участкала.

«Ура» тауышын башҡалар күтәреп алды. Һалдаттар йәнә алға ырғылды. Шул шауҡым менән улар Гученкоға бәреп керҙе. Әммә ауылда ла уларҙың юлына берәү ҙә аҡ йәймә йәйеп ҡуймаған. Майлы бутҡа менән дә ҡаршы алманылар. Беренсе өйҙөң тәҙрәһенән пулемет уты һибелә башланы. Ферапонтов «максим»ын яҡынға уҡ ҡуйып ут асты. Тәҙрәләр селпәрәмә килде. Дошман пулеметы тонсоҡто, күрәһең, атыуҙан туҡтаны.

Был ваҡытта яҡтырып килә ине инде. Тәбиғәттең үҙ законы. Ул һуғыш булыуға ҡарамай. Көн дә таң ата, ҡояш сыға. Яңы көн тыуа. Ҡояш ауыл өҫтөнә алһыу нурҙарын йәйҙе. Бер ваҡыт бөтәһе лә тынып ҡалды. Ул да оҙаҡҡа барманы. Киң урам буйлап немецтар килә ине. Улар, беҙҙекеләрҙе Днепрға батырырға теләп, тағы ла һөжүмгә күсте.

Ферапонтов пулеметын тиҙ генә канауға урынлаштырҙы. Хәҙер урам һуғышы көтөлә ине. Ләкин ул арала беҙҙекеләргә өҫтәмә көс килде. «Ура!» ҡысҡырып, ауылға бәреп керҙеләр. Фрицтар, уттан ҡурҡҡан бесәй кеүек, ауылдан сығып шылды.

* * *

Башҡортостандағы әбейҙәр сыуағы төҫлө көн бөгөн. Тәбиғәт хозурлығы таң ҡалырлыҡ. Кешеләр, бәлки, бер ваҡыт аңға килеп, ҡояштың гәлсәрҙән саф нурҙарын ҡан менән аралаштырыуҙан туҡтарҙар. Днепр, уның буйындағы яландар шул хаҡта уйлап моңая, ауыр тын ала кеүек.

Ауылға хәҙер рота, батальон, полк командиры ла килгәйне. Тынғыһыҙ гвардия майоры Ткачев тәүҙә Ферапонтовты эҙләп тапты. Оҙаҡ ваҡыттар айырылышып торғандан һуң күрешкән туғаны кеүек күреп ҡосаҡлап алды уны полк командиры:

— Молодец, герой!..

Дөрөҫ, лейтенант Ҡлиновой ғәйепләп маташты. Имеш, өлкән сержант Ферапонтов үҙ белдеге менән эш итә, взвод командирының һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмай, һалдаттар алдында уны ауыр хәлдә ҡалдыра.

Полк командиры башта Ферапонтов файҙаһына һөйләне:

— «Власть» командир ҡулында булһа ла, һәр һалдатҡа үҙенсә эш итергә лә юл ҡуйырға кәрәк, лейтенант!

Шулай ҙа Ткачев Ферапонтовҡа киҫәтеү ҙә яһаны:

— Батырлыҡ шәп нәмә, ләкин һәр утҡа үҙ күкрәгеңде ҡуйырға ашыҡма, башҡаларға ла ирек бир, өлкән сержант!

Ферапонтов та яуапһыҙ ҡалманы:

— Башҡалар ҙа ҡаты һуғышты, иптәш гвардия майоры, ауылға яҡынлашып килгәндә, һалдат Соколов уң яҡтан атып, дошман пулеметының утын үҙ яғына бурорға мәжбүр итте, ваҡыттан файҙаланып, мин немецтарҙы ҡырып һалдым. Иван Савельев... һалдат Егоров... Ғәйнетдинов... тағы ла... Бөтәһе лә һәйбәт һуғышты...

Полк командиры, ихлас күңелдән рәхмәт әйтеп, башҡа подразделениеларға китеп барҙы.

* * *

Ашап-эсеп алғас, таҙарынырға, ҡырынырға, гимнастеркаларҙы йыуып киптерергә, аҡ яға тегергә тотондолар. Яндарына ҡарт-ҡоро, бала-саға, ҡатын-ҡыҙ килә башланы. Береһе — икмәк, икенсеһе — һөт, өсөнсөһө йомортҡа тотҡан. Әммә уларҙы һалдаттар ҡабул итмәҫкә тырышты. Сөнки ауыҙҙарынан өҙөп биргәнлектәрен беләләр.

Бер арала хат ташыусы ефрейтор Николаев килеп етте. Ферапонтовҡа хат бар ине. Ул ҡатынынан булып сыҡты. Хаттарҙы таратып бөтөргәс:

— Көтөп торам, тиҙ генә яуап яҙығыҙ, кискә саҡлы теге яҡҡа сығып оҙатырға кәрәк, — тине.

Ферапонтов хатты тәьҫирләнеп уҡыны. Сөнки Мария Николаевна йөрәк йылыһы менән яҙғайны: «Володя! Йәнем! Михайловка янында барған ҡаты һуғыштарҙан һуң яҙған хатыңды алдым. Бына яуап яҙам. Бер ут эсенән иҫән сығыуыңа бик шатмын. Хәйер, көн дә ут эсендәлер инде һеҙ. Хатыңды күтәренке күңел менән яҙғанһың. Ул минең рухымды тағы ла нығытып ебәрҙе. Һинең ярһыу, намыҫлы кеше икәнлегеңде аңлайым. Башҡаларҙың ауырлығын үҙ яурыныңа ала торған ғәҙәтең дә бар. Мин һине ана шул яҡшы сифаттарың, кешелеклегең өсөн яратам. Ләкин ҡыҙыбыҙ һәм мин, әсәйең һәм туғандарың өсөн үҙеңде һаҡларға тырыш, һин бит талантлы. Киләсәгең бик ҙур.

Мәктәп, бөтә таныштар һине һағынып иҫкә ала. «Илгә бирһәң ашыңды, ил ҡәҙерләр башыңды», — тип дөрөҫ әйтәләр икән. Ҡатын кеше өсөн ире хаҡында яҡшы һүҙҙәр ишетеп тороуҙан да ҙур бәхет юҡтыр. Күптән түгел Мәрйәм исемле бер ханым килде. Ире һуғышта үлгән. Дүрт бала менән ҡалған, һин уға матди яҡтан ярҙам иткәнһең икән. Шул яҡшылығыңды әйтергә килгән миңә. Һинең арҡала малайы һәйбәт уҡып киткән. «Алтын тутыҡмаҫ, яҡшылыҡ онотолмаҫ», — тигәндәре ошолор инде. Мин үҙем дә һиңә ҡарап үҫтем. Әйтелмәгән күпме йылы һүҙҙәр ҡалған йөрәктә. Ниңә бергә саҡта уларҙы бер-беребеҙҙән йәшереп йөрөнөк икән? Һин ҡайтҡас, тотош көндәр, тотош төндәр бөтә эс серемде һөйләр инем...»

Хатты уҡып сыҡҡас, Сабирйән янына барҙы Ферапонтов. Былар әле бер ҡарсыҡ ихатаһында инеләр. Бер түмәргә ултырып, ул да хат яҙып маташа икән. Мария Николаевнаның үҙ хатында уның ҡатыны Мәрйәм тураһында ла телгә алыуын әйткәс, Сабирйән ҡапыл үҙгәреп китте, бер ағарҙы, бер ҡыҙарҙы, ни тип әйтергә лә белмәйенсә торҙо. Ғәйнетдиновтың кисерештәрен һиҙҙе Ферапонтов. Әйҙә, янһын йөрәге. Әрнемәгән таш йөрәктән рәтле кеше сыҡмай. Хатты ул Ғәйнетдиновтың ҡулына тотторҙо:

— Мә, уҡы!

«Ҡатын кеше өсөн ире хаҡында яҡшы һүҙҙәр ишетеп тороуҙан да ҙур бәхет юҡтыр. Күптән түгел Мәрйәм исемле бер ханым килде. Ире һуғышта үлгән. Дүрт бала менән ҡалған, һин уға матди яҡтан ярҙам күрһәткәнһең икән. Шул яҡшылығыңды әйтергә килгән миңә...» — тигән һүҙҙәрҙе уҡығас, ҡойолдо ла төштө Ғәйнетдинов. Оҙаҡ уйланып ултырҙы. Ҡатын-ҡыҙ ирен ана нисек яҡшы итеп күрергә теләй икән. Ә ул ниндәй ир-егетлек күрһәтте Мәрйәменә? Өҫтөнән йөрөнө. Мыҫҡыл итте. Етмәһә, уны хәҙер «үлде»гә һанайҙар. Шулай булыуы яҡшыраҡтыр ҙа, бәлки. Ҡатыны, балалары алдында үлгән кеше инде ул хәҙер. Әйҙә, онотһондар. Мәрйәм сибәр, уңған, булдыҡлы ҡатын. Үҙ тиңен табыр әле. Ундай аҡыллы ҡатын бәхетле булырға тейеш. Хат яҙып, йөрәген яндырырға ярамай.

Шулай уйланы ла, яҙған хатын йыртҡылап ырғытты ул.

— Ни эшләйһең, Ғәйнетдинов?! — тип асыуланды Ферапонтов.

— Ғәфү итегеҙ, иптәш өлкән сержант... Шулай кәрәк... Мин йүнһеҙҙе мәңгегә юғалтһындар...

— Яңылышаһың, Ғәйнетдинов! Ғәфү үтенеп хат яҙ! Мин хәҙер командир булараҡ әйтәм. Ҡарышырға хаҡың юҡ. Шуны бел: дүрт балаңды, ҡатыныңды ҡыйырһытып йәшәргә бынан һуң юл ҡуймам! «Көт, Мәрйәм, ҡайтырмын!» — тип яҙ.

Ферапонтов уға оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Ғәйнетдиновҡа ла буйҙы Хоҙай йәлләмәгән. Ул ҡара сибәр. Ҡуйы ҡаштары ҡарлуғас ҡанатылай матур булып тора. Тик артыҡ ябыҡ ул хәҙер. Хәйер, көн-төн һуғышҡан һалдатҡа ниндәй ит ҡунһын, ти. Хәҙер ул ҡатыны, балалары өсөн дә үҙен-үҙе өҙгөләйҙер. «Сибәрлеген ҡатын-ҡыҙға өләшеп йөрөгән бит, ахмаҡ», — тип уйлап, башҡа бер һүҙ әйтмәйенсә, аҡрын ғына атлап китеп барҙы өлкән сержант.

Ферапонтов киткәс, Ғәйнетдинов тағы ла хат яҙырға кереште. Яҙа ла йырта. Яҙа ла йырта. Башҡа әллә ниҙәр килә. Ҡағыҙға төшөрә башланыңмы — барып сыҡмай. Атакаға барыуҙан да ауыр икән дә баһа хат яҙыу. Янды, тирләне, беште, әммә хатты яҙҙы Ғәйнетдинов. Унан һуң уҡып ҡараны: «Һеҙ ки ғиззәтлү вә хөрмәтлү булып торғыусы хәләл ефетем Миңлемәрйәмкәйем, балаларым! Һеҙгә күптин күп, суҡтин суҡ сәләмдәремде күндерәм. Беҙ иҫән. Ҡырҡ утҡа инеп, ҡырҡ уттан янмайынса сыҡтыҡ. Әллә һинең ҡайнар мөхәббәт күләгәң шулай һаҡлаймы мине? Дөрөҫ, үлгән саҡ та булды. Госпиталдә лә ятып сыҡтым. Мине үлдегә сутлап һиңә хат та яҙғандар икән. Гонаһтарым өсөн ярлыҡа, Мәрйәм йәнем! Бынан һуң ундай әшәке эшкә барһам, муйыным һынһын, сәнселеп китәйем, ер йотһон. Вәт.

Бер кәнтәй һине яманлап хат яҙҙы, һин, имеш, башҡа ир ҡуйынында һары майҙай иреп ятаһың. Башта ышандым. Кеше һүҙе кеше үлтерә бит ул...

Бында беҙ Владимир Петрович Ферапонтов менән осраштыҡ. Ул һинең хаҡта һөйләне. Мине көтәһең икән. Көт, йәнем!.. Владимир Петрович минең командирым.

Вәт кеше! Пулеметтан дошманды тураҡлай ҙа һала. Бөгөн Днепрҙы кискәндә батып үлә яҙҙым... Прәме бөтөп-бөткәйнем. Ауыҙға һыу тулды. Күбенгән һыйыр кеүек булдым. Инде һыу төбөнә киттем тигәндә, Владимир Петрович яғанан эләктереп алған. Вәт көс кемдә икән, әй. Утыҙ биш йәшкә етеп, йөҙә лә белмәйем бит. Ә тормошта йөҙөп йәшәргә кәрәк икән. Ҡалғанын ҡайтҡас һөйләрмен. Күп ҡалманы бит инде. Гитлерҙың кәйефе осҡолоҡ тотҡан ҡарттыҡы кеүек, ти. Ҡул һуғышы ла булып ала. Гитлер һалдаттарын ҡойроғон ҡыҫҡан кәзә урынына баҡыртабыҙ. Ҡасалар, әй. Уттан ҡурҡҡан шайтан урынына ҡасалар. Ҡаты ҡыуабыҙ шул. Маҡтана тимә, Миңлемәрйәм, һинең алда хөсөтлөк эшләһәм дә, фронтта мах биргән юҡ. Минең өсөн һинең дә, балаларҙың

да йөҙө ҡыҙармаҫ. Әммә ләкин һинең ҡош теле ҙурлығы ғына хатың кәрәк. Уны алһам, көсөм мең өлөш артасаҡ. Арыҫлан кеүек көрәшәсәкмен. Ысын. Валлаһи. Ышан миңә. Бынан һуң алдамам. Бөтә йөрәгем менән яратам һине! Беҙ бит хәҙер гвардеецтар! Ә бит, Мәрйәм, гвардеецтар артҡа сигенмәй. Үлемгә ышанмайбыҙ. Грамота бәләкәй икәнлекте беләһең. Ҡилештереп яҙа алмайым. Шуны ғына әйтәм. Көт! Ҡайтырмын... Ошо урында тучка ҡуям да, ғәйепләмәһәң, бер йыр яҙам...

Ал да булырбыҙ әле,
Гөл дә булырбыҙ әле;
Араға дошман кермәһә,
Бергә булырбыҙ әле».

* * *

Был ваҡытта, ишек алдындағы бер бүрәнәгә ултырып, Ферапонтов үҙе лә ашыҡ-бошоҡ ҡына хат яҙып алды. Унан һуң уҡып ҡараны: «Мария! Хатыңды алдым. Бына шул минутта уҡ яуап яҙам. Бөгөн төндә Днепрҙы кистек. Дошман бомбалары, снарядтар өҫкә борсаҡ урынына яуып торҙо. Ләкин совет һалдатын алға барыуҙан туҡтатырлыҡ көс юҡ был донъяла. Миңә Днепрҙы беренсе булып кисеү бәхете эләкте. Йылғаның уң яҡ ярына тәүге аяҡ баҫыусы булдым. Шулай итеп, бөтә полк ышанысын аҡларға тура килде. Совет һалдатының ошо бер сентябрь төнөндә күрһәткән батырлығы тураһында ғына ла бик күп роман яҙып булыр ине. Мин быға тиклем йәшәүҙе бик аңлап та бөтөрмәгәнмендер. Йәшәү — көрәш. Быны күп аҡыл эйәләре әйткән. Ә көрәш үҙе нимә? Минеңсә, көрәштең төп мәғәнәһендә кешелеклелек идеяларының иң юғары нөктәһе тора. Фашизм еңелер. Беҙ — Европаға азатлыҡ алып килеүсе. Был көрәштә кешелеклелек тигән бөйөк төшөнсә һаҡлана. Ана, ни өсөн көрәшә совет һалдаты! Һин Александр Соколовты беләһең. Ул Дәүләкәндә бер нисә мәртәбә булды. Беҙ ҙә уға ҡунаҡҡа барғыланыҡ. Александр менән бер расчетҡа тура килдек. Бөгөн ул, иптәштәрен үлемдән һаҡлап ҡалыу өсөн, дошман утын үҙ өҫтөнә алды. Был кешелек бәхете өсөн түгелме ни? Һуғыш уты эсендә кешелеклелектең ғәжәп көслө яңы сифаттары асыҡлана. Мин кешеләргә ышанам! Был ышаныс бөтмәҫ-төкәнмәҫ көс бирә. Иҫ киткес кешеләр бар бында. Хат ташыусы Николаевты ғына алайыҡ. Уға бит аҙыраҡ сабыр итеп торорға ла булыр ине. Ә ул, башҡа һуғышсылар менән Днепрҙы бергә кисеп, беҙ бөгөн алған Гученко ауылына хаттарҙы килтереп тә еткерҙе, һалдат өсөн тыуған яҡтарҙан килгән хаттарҙы уҡыуҙан да күңеллерәк минуттар юҡтыр. Днепрҙы кисеү еңел булманы. Алда ауырыраҡ көрәш көтөлә. Бөгөн үк 172,6 бейеклегенә һөжүм итергә тейешбеҙ. Мин был көрәшкә һинең аҡыллы һүҙҙәр менән яҙылған хатыңдан алған яңы рух менән барам. Ҡурҡма, аҡыллым, миңә бер ни ҙә булмаясаҡ!

Бөтәгеҙҙе лә һағынам, әлбиттә. Нык һағынам. Әсәйем янында йышыраҡ булырға тырыш, Мария! Борсолмаһын. Бөгөн уға ла хат яҙам. Зоя менән Нинаның яҡшы уҡытыуы тураһындағы хәбәрең дә мине нык шатландыра. Уларға ла хат ебәрәм. Ҡыҙым Светлананы һағыныуымды белдерерлек һүҙ ҙә таба алмайым. Хәҙергә үҙем өсөн иң изге теләгем шул: Берлинды алыуҙа ҡатнашыу, һеҙҙең янға еңеүсе сифатында ҡайтыу...»

Унан һуң Ферапонтов әсәһенә, һеңлеләренә хат яҙҙы ла, Николаев янына китте. Яңынан әйләнеп килгәндә, Ғәйнетдинов яҙған хатын уҡып ултыра ине.

— Әллә ниңә һәйбәт яҙылмай, иптәш гвардия өлкән сержанты... грамыта етмәй... Белем ике класс ярым ғына бит...

— Хат яҙырға грамота түгел, йөрәк кәрәк, Ғәйнетдинов...
— Йөрәк бар ҙа ул...
— Һуң?..
— Йөрәктәгене әйтеп бөтөрөп булмай...
— Ҡалғанын ҡайтҡас әйтерһең...
— Ҡайта алырбыҙмы?
— Ҡайтасаҡбыҙ...
— Бына бер йыр ҙа яҙғайным...
— Йә, йә...
— Урыҫса примернә былай була: «Мы с тобой дәлнәйшем будим как два цветок... если между нами враг не будит, вместе буду жит...»
Ферапонтов көлөп ебәрҙе:
— Баштағыһы һәйбәт: ике гөл... Ә ниңә «дошман» һүҙен ҡыҫтыраһың?
— Эйе шул...
— Йыр бөткәнме ни?
— Йыр бар ҙа ул...
Бер аҙ уйланып торғас, икенсе йыр әйтте Ғәйнетдинов:

Ал булмай булмай, булмай,
Гөл булмай булмай, булмай;
Минең күңелем һине уйлай,
Һинең күңелең кемде уйлай?

Башта ул бик матур тойолғайны. Ҡапыл шундай йыр табыуына шатланып ҡуйҙы хатта. Ләкин «Һинең күңелең кемде уйлай?» тигәнен оҡшатып бөтмәне. Һаман шул ышанмау ғәләмәте түгелме был? Унан һуң: «Һәй, йырҙың йыртығы юҡ», — тине лә, тәржемә иткәндә уныһын төшөрөп ҡалдырырға булды. «Будем как цветок... я тулке о тебе думаю», — тип әйтте.
— Это хорошо! — тип китеп барҙы Ферапонтов.
Унан һуң кәртәгә һөйәлеп, нимә хаҡындалыр гәпләшеп торған Александр Соколов менән Мәүли Егоров янына барҙы Ферапонтов.
— Һеҙ хат яҙманығыҙ шикелле?
Яуапты башта Соколов бирҙе:
— Беҙ бит хат алманыҡ.
Һүҙгә Мәүли ҡушылды:
— Ә мин Днепрҙың теге яғында саҡта яҙып ебәргәйнем.
— Был яҡтан да яҙығыҙ. Марусяңдың һине нисек яратҡанын беләм, Александр, тилмертмә уны хат менән... Бына ҡағыҙ... Ҡәләм...
Соколов ауыр һулап ҡуйҙы.
— Ҡул бармай әле яҙырға, иптәш гвардия өлкән сержанты!
Ферапонтов уға аптырап ҡарап торҙо:
— Һиңә ни булды, Соколов, төҫөң киткән?
Соколов һүгенергә тотондо:
— Сволочтар... Ух, был фашистарҙы... эттәр...
— Туҡта әле... Ни булған?..
— Һеҙ хат яҙғанда, беҙ бер фажиғә күрҙек... Әйҙәгеҙ әле, иптәш өлкән сержант... Ун һигеҙ йәшлек ҡыҙ... Ә сәстәре ап-аҡ... Уға ҡырҡ йәш биреп була... Хәҙер аҡылдан яҙған... Фашистар атаһын, әсәһен күҙ алдында атҡандар... Ун биш көн язалағандар был ҡыҙҙы...

Улар биш өй аша бер ихатаға барып инһәләр, теге ҡыҙ шунда һалдаттарға ниҙер һөйләп тора ине. Күреү менән Ферапонтовты килеп ҡосаҡланы ла, теләһә ни һөйләргә кереште:

— Бына минең ағайым да килеп етте... Ул партизан... Ә атайым ҡайҙа икән?.. Ниңә ул килмәй?.. Һеҙ немецтарҙы тағы ла ҡыуаһығыҙмы?.. Мине лә алаһығыҙмы?.. Мин дә китәм һеҙҙең менән... Ҡырып бөтөрәбеҙ фашистарҙы... Ха-ха-ха...

Ҡыҙға, Соколов әйткәнсә, ысынлап та, ҡырҡ йәштәр самаһы бирергә була. Сәстәре ап-аҡ. Күҙҙәре мәҙәкләнеп эскә батҡан.

— Әйҙә, беҙгә инәйек, сәй эсерермен, — тип тартҡыланы ул Ферапонтовты.

Тап шул ваҡыт батальон командиры капитан Богатыревтың: «Расчет командирҙары, минең янға!» — тигән приказы яңғыраны.

Теге ҡыҙҙы бер әбей етәкләп алып китте. Расчет командирҙары капитан Богатырев янына йыйылдылар. Унда рота командиры Колокольников менән взвод командиры Клиновой бар ине.

## X

Днепр аша совет ғәскәрҙәре уң яҡҡа һаман сыға торҙо. Плацдармды бер өҙлөкһөҙ киңәйтергә кәрәк ине. Алда — 172,6 бейеклеге. Полк командиры Ткачев уны бөгөн үк алырға бойорҙо. Ул әле үҙе батальондан батальонға, ротанан ротаға йөрөй. Был яҡҡа һаман сығып бөтмәгән подразделениелар янында була. Батальон командиры Богатырев менән рота командиры Колокольников көрәштең етди буласағын аңлатты. Расчет командирҙары уны һалдаттарға еткерергә тейеш. Хәйер, һәр яугир алда ниндәй ауыр алыш көткәнлекте яҡшы белә. Беҙҙең артиллерия, миномет, танкылар һаман теге яҡта әле. Уларҙы был яҡҡа күпер аша ғына сығарырға мөмкин. Өҫкә бомба, снаряд яуып торғанда күпер һалыу уйын эш түгел. Дошман атакаға күтәрелә икән, уның бөтә ниәте — совет ғәскәрҙәрен Днепрға ҡыҫырыҡлау. Ә беҙҙекеләрҙең һөжүмгә күсергә йәйәүле һалдаттан башҡа көстәре юҡ. Нисек кенә булмаһын, 172,6 бейеклегендәге дошман ояһына бөгөн бәреп керергә кәрәк. Бында хәрби көс түгел, оҫталыҡ, хәйлә, отҡорлоҡ ярҙам итергә тейеш.

Ләкин немецтар совет ғәскәрҙәренә алға барырға ирек бирмәй, «Ура!» тип таш ярырҙай ҡысҡырыуҙың һис файҙаһы юҡ. Пулемет уты ялмап ҡына тора. Дөрөҫ, беҙҙекеләр бер-береһенән шаҡтай ара ҡалдырып һибелгән. Дошман пулеметы ла алыҫ әле. Әммә тау башына менеп еткәнсе, ул беҙҙең һалдаттарҙы арыу ғына сүпләйәсәк. Батальон командиры менән рота командиры уң яҡтараҡ НП-ға яйлаштылар. Әгәр бик киҫкен ваҡытта һалдаттарҙың ҡыйыулығы етмәһә, батальон командиры атакаға үҙе күтәрмәксе ине. Хәҙергә ундай мөмкинлек тә һиҙелмәй. Был — бер. Икенсенән, полк командиры Ткачев Ферапонтовҡа утҡа алдан ташланмаҫҡа ҡушты. Командирҙар йә яралана, йә яҡты донъя менән мәңгелеккә хушлаша. Уларҙы һаҡларға кәрәк.

Дошман пулеметы тау башындағы амбразурала ине. Уға беҙҙең артиллерия ла, миномет та атмай. Самолеттар ҙа юҡ. Улар, күрәһең, Днепр өҫтөндә дошман самолеттарына ҡаршы көрәшә, йылғаны сығып килеүсе беҙҙең ғәскәрҙәр өҫтөнә бомба төшөртмәҫкә тырыша.

Етмәһә, немецтар тағы ла артиллериянан, минометтан атырға кереште. Снарядтар, миналар яҡында ғына ярыла. Ферапонтовтың һул яғында Иван Иванович Савельев расчеты ине. Савельев әле ун туғыҙ йәштә генә. Ул —

Ҡуйбышев егете. Романтик күңелле. Ярһыу йөрәкле. Михайловка янында ла, Днепрҙы кискәс тә, арыу ғына һуғышты. Егоров менән Ғәйнетдинов Ферапонтовтан уң яҡҡа яйлаштылар. Уларҙың икеһендә лә автомат. Пулеметтан Соколов та яҡшы ата. Ләкин Ферапонтов «максим»дан үҙе һиптерергә булды. Был һис тә Александрға ышанмауҙан түгел. Александрҙың йоҙроғо дошманға ныҡ төйнәлгән. Тик ауырыраҡ кәүҙәле ул. Ваҡыты менән, башты ҡалҡытмайынса, йыландай шыуышырға кәрәк. Был юлы ла Ферапонтовҡа шулай тура килде. Атыу бер аҙ баҫылғас, пулеметын алып, уң яҡҡа шыуышты ул. Взвод командирының: «Куда, Ферапонтов, вернись!» — тигән тауышын иҫкә лә алманы. Уның артынан Александр ҙа ҡалманы. Ул да Ҡлиновойҙың: «Соколов, вернись!» — тигән ҡысҡырыуына ҡолаҡ һалманы. Ергә йыландай һырығып шыуышты улар. Йөҙләгән күҙ күҙәтте уларҙы. Хәҙер инде уң яҡлап дошман амбразураһына яп-яҡын ҡалдылар. Әммә пулеметты ҡуйырға ҡулай урын һаман табылманы. Дошман окобынан алыҫ түгел бер снаряд соҡоро бар ине, шунда шыуышты Ферапонтов. Барып төшкәс, икеһе лә иркен тын алып ҡуйҙы. Хәҙер инде оҙаҡҡа һуҙырға ярамай ине.

Ләкин атырға һаман ашыҡманы Ферапонтов. Бер яйын көттө. Соколов хатта борсола башланы.

— Әллә беҙ бында йоҡларға килдекме? — тип бышылданы бер арала.

— Ярһыма, уның файҙаһы юҡ, яйы тура килмәй тора, — тип тынысландырҙы уны Владимир.

Соколов ҡулына ике граната ла алғайны. Уларҙы күрһәтте:

— Тондорам!..

— Юҡ, хәҙергә ярамай...

Бер аҙҙан немец пулеметы тағы ла телгә килде. Оҙаҡ атты ул был юлы. Бындай ут аҫтында беҙҙекеләргә атакаға күтәрелеү мөмкин түгел ине. Тап шул ваҡыт Ферапонтов дошман пулеметына ут асты. Соколов уға ярҙам итеп торҙо. Бер арала ике гранатаһын да тондорҙо ул. Совет һуғышсылары, форсаттан файҙаланып, атакаға күтәрелде. Арыҫландай ярһып килделәр ҙә, дошмандың ут позицияһын яулап та алдылар.

* * *

Икенсе көндө таң алдынан фашистар тағы ла ата башланы. Сәғәттәр буйы снаряд, миналар ярылды. Ҡайһы берҙәре, туранан-тура окопҡа килеп төшөп, бөтә бер отделениены харап итте. Яҡтырып килгәндә немецтар һөжүмгә күсте. Уларҙың маҡсаты «Днепр валы» нығытмаһын кире ҡайтарып алыу ине. Ҡоторонған дошман хәҙер яңы көс менән килә. Ферапонтов расчеты Савельевтыҡынан уң яҡтараҡ ине. Ҡисә рота командиры ла, взвод командиры ла яраланды. Владимир Петровичҡа әле ут позицияһында бөтәһен дә алыштырырға тура килә. Бар рота яҙмышы өсөн борсолғанын, ауырлыҡтарҙы үҙенә алырға тырышҡанлығын һалдаттар белә. Уны хатта «Учитель» тип йөрөтә башланылар. Уҡытыусы мәктәптә генә түгел, бөтә ерҙә лә шулай оло йөрәкле, кеше яҙмышы өсөн көрәшә торған илаһи бөйөк зат булырға тейеш икән, тип уйлайҙар. Быны үҙе лә һиҙә Ферапонтов. Кешеләр ышанысын аҡларға тырышыу уға өҫтәмә көс бирә. Ул хәҙер үҙ расчеты хаҡында ғына уйламай, башҡалар өсөн дә борсола. Шуға күрә Савельев янына тиҙ генә барып килергә булды. Ни тиһәң дә, йәш кеше. Уйлап эш итмәүе бар. Һуғышта ҡайһы саҡ приказ биреүгә ҡарағанда, яҡшылап аңлатыу яҡшыраҡ.

— Ваня! — тине ул, яғымлы булырға тырышып, — атырға команда бирелмәйәсәк, ваҡытын үҙең самаларһың, патрондар күп түгел, юҡҡа әрәм-шәрәм итмәйек, миңә уң флангыға китергә тура килә, утты үҙ өҫтөмә аласаҡмын. Пулеметыңды дошман миңә боролғас, ходҡа ебәрерһең, һиңә, бәлки, бөтөнләй атырға тура килмәҫ әле... Ғөмүмән, был мәсьәлә үҙеңдең ҡарамаҡта...

Савельев һалҡын ҡан менән тыңларға, үҙен тыныс, етди, ҡурҡыу белмәҫ кеше итеп күрһәтергә тырышты. «Һеҙ ҙә тимерҙән яһалмаған, беҙ ҙә ҡамырҙан әүәләгән түгел, ниңә һәр утты үҙ өҫтөгөҙгә алаһығыҙ?» — тип әйтергә уйланы, ләкин теле тибрәнде, һүҙе сыҡманы. Сөнки Ферапонтовтың үҙ һүҙле икәнлеген дә белә. Әйткәндәй, арыҫланды ҡуян көрәшкә өйрәтмәй.

— Ярай, Учитель, аңлашылды, — тип ҡуйҙы Савельев.

Тап шул ваҡыт Ферапонтов расчеты янында ғына бер снаряд ярылды. Уның ярсыҡтары хатта былар янынан выжлап үтте. Береһе Савельевтың пилоткаһын осороп алып китте. Ярай, башына теймәне.

Владимир Петрович үҙ расчеты янына йүгерҙе. Барһа, Александр Соколов йөҙ түбән бөгөлөп төшкәйне.

— Саша!.. Сашка!.. Соколов!.. Сокол мой!.. Ҡайһы ерең яраланды?.. — тип, Александрҙы башта торғоҙоп ҡараны, хәле юҡлыҡты белгәс, кире салҡан ятҡырҙы. Был ваҡытта фашистар һаман һөжүм итәләр ине. Ферапонтов ашығырға кәрәклекте аңланы.

— Ҡалдыр мине... «ҡунаҡтарыңды» ҡаршыла... «күстәнәсеңде» ҡыҙғанма... Ҡыр сволочтарҙы... Мин үлмәйәсәкмен... Ҡурҡма... — тигән һүҙҙәрен ишеткәс, Владимир шатланып ҡуйҙы: тимәк, Соколов йәшәйәсәк!..

— Яраһын бәйләгеҙ!.. — тине лә, пулеметын алып, уң флангыға шыуышты Ферапонтов. Үҙе алдан әҙерләп ҡуйған урынға пулеметын урынлаштырҙы. Дошман окопҡа алтмыш метр самаһы ҡалғас ут асты Владимир. Был юлы бөтә тыныслығын юғалтты ул. Ҡурҡыу белмәҫ Соколов янында саҡта үҙен тағы ла көслөрәк итеп тоя торғайны. Соколов әле лә уның ҡолағына: «Тура ҡәбәхәттәрҙе, белһендәр беҙҙең кем икәнлекте», — тип бышылдап торғандай булды.

Ферапонтов пулеметы ошо көрәштә генә дошмандың утыҙ биш һалдат һәм офицерын аяҡтан йыҡты. Фашистар сигенгәс, үҙ расчеты янына килде ул. Был ваҡытта еп өҙөрлөк тә хәле ҡалмағайны. Соколовтың үлеме уны тағы ла нығыраҡ тетрәтте. Дөрөҫ, башта бирешмәҫкә тырышты Александр. «Мин үлмәйем», «Беҙ йәшәйәсәкбеҙ» тип һөйләнде. Ә инде һуңғы минуттарында:

— Бына шулай... Учитель... хушлашырға тура килә... Насар яғым менән иҫкә алма... Төрлө саҡ булғандыр... Һин яҡшы кеше... Ҡайтҡас... Марусяға... балаларыма бөтәһен дә һөйлә... Ризаһыңмы минән?.. Күп рәнйеттем шикелле һине... — тигән өҙөк-өҙөк һүҙҙәрҙе әйтте.

Ферапонтов уны йыуатырға тырышты:

— Сашка!.. Һин ифрат яҡшы кеше!.. Йәшәйәсәкһең!.. Үлем тураһында уйлама ла!..

Яралары күп ине Соколовтың. Уларҙы бәйләү ҙә файҙа килтермәне. Үҙенең физик һәм рухи ныҡлығы ғына үлем менән бер аҙ көрәшергә ярҙам итте. Сентябрҙең зәңгәр күгенә күҙҙәрен тултырып һуңғы мәртәбә бер ҡараны ла, был фани донъя менән мәңгелеккә хушлашты Соколов. Уны шунда ерләнеләр.

* * *

Етенсе сентябрҙә иртән батальон командиры капитан Богатырев уларға ҡаршы дошман күп артиллерия һәм бер батальон пехота туплауы хаҡында хәбәр әйтте.

Немецтарҙың был көсөнә ҡаршы көрәшергә һанаулы ғына һалдаттар ҡалғайны. Шулай ҙа Ферапонтов һәм Савельев пулеметының ҙур көс буласағына ышанды Богатырев. Яугирҙар һаны аҙ булһа ла, ҡорал бар ине. Ферапонтов менән Савельев төндә яраланған, үлгән һуғышсыларҙан ҡалған гранаталарҙы, патрондарҙы, ПТР-ҙарҙы йыйып йөрөнө. Уларға Егоров та, Ғәйнетдинов та ярҙам итте.

— Һин хәҙергә рота командиры, взвод командиры вазифаһын да башҡарырға тейешһең, гвардия өлкән сержанты Ферапонтов, — тине Богатырев, — полк командиры майор Ткачев өҫтәмә көстәр тағы ла буласағын әйтте, ләкин уға ышанып ятмайыҡ, үҙегеҙҙе бер батальон тип хис итегеҙ!..

Батальон командиры Богатыревтың күҙәтеү пункты һул яҡта ине. Ул, әгәр дошман һөжүм башлаһа, атакаға күтәрелмәҫкә ҡушты. Быны ул Ферапонтовҡа ҡарап әйтте.

Фрицтарҙың быларға ҡаршы шаҡтай күп көс туплауы тураһында разведка мәғлүмәт килтерһә лә, уларҙың тәғәйен генә ҡасан контратака башлаясаҡтары хаҡында беҙҙекеләр хәбәрҙар түгел ине әле. Ләкин көтөлмәгән ҡунаҡтар тиҙ арала килеп сығыуҙары көн кеүек асыҡ. Төнөн улар радио аша ла ҡысҡырып торалар. Бирелергә өндәйҙәр. Имеш, ғүмерҙәре һаҡланасаҡ. «Тыңламаһағыҙ, һеҙҙе Днепрға батырып тонсоҡторабыҙ», — тиҙәр.

Дошман контратакаға иртүк күтәрелде. Ҡискә саҡлы уларҙың алты атакаһы кире ҡағылды. Шуның менән бөгөнгө көрәш тамамланды, шикелле. Ҡояш инде байырға яҡынлашып килә. Ләкин немецтар артиллерия, минометтан тағы ла снаряд, мина яуҙырырға тотондо. Улар окоп эргәһендә күпләп ярылды.

Көнө буйы яраланыусылар, үлеүселәр һаман булып торҙо. Яралыларҙы тылға оҙаттылар, үлгәндәрҙе ерләнеләр. Әле бер снаряд Богатыревтың күҙәтеү пункты янына төшөп ярылды. Ферапонтов быны күреп ҡалды. Дошман уты өҫкә яуып торғанда ла, әле йүгереп, әле түше менән шыуышып, Владимир уның янына ашыҡты. Ул барып еткәндә, Богатырев окоп эсенә бөгөлөп төшкәйне. Яраларын эске күлдәген йыртып бәйләргә тура килде. Уны ла тылға оҙаттылар. Айырылышҡанда бик ауыр һөйләште ул.

— Бына... Хәҙер инде... Батальон командиры урынына ҡалаһың... Ләкин артҡа сигенеү юҡ... Тиҙҙән өҫтәмә көс килер... Ҡилмәй ҡалмаҫ... Полк командиры вәғәҙә итте... Ул үҙ һүҙендә тора торған кеше...

Богатыревты оҙатҡас, дошман яғынан снарядтар тағы ла яуа башланы. Береһе Савельев расчеты урынлашҡан окоп янына төшөп ярылды. Был ҡурҡыныс ине. «Бөттөләр» тип борсолдо Ферапонтов. Барһа, харап булған бөтә расчетты күреп әрнене ул. Савельев бөтөнләй балсыҡ аҫтында күмелеп ҡалған. Башы ғына күренеп тора. Ферапонтов бармаҡтары менән уның өҫтөндәге балсыҡты таратырға тотондо. Бер аҙ соҡоғас, Савельевтың тере икәнлеген аңланы. Был ваҡиға тураһында һуңынан бына нисек яҙа Иван Савельев: «Беҙ уның менән бер ротала хеҙмәт иттек. Фронтҡа бергә киттек. Ҡайғы һәм шатлыҡтарҙы бергә бүлешеп йөрөнөк. Хәтеремдә: 1943 йылдың 23 сентябрендә Днепрға килеп еттек. 25 сентябрь көндө уң яҡ ярға сығырға тейешбеҙ. Хәрби техника аҙ ине әле. Һалдаттар һаны ла күп түгел. Уң яҡҡа сыҡҡас, һәр ҡарыш ер өсөн көрәшергә тура килде. Беҙҙең «Бер аҙым да сигенмәҫкә!» — тигән девиз бар ине. Гвардеецтар артҡа сигенергә тейеш түгел. Бөтә көсөбөҙҙө, йәнебеҙҙе йәлләмәйенсә,

алға ырғылдыҡ. Шулай киңәйттек плацдармды. Бер дошман артподготовкаһы ваҡытында снаряд беҙҙең окоп янында ғына ярылды. Мин ер менән күмелеп ҡалдым. Шул ваҡытта Ферапонтов ярҙамға килде һәм соҡоп сығарҙы. Минең аяҡтарым һәм күкрәгем ныҡ яраланған булып сыҡты. Яраларымды бәйләп бөтөргәс, В.П.Ферапонтов былай тине:

— Ну, Ваня, ҡайғырма, һин йәшәйәсәкһең!

Ә мин, ауыр тын ала-ала, һорап ҡуйҙым:

— Беҙ тағы ла осрашырбыҙмы, Владимир Петрович?

Ул мине һөйөп алды:

— Осрашырбыҙ! Һаҡла үҙеңде!..»

Шул һүҙҙәрҙе әйтеп тә бөтөрҙө, бер снаряд Ферапонтовтың үҙ расчеты окобы янына килеп төшөп тә ярылды. Савельевты ҡалдырып, йүгереп барһа, тәгәрәп ятҡан Мәүли Егоровты күреп, башта ни эшләргә лә белмәйенсә торҙо. Ғәйнетдинов, Мәүлиҙең гимнастеркаһын һалдырып, уның яраларын бәйләргә тотондо. Ферапонтов уға ярҙам итте. Ныҡ яраланғайны Мәүли.

— Ҡәрәкмәй... Бәйләмәгеҙ... Барыбер үләм... — тип һөйләнде ул.

Яраларын бәйләһәләр ҙә, быларҙы тылға оҙатырға кеше юҡ ине инде. Үҙҙәре йөрөү түгел, баш та күтәрә алмайҙар. Ул арала немецтар тағы ла һөжүмгә күсте. Хәҙер инде «ҡунаҡтарҙы» Ғәйнетдинов менән икеһе генә ҡаршы алырға тейеш. Өсәү булһалар, Ферапонтов уйлауынса, был фашист эттәренә тағы ла бер мәрәкә күрһәтеп алырҙар ине. Әйтәйек, береһе һулға йүгерә, икенсеһе — уңға, өсөнсөһө бында ҡала. Өсмөйөш яһап атырға була немецтарға. Бына тағы ла Пифагор теоремаһы... Ҡатет... катет... гипотенуза... Тик... өсмөйөш яһау мөмкинлеге юҡ. Бер кеше етмәй...

Ферапонтов һаман шулай элеккесә ҡаушамаҫҡа, ныҡ булырға, дошманды ир-егеттәрсә ғорур ҡаршыларға тырышты. Ғәйнетдиновтың йөҙөндә лә үҙ көсөнә ышаныу ныҡлығы күреп шатланды. «Ике кеше бер булһа, бер генә бөркөт тә уларҙы суҡый алмаҫ», — ти. Былар — хәҙергә икәү. Шул хаҡта әйтеп, шаяртып та маташты Ферапонтов:

— Артҡа сигенеү юҡ... Был юлы икәү генә түшәйбеҙ... Һин бында ҡалаһың... Мин һул яҡҡа һыпыртам... Һиңә яҡынлашып килгәндә, арт яҡтарынан ут асам... Улар миңә табан боролаҫаҡ... Шул саҡта һин һыйларға тотон быларҙы утлы «кәнфитең» менән... Ике ут араһында ҡалған ҡанэскестәр туйҙа иҫергән ахмаҡтар кеүек сайҡала башлаясаҡ... Бына... бер үҙеңә бер «максим»... Мин Савельевтыҡын алам...

Йүгереп барһа, Савельевтың ҡаты ыңғырашҡан тауышын ишетте.

— Ваня!.. Милый!.. Терпи!.. «Ҡунаҡтарҙы» һыйлап оҙатайыҡ инде... Унан һине ҡарармын... — тип һөйләнде лә, ике граната, пулеметын алып, һул яҡҡа йүгерҙе.

Немецтар был юлы көткән ерҙән килеп сыҡманы. Ферапонтов уларҙы үткәреп ебәрергә тейеш ине бит. Унан һуң арт яҡтан ут асырға... Ә улар туп-тура Владимир Петровичтың өҫтөнә килә. Был ҡурҡыныс ине. Хәҙер бер үҙенә генә көрәшергә тура килә. Ярай ҙа Ғәйнетдинов атһа... Уның Ферапонтовҡа пуля тейҙереүҙән ҡурҡып ятыуы бар...

Владимир бер ҡыуаҡ төбөнә урынлашҡайны. Тиҙ арала аҙ ғына маскировка яһарға ла өлгөрҙө. Әлбиттә, фриц өҫтөңә килеп сыҡһа, төкөрә ул маскировкаңа. Ә улар килә. Бер нисәһе туп-тура Ферапонтовҡа килә. Уларын граната менән дә тонсоҡторорға була. Икенсе төркөм алыҫыраҡ. Үткәреп ебәрмәйенсә ут асһаң, уйлаған план барып сыҡмаясаҡ. Владимир Петрович ергә һеңеп ятырға булды:

күрмәй үтеп китерҙәр, бәлки. Фронтта ваҡытһыҙ ут асыу күп осраҡта үҙ башыңа бәлә генә. Күрәләр икән — һуғышыуҙың икенсе бер яйы табылыр. Бөтәһен дә алдан уйлап бөтөрөп булмай. Немецтар инде яп-яҡында. Ниҙер мығырлауҙары ишетелә. Бына улар үтеп киттеләр. Әммә арттараҡ ҡалған береһе күреп ҡалды. Башта аптырап ҡарап торҙо. Үлгән һалдат ята, тип уйланы булһа кәрәк. Килде лә типкеләргә тотондо. Ферапонтов һелкенмәне. Шунан немец һалдаты пулемет өҫтөнә түшәлгән ағас ботаҡтарын алып ташланы ла, ҡарарға эйелде. Ферапонтов, һеләүһендәй ялт һикереп, тегене эләктереп алды, ҡысҡырмаһын өсөн ауыҙын ҡаплап, ергә һуҙып һалды. Ҡыҫҡа ғына буйлы, ябыҡ, ун һигеҙ йәштәрҙәге фриц ине был. Уны юҡ итеү ауырға тура килмәне. Был ваҡытта ҡалғандары шаҡтай алыҫлашҡайны инде. Ферапонтов арттарынан көслө ут асты. Ул арала Ғәйнетдинов пулеметы телгә килде. Ферапонтов ике гранатаһын да томорҙо. Граната Ғәйнетдинов яғынан да осто. Немецтарҙың иҫән ҡалғандары уң яҡҡа табан йүгереп ҡотолдо. Ныҡ алйығайны Ферапонтов. Шулай ҙа үҙен һаман батыр һуғышсы итеп, ир-егеттәрсә тоторға тырышты. Окопҡа ғорур атлап, еңеүсе сифатында килде. Тик бында тағы бер фажиғә көткән. Ғәйнетдинов та аунап ята ине. Яраларын бәйләй башлағас, бик ауырлыҡ менән һөйләште ул.

— Кәрәкмәй... Владимир Петрович... файҙаһы юҡ... Бәйләмә... Бер үтенесемде генә үтә... Мәрйәмгә хат яҙ... «Батырҙарса көрәшеп үлде» тиң... Мине ғәфү итһен... Теге ваҡыттағы ахмаҡлығым өсөн... Мөмкин булһа... балаларыма ярҙам итегеҙ...

— Юҡ, юҡ, ундай һүҙҙәр кәрәкмәй... бөтәбеҙ ҙә йәшәйәсәкбеҙ... хәҙер өҫтәмә көс килеп етер... һеҙҙе госпиталгә оҙатырбыҙ, түҙегеҙ... — тип һөйләнде, һәр береһен яйлап ҡына окоптан алыҫҡараҡ ташый башланы: немецтарҙың тағы ла һөжүм итәсәктәрен белә ине ул — былар иҫән ҡалһындар...

Өсөһөн дә бер снаряд соҡорона урынлаштырып, окопҡа кире килде Владимир Петрович. Пулеметтарын яйлап, дошман яғына ҡаратып ҡуйҙы.

Был ваҡытта ҡояш байып килә ине инде. Ферапонтов кескәй генә хат яҙырға булды. Бер яҙҙы, бер йыртты ул. Тағы ла яҙҙы. «Мария! Йәнем! Бер үҙем бер батальон немец һөжүмен ҡаршыларға торам. Иҫән ҡалыу өмөтө юҡ. Һуңғы патрон ҡалғансы көрәшәсәкмен. Артҡа сигенмәйәсәкмен. Бының өсөн биргән антым бар. Ҡыҙыма бөтәһен дә аңлатырһың. Ныҡ бул, йәнем! Минең өсөн йомшаҡлыҡҡа бирелмә. Ҡайғыңды еңеп йәшә. Үле хәбәрем килһә, әсәйгә тиҙ генә әйтмә. Ауырыу йөрәге ҡайғыны күтәрә алмаҫ. Аҡрынлап, яйлап һөйләрһең. Хуш, йәнем!»

Дошман тағы ла һөжүмгә күсте. «Максим! Милый! Бирешмәйәсәкбеҙ!.. Шулай бит?.. Һин генә ҡарышма!.. Мин түҙермен!.. Һине яттар ҡулына бирмәм...» — тип һөйләнде ул.

Был юлы дошманды бик яҡын килтермәҫкә, улар алыҫта саҡта уҡ ата башларға уйланы ул. Өҫкә килеп ҡапланғас, бөтәһен дә сүпләп бөтөрә алмаҫ. Бер гранатаны үҙе өсөн айырып ҡуйҙы — тере килеш дошманға бирелмәйәсәк.

Немецтарға йөҙ метр самаһы ҡалғас ут асты Ферапонтов. Тап шул ваҡыт арт яҡта көслө «Ура!» тауыштары яңғыраны. Беҙҙекеләр! Улар менән бергә атакаға ташланды Ферапонтов. Шул ҡыҙыулыҡ менән улар дошмандың икенсе ут позицияларын да баҫып алдылар.

Унан һуң Ферапонтов бер нисә һалдат, санинструктор менән яралылар янына килде. Был ваҡытта Мәүли менән Сабирйән күҙҙәрен мәңгегә йомғайнылар. Савельевты госпиталгә оҙаттылар.

* * *

Көндәрҙән бер көндө, һуғыш тынған арала, Ғәйнетдиновтың ҡатыны Мәрйәмгә, Соколовтың Марусяһына хат яҙмаҡсы булды Ферапонтов. Шул саҡ ялан сумкаһынан теге ваҡытта яҙған хаты килеп сыҡҡас, аптырап китте ул. Үҙен-үҙе тиргәп алды. «Биғәләш, шундай хат яҙалар тиме ни, ярай әле ебәрелмәйенсә ҡалған», — тип маңлайына бер һуғып ҡуйҙы. Шулай ҙа йыртып ташларға көсө етмәне. Ниңә икәнлеген үҙе лә уйлап тормайынса, сумкаһына кире һалды. Ғәйнетдиновтың ҡатынына былай тип яҙҙы ул: «Мәрйәм ханым! Теге ваҡытта Сабирйән Ғәйнетдиновтың батырҙарса үлеүе хаҡында хәбәр килгәйне бит. Ә ул иҫән булған. Беҙ уның менән Днепрҙы кискәндә осраштыҡ. Һеҙҙең арала ниндәйҙер аңлашылмаусылыҡ килеп сыҡҡан, шуға күрә Сабирйән бөтөнләй хат яҙмаҫҡа уйлаған. Күп тапҡырҙар һөйләшкәс, ул был яңылыш фекеренән кире ҡайтты, һеҙгә хат яҙып ебәрҙе. Әммә унан һуң оҙаҡ йәшәй алманы Сабирйән. Батырҙарса көрәшеп үлде. «Батырҙарса көрәшеп» тигән һүҙҙәр һеҙҙе йыуатыр өсөн генә әйтелмәй. Фашистарҙы ныҡ ҡырҙы ул. Ирегеҙ менән ғорурлана алаһығыҙ. Был хаҡта балаларығыҙға ла һөйләгеҙ. Мәхмүт өсөн ул айырыуса кәрәк. Атай батырлығы өсөн бала һәр ваҡыт ғорурланып йәшәй. Сабирйәндең теге үлеме ялған булған. Уның нисек икәнлеген үҙе аңлатып яҙғандыр. Был хаҡта ҡайтҡас үҙем дә бәйнә-бәйнә һөйләп бирермен. Был үлеме ысын. Үҙем ерләнем. Ауыр булды, әлбиттә. Һеҙ, Мәрйәм ханым, артыҡ төшөнкөлөккә бирелмәгеҙ. Үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ. Балаларығыҙ хаҡына. Әсәнең ҡайғылы йөҙө бала йөрәген ныҡ әрнетә. Әрнеүле йөрәк менән үҫкән бала күңеле мәңге китек була. Ҡайтҡас, һис шикһеҙ, балаларығыҙға ярҙам итермен. Фронтташ дуҫтың ҡайғыһы ла, шатлығы ла уртаҡ. Сабирйән үлемгә ышанмай ине. Юҡ, ул үлмәне. Ул йәшәй. Беҙҙең менән һаман да атакаға бергә бара. Ғәйнетдинов кеүек батыр һалдаттар еңеүгә рух бирә. Ҡайтып күрешкәнсегә тиклем, Мәрйәм ханым!»

Александр Соколовтың да ҡатынына йөрәк йылыһы менән яҙҙы ул: «Маруся Ивановна! Яҙмыш мине Александр Соколов менән күп тапҡырҙар осраштырҙы, һеҙ был хаҡта яҡшы беләһегеҙ. Шуға күрә улар хаҡында яҙып тороу ҙа кәрәкмәй. Һуңғы осрашыу һуғыштың иң ауыр ваҡытында булды. Был хаҡта ул үҙе лә яҙғандыр. Беҙ һеҙҙең менән ныҡ дуҫлашып киткәйнек, һеҙҙең асыҡ йөҙлө, ҡунаҡсыл, мәрхәмәтле була белеүегеҙ ныҡ шатландыра торғайны. Беҙ Александр менән бер расчетта булдыҡ. Ул күрһәткән батырлыҡтарҙы яҙып бөтөрөү мөмкин түгел. Ҡайтҡас, бөтәһен дә бөртөкләп һөйләрмен. Александрҙың кешелекле була белеүе һоҡландыра ине мине. Яуҙа уның икенсе бер ыңғай сифаты асыҡланды. Ул үҙенең иленә, халҡына ныҡ тоғро, батыр йөрәкле яугир икәнлеген күрһәтте, һеҙ уның менән ғорурлана алаһығыҙ, Маруся Ивановна! Был хаҡта балаларығыҙға ла һөйләгеҙ. Улар аталары менән ғорурланып йәшәһендәр. Минеңсә, һеҙ нескә күңелле, йомшаҡ тәбиғәтле кеше. Александр Соколовтың ҡайғыһынан үҙегеҙҙе бөтөрмәгеҙ. Балаларығыҙ өсөн йәшәгеҙ! Мин ташламам һеҙҙе! Ҡайтҡас, элеккегә ҡарағанда ла йышыраҡ булырға тырышырмын. Ҡулымдан килгәнсә ярҙам итермен.

Александрҙы үҙ ҡулым менән ерләнем. Был минең өсөн бик ауыр булды. Йөрәгемдең яртыһы уның менән бергә күмелгәндәй тоҫло. Ә мин уның ярты йөрәген алдым, шикелле. Хәйер, яуҙаш дуҫтарҙың бөтәһе лә уртаҡ. Бына тиҙҙән тағы ла атакаға күтәреләсәкбеҙ. Мин хәҙер Соколов кеүек батыр дуҫтарым өсөн дә үс алырға тейешмен дошмандан...»

Шул урында фекер ебе өҙөлөп ҡалды: фрицтар тағы ла контратакаға күсте. Дошмандың танкылары үкереп килә ине. Элекке полкташтарынан бер үҙе ҡалды

ул хәҙер. Днепр буйы далалары өсөн генә лә күпме кеше ҡара ер ҡуйынына инеп ятты, күпме көрәштәштәре яраланды. Уны полкташтары «философ» тип атағайны. Философ бөйөк аҡыл эйәһе булырға тейеш. Ә ҡанлы һуғыштан ниндәй аҡыл эҙләмәк кәрәк? Кешелекһеҙлектең иң һуңғы нөктәһенә еткән фажиғә был. Йыртҡыс хайуандар ҙа эшләмәй бындай ахмаҡлыҡты. Ә кешеләр бер-береһен үлтереүҙе себен һытыу урынына ла күрмәйҙәр. Кешелеклелек «теорияһы» бер философ тарафынан да эшләнмәгән. Философия ҡапма-ҡаршы фекерҙәр көрәшен өйрәнә. Кешелеклелек сифаттарында ниндәй ҡапма-ҡаршылыҡтар бар? Ниңә философтар был етди мәсьәләгә күҙ йомоп ҡарай? Әгәр цивилизация кешелеклелек дәрәжәһенең иң бөйөк серҙәрен аңлау кимәленә күтәрелһә, ҡан ҡойош булмаҫ ине. «Яҡшы кеше дошмандан дуҫ яһар» тигән мәҡәлде халыҡ хан заманында уҡ әйткән. Ә ниңә ил башлыҡтары халыҡтың ошо бөйөк аҡылын һанға һуҡмайҙар? Ниңә халыҡ аҡылһыҙ ил башлыҡтарының яуыз ниәтенә кәртә ҡормай? Ҡасан халыҡ үҙенең бөйөк көсөн күрһәтә алыр? Хәҙергә уның аҡылы бығаулы шул. Уның ирке юҡ. Үлтерергә ҡушалар икән — үлтерә. Теләмәһә лә үлтерә. Быларҙың бөтәһе лә «аҡыллы баштарҙың», «фекер эйәләренең» кешелеклелек тураһында томанлы уйланыуҙарынан килә. Ул томандар таралыр бер ваҡыт. Кешеләр айыҡ фекер йөрөтөр. Күңелдәре аяҙ көн кеүек булыр. Кеше үлтереү иң ҙур гонаһ һаналыр. Ә хәҙергә улар бер-береһен ҡырып шөһрәт ҡаҙана. Был — тарих көҙгөһөнә төшкән юйылмаҫ ҡара тап. Киләсәк быуын кешеләре был ҡанлы ваҡиғаларҙы йөрәк әрнеп иҫкә аласаҡ.

Шулай уйланы Ферапонтов. Кешелеклелек тураһындағы фәлсәфәһенең дөрөҫлөгөнә уның иманы камил. Әммә уға кеше үлтереп ҡан ҡойорға тура килә, сөнки быны Ватан талап итә. Һуғыш яланында яугирҙың Ватанға тоғролоҡло булыуы ла кеше үлтереүгә бәйләнгән. Ете ерҙән яраланды инде ул. Госпиталгә оҙатырға уйланылар — тыңламаны. Һуңғы яраһы уң аяғында ине. Бәйләгәс, ауыртҡаны баҫылғандай булды. Әммә хат яҙғанда үлтереп һыҙларға кереште. Шулай ҙа иғтибар итмәҫкә, үҙен ныҡ тоторға тырышты ул.

— Һеҙ ныҡ кеше икәнһегеҙ... Шаҡтай ҙур йәштә күренәһегеҙ бит, ҡатынығыҙ, балаларығыҙ барҙыр. Ҡарышмағыҙ, тыңлағыҙ, китегеҙ госпиталгә... — тип ялынды йәшкә унан да өлкәнерәк санинструктор.

Яҙған хаттарын уға тапшырҙы ла:

— Борсолмағыҙ минең өсөн, — тине ул.

Эйе, китһә, иҫән ҡалыр, әсәһе, ҡатыны, ҡыҙы, туғандары янына, яратҡан хеҙмәтенә кире ҡайтыр ине ул. Ләкин фронт яланын ташлап китеү мөмкин түгел. Командирҙарҙың күбеһе сафтан сыҡты. Яңы килгәндәрҙе атакаға күтәрергә кәрәк. Тағы ла ышаныслыраҡ өҫтәмә көс килеп, плацдармды нығыраҡ киңәйтһәләр, уның яҙмышы өсөн борсолған санинструкторҙың һүҙен тыңлар, бәлки. Әммә уйлағанса килеп сыҡманы, өҫтәмә көс булманы. Был алышта ул, бөтә яраларын онотоп, командалыҡ итеүҙе лә үҙ өҫтөнә алды, пулеметтан атыуҙың ысын «сәнғәтен» дә күрһәтте. Үҙе һәләк булһа ла, бик күп кешеләрҙең ғүмерен һаҡлап ҡалды. Бер айҙан һуң уға Советтар Союзы Геройы тигән исем бирелде.

**Авторҙан бер кәлимә һүҙ**

Украинаның Михайловка ауылы янындағы утлы көрәштә Башҡортостандың Иглин районында ойошторолған 469-сы миномет полкы һуғышсыларына Владимир Петрович Ферапонтов хеҙмәт иткән уҡсылар дивизияһы менән бергә дошманға ҡаршы көрәшергә тура килде. Уҡсылар сигенһә, беҙ, минометсылар,

мина уты менән дошман юлын бүләбеҙ. Уҡсылар алға китһә, фашистарҙы арттан тар-мар итәбеҙ. Мин 469-сы миномет полкының 1-се расчеты командиры инем. Бер ваҡыт ҡамау йәтмәһенә эләктек. Өс тәүлек ашамай-эсмәй һуғыштыҡ. 40 кешенән дүртәү генә ҡалдыҡ. Дүртебеҙ ҙә яралы. Беҙгә китергә мөмкин ине. Ләкин намыҫыбыҙ һуңғы тамсы ҡан тамғансы көрәшергә ҡуша. Ватанға биргән антыбыҙ бар. Беҙҙе үҙебеҙҙекеләр килеп ҡотҡарҙы. Михайловканы алғас, Ферапонтов менән ҡосаҡлашып күрештек, адрестарыбыҙҙы алыштыҡ. Һуғыш бөткәс, хат алышабыҙ, осрашабыҙ, ҡунаҡ булышабыҙ, йәнәһе.

Днепрҙы ла бер тирәләрәк кисергә тура килде. Рәхмәт яҙмышҡа! Йәнә осраштырҙы беҙҙе. Һуңғы күрешеүебеҙ булды ул.

Яңғыҙ һандуғас яҙ килтермәй, тигәндәй, бер үҙе ҡалғансы атмайынса, Ферапонтовҡа китергә мөмкин ине бит. «Һуғышта ваҡыт-ваҡыт бер яугирҙың бөтөн дивизия өсөн көрәшкән сағы була», — тигән һүҙҙәр йөрөй фронтта. Ферапонтов, фашист-шайтандар ябырылғанда, ошо хаҡта уйланғандыр, бәлки. Ысынында иһә аң-аҡылында, хис-тойғоһонда, йөрәгендә ҡайнаған ҡайнар ҡанында «ир яҙмышы — ил яҙмышы» тигән иманлы хәсиәт булғандыр. «Ватан мөхәббәте» тип атарға мөмкиндер быны.

Днепрҙағы утлы, ялҡынлы, дауыллы көрәштә күрһәткән батырлыҡтар өсөн мин дә Советтар Союзы Геройы исеменә тәҡдим ителгәйнем. Ләкин килеп сыҡманы. Мәгәр Ферапонтовтыҡы өсөн шатланыуымдың иге-сиге булманы. Уныҡын үҙемдеке итеп тә ҡабул иттем шикелле. Был һүҙҙәрҙе 90 йәшемде ҡаршылаған көндәрҙә яҙам. Хәрби хеҙмәттән 7 йыллыҡ белем менән ҡайтҡайным. Үҙаллы уҡып, аттестат алдым ҡулға. Унан һуң институт, аспирантура, докторантура тамамларға тура килде. Әҙәби ижад «Бәхет» тигән шиғырҙан башланғайны. Поэмалар яҙҙым. Унға яҡын повесымдың үҙәгендә — фронтовик образы. Тиҫтәнән артыҡ романымда ла шул уҡ хәл. Егермеләп сәхнә әҫәремдә лә шулай. Фронтовиктар Муса Гәрәев, Әмәтхан-Солтан, Мәғүбә Сыртланова, Ләйлә Санфирова, Тимерхан Нәжмиев, Владимир Ферапонтов һәм башҡалар тураһында очерктар яҙҙым. Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандары батырлығын сағылдырған «Яҙмыш ҡорбандары», «Ут эсендәге мөхәббәт», «Ҡанлы бәхет», «Төнгө фәрештәләр», «Беҙ фронттан ҡайтҡанда» тигән романдарым уҡыусылар тарафынан йылы ҡабул ителде. Әҫәрҙәрҙең төп идеяһы — кешелеклелек!

Владимир Петрович Ферапонтов тураһында башта очерк яҙҙым. Бының өсөн ул йәшәгән Дәүләкән районына махсус барырға тура килде. Дәүләкәндең бер урамына, ул уҡытҡан мәктәпкә уның исеме бирелде.

Һигеҙ романым донъя күрҙе инде. Туғыҙынсыһы, унынсыһы — баҫылыу алдында. Ун беренсеһе Ферапонтов тураһында булырға тейеш ине. Әммә ҡартлыҡ аҡылы шашынмаҫҡа ҡуша. Ҡартлыҡтағы аң-аҡыл дарманы йәшлектәге хис-тойғо дәртлелеге менән килешә алмаҫҡа ла мөмкин. Шул хаҡта баш ватып, очеркты документаль повесть итеп яҙыуҙы хуп күрҙем. Һүҙ-һүрәт, һүҙ-фекер, һүҙ-тойғо ҡояшы нуры тураһында уйланһаҡ, ауыҙ тултырып, «повесть» тип атарға ихласлыҡ та етмәй һымаҡ. «Повесть-эссе» тип атау дөрөҫөрәк булыр. Хәйер, жанр мәсьәләһе нәҙәриәтсе (теоретик) өсөн кәрәк. Ә инде Ферапонтов тураһындағы роман кешеләр күңеленә яҙылған. Дәүләкәндә уны кешелеклелек пәйғәмбәре дәрәжәһенә еткереп иҫкә алалар. Был иҫтәлек зәңгәр күк йөҙөнә фәрештә ҡәләме менән яҙып ҡуйылған. Ул мәңгелек Ватан мөхәббәте булып балҡый. Шәүкәтле, шәфәғәтле, ҡәҙерле роман. Ҡемдер аҡ ҡағыҙға күсереп аласаҡ әле уны.